ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-5 февраль - март (шаҡай - буранай) 2026

№8 (1203)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Операторҙарға...**

өҫтөнлөктәр ҙә бар



3

**Һәр саҡ берҙәм булдыҡ!**

ҘУР ҺӘМ ТАТЫУ ҒАИЛӘ ЙЫЛЫ 2026 ГОД БОЛЬШОЙ И ДРУЖНОЙ СЕМЬИ

4,6

**Ерҙең ҡояшлы яғындалар**



11,16

**Хәҙрәт булыуы еңелме?**



12-13

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Ысынлап та лайыҡлы кеше ҡайҙалыр төптә йәшеренеүсән. Ул халыҡ араһынан сыҡмай, һаранланмай, ығы-зығыһыҙ йәшәй һәм үҙе тураһында онотторооусан.***

***(Екатерина II).***

*АФАРИН!*

# ЕГЕТТӘРЕБЕҘ ҺЫНАТМАЙ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Ватанды һаҡлаусылар көнөндә Рәсәй Геройы исеменә һәм Батырлыҡ орденына лайыҡ булған хәрби хеҙмәткәрҙәргә дәүләт наградалары тапшырҙы.**

"Алтын Йондоҙ" миҙалын дәүләт башлығы яҡташыбыҙ, Көнсығыш хәрби округының 5-се дөйөм ғәскәр армияһы 60-сы айырым мотоуҡсылар бригадаһы мотоуҡсылар батальоны ротаһы командиры капитан Вәсил Камил улы Ямалетдинов түшенә лә ҡаҙаны. Уға шулай уҡ "Рәсәй Федерацияһы Геройы" исеме бирелде.

Вәсил Ямалетдинов командаһы аҫтында штурмлау ротаһы яугирҙары беренселәрҙән булып Гуляйполе ҡалаһына бәреп инә, тораҡ пунктты штурмлай һәм еңеүгә юл аса. "Ошо залда - командование вәкилдәре, махсус һәм оператив подразделение офицерҙары. Һеҙҙең грамоталы һәм ҡыйыу эш итеүегеҙ, шәхси батырлығығыҙ һәм тәүәккәллегеҙ иң көсөргәнешле участкаларҙа һәм йүнәлештәрҙә һөжүм итеү операцияларын ентекле планлаштырырға һәм ғәмәлгә ашырырға ярҙам итте", - тине Владимир Путин юғары дәүләт наградаларын тапшырғанда.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Геройҙы юғары награда менән ҡотланы. "Яҡташыбыҙ менән ғорурланабыҙ! Республика халҡы исеменән Вәсил Ямалетдиновты ҡотлайым!" - тине ул.

Капитан Вәсил Ямалетдиновтың тамырҙары Салауат районына барып тоташа. Атаһы Камил Ямалетдинов сығышы менән районның - Әлкә, ә әсәйе Зафира Ямалетдинова Башҡорт Илсекәйе ауылынан. Буласаҡ Герой 9 класҡа тиклем тыуған ауылы мәктәбендә уҡый, ә һуңынан Усть-Катав механика техникумын тамамлай. Йәш сағында бокс менән мауыға. Армия хеҙмәтен Алыҫ Көнсығышта үтә, саҡырыу буйынса хеҙмәте тамамланғас, контракт төҙөй. Унда ул өйләнә, ҡыҙҙары тыуа. Йыш ҡына Әлкәгә ҡайтып йөрөй.



*ЗАМАН БАШҠОРТО*

# ИХЛАС, АСЫҠ ЙӨРӘКЛЕЛӘР...

## Урал батыр һүҙенә сарсап йәшәй



**"Әй Йола" төркөмө башҡарыуындағы "Һомай" йырының донъя кимәлендә яңғырауы, үҙебеҙсә әйткәндә, интернетты "шартлатыуы" музыка буйынса эксперттар араһында бәхәстәр тыуҙырҙы. Берәүҙәр был уңышты осраҡлы күренеш тип һанаһа, икенселәр уның серен йырҙың бөтә төрки халыҡтары араһында уртаҡ булған темаға арналыуында күрә, йәғни был феноменды төркилеккә генә бәйләргә тырыша. Унышы шулайҙыр ҙа, әммә "Һомай"ҙың Европа илдәрендә айырата популярлыҡ яулауын нисек аңлатырға һуң улайһа? "Русский шаффл" телеграм-каналының музыкаль тәнҡитсеһе Олег Кармунин, йырҙың иң беренсе нәүбәттә ҡаҙаҡ сегментында популярлыҡ яулауын һыҙыҡ өҫтөнә алып, төркөмдөң башҡарыусыһы Аделдың (Әҙиләнең) матурлығын композиция уңышының "ингредиенты" тип атай. Музыка буйынса журналист Михаил Маргулис "Һомай" йырының көтөлмәгән популярлығын социаль селтәрҙәр алгоритмдарында барлыҡҡа килгән "вирус" сюрприздарында күрә, йәнәһе, шуға күрә лә йыр ҙа вируслыға әүерелгән. Ә музыкаль эксперт Владимир Полупанов иһә вирусҡа әүерелгән бөтә йырҙар ҙа донъя чарттарына эләкмәй, шуға күрә был феноменды прогнозлауы бик ҡатмарлы булған уңыш тип билдәләй.**

(Дауамы 8-10-сы биттәрҙә).

12+

**✓ Беҙҙең ауыл колледждары районларҙа иң сағыу һәм матур бина булырға тейеш. Шуға аҡса йүнәлтегеҙ. Был йәштәр бер ҡайҙа ла китмәһен өсөн 100 процент гарантия булып тора.**



ҠЫҪҠАСА

# ҮЗБӘКТӘР МЕНӘН БЕРЛЕКТӘ...

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Үзбәкстан делегацияһының Өфөгә сәфәре тураһында һөйләне.** Баш ҡалабыҙға Үзбәкстандың Ташкент өлкәһе хакимы Зойир Мирзаев етәкселегендәге делегация килде. Яҡтар шулай уҡ берлектәге "Бекабад" технопаркы өҫтөндә эштәр барышын тикшерҙе. 2026 йылдың яҙында майҙансыҡта төҙөлөш-монтаж эштәренә тотонорға ниәтләйҙәр. Башҡортостан Башлығы проекттың перспективалы булыуын әйтте. "Хеҙмәттәшлектең мөмкинлектәрен оҙаҡ һәм ентекле тикшерҙек. Технопарк буйынса эштәр алып барырға тейешбеҙ, беҙҙең яҡшы мөмкинлектәр бар. Нимәләр тураһында һөйләшеп килешкәнбеҙ, барыһын да тормошҡа ашырырға кәрәк", - тине республика етәксеһе. Проектты тормошҡа ашырыу барышы видео-конференц-бәйләнеш ярҙамында ла контролдә тотола, тип билдәләне ул. Үзбәкстан вәкилдәре менән киләһе видео-конференц-бәйләнеш 2 мартҡа билдәләнгән.

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы "Татлы Бал" республика конкурсын үткәреү тураһында иғлан итте.** "Баллы" конкурсҡа Башҡортостан, шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа төбәктәре умартасылары ҡатнаша ала. Ғаризалар 13 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Бының өсөн конкурс комиссияһына бал һәм башҡа бал продукцияһы өлгөләрен тәҡдим итергә кәрәк. "15 марттан 17-нә ҡәҙәр конкурс комиссияһы ағзалары бал өлгөләрен органолептик күрһәткестәре (таҙалығы, ҡуйылығы, төҫө, еҫе, тәме) буйынса баһалай", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр республика Ауыл ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. "Татлы Бал" конкурсы еңеүселәрен һәм призерҙарын бүләкләү тантанаһы 20 мартта "Агрокомплекс - 2026" халыҡ-ара күргәҙмәһендә була.

✓ **Февралдән илдә ҡайһы бер үҙгәрештәр үҙ көсөнә инде - социаль түләүҙәр индексацияланды, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Финанс министрлығында.** Мәҫәлән, Әсәлек капиталы 5,6 процентҡа артты. Хәҙер беренсе балаға - 728 900 һум, икенсеһенә 234 300 һум түләнә. Әгәр ғаилә беренсеһе өсөн алмаған булһа, икенсеһенә 963 200 һум бирелергә тейеш. Әсәлек капиталының ҡалған суммаһы ла автоматик рәүештә арта. Аҡсаны торлаҡ, белем алыу, әсәнең пенсияһы йәки инвалид балаларҙы йәмғиәткә яраҡлаштырыу өсөн тотонорға мөмкин. Пенсияға билдәләнгән түләү икеләтә арта. 80 йәше тулғандар һәм I төркөм инвалидтары өсөн өҫтәмә 9600 һумдан 19 200 һумға тиклем тәшкил итте. Ҡайтанан иҫәпләү ғаризаһыҙ - автоматик режимда башҡарыла. Социаль пособиелар 5,6 процентҡа индексацияланды. Мәҫәлән, бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған һәм баланы йәш ярымға тиклем ҡарау буйынса пособие, бөтә төркөм инвалидтарына һәм инвалид балаларға түләүҙәр, хәрби хәрәкәттәр ветерандарына һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға пособиелар, Рәсәй Геройҙарына, Хеҙмәт Геройҙарына һәм Дан ордендарының тулы кавалерҙарына түләүҙәр.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЙӘШӘҮ СИФАТЫ ЯҠШЫРА

**2025 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Йәшәү сифаты буйынса милли рейтингта бер баҫҡысҡа күтәрелде һәм 9-сы урынды алды.**



Ошо көндәрҙә Стратегик башланғыстар агентлығының күҙәтеү советы ултырышында Рәсәй Президентын Владимир Путинды күләмле тикшереnеү һөҙөмтәләре менән таныштырҙылар. "Рейтинг методологияһы төбәктәрҙә йәшәүселәрҙән фекеренә, шулай уҡ статистика һәм геоаналитика мәғлүмәттәренә таянып төҙөлә. Иҫәпләгәндә тормоштоң төп өлкәләрен үҙ эсенә алған 12 йүнәлеш буйынса 149 күрһәткес иҫәпкә алына. Матди именлек, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, хәүефһеҙлек, спортты, мәҙәниәтте үҫтереү һәм башҡалар", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Уның һүҙҙәренсә, һуңғы йылдарҙа төбәк ыңғай үҫеш динамикаһын һаҡлап ҡалды. "Былтыр беҙ тәүге тапҡыр йәшәү сифаты буйынса иң яҡшы ун төбәк иҫәбенә индек, 2021 йылда 40-сы ғына инек. Был һандар артында - беҙҙең идара итеү командаһының күләмле һәм ныҡышмалы хеҙмәте. Республикабыҙҙа йәшәү, эшләү, уҡыу һәм балалар тәрбиәләү унайлы булһын өсөн артабан да күп көс һалаҫаҡбыҙ", - тип билдәләне Хәбиров.

# КОЛЛЕДЖДАР ЯҢЫРТЫЛА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә республика ҡалаларында һәм районларында колледждарҙы яңыртыу программаһын дауам итергә ҡушты. Уның һүҙҙәренсә, Балтаста, Шишмәлә, Иглиндә һәм Мишкәлә эштәр бара.**

- Туғыҙынсы класты тамамлаусыларҙың 66 проценты колледждарҙы һайлай. Был беҙҙә әлегә ҡәнәғәтләндерә. Беҙҙең ауыл колледждары районларҙа иң сағыу һәм матур бина булырға тейеш. Шуға аҡса йүнәлтегеҙ. Был йәштәр бер ҡайҙа ла китмәһен өсөн 100 процент гарантия булып тора. Ауыл ҡыҙҙары-егеттәренә үҙ районында белем алыу күпкә яҡшыраҡ һәм отошлораҡ. Сөнки ҡалала йәшәү - ҡиммәт, ата-әсәләр ҙә балалары өсөн борсола, - тине Радий Хәбиров.

Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин үҙенең докладында билдәләүенсә, яҡын арала республикала 10 колледж тулыһынса яңыртылырға тейеш. Мәҫәлән, "Йәштәр һәм балалар" милли проектының "Профессионалитет" федераль проекты сиктәрендә 2026 йылда конкурс йомғаҡтары буйынса республикала 8 яңы кластер булдырыла. Йәмғеһе улар республикабыҙҙа 27-гә еткерелә. Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы үткәргән конкурс һайлап алыу һөҙөмтәләре буйынса, "Агросәнәғәт комплексында кадрҙар" федераль проекты сиктәрендә Н. М. Сибирцев исемендәге Аксенов агросәнәғәт колледжына һәм З. Ш. Аҡназаров исемендәге Урал арьяғы агросәнәғәт колледжына матди-техник базаны яңыртыу өсөн ике йылда 285 миллион һумдан ашыу күләмдә федераль субсидия бүленә.

# ХӘСТӘРЛӘП...

**Башҡортостандың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары Рөстәм Ғиззәтуллин һөйләүенсә, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм МХО-ла һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаилә ағзаларына 381 ер участкаһы бирелгән. МХО-ла ҡатнашыусылар - 102, һәләк булған яугирҙарҙың ғаиләләре 279 участка алды, тип асыҡлыҡ индерҙе ул.**

Рөстәм Ғизәтуллин һүҙҙәренсә, ер участкалары биреүҙән тыш, бөгөн шифахана-курортта дауаланыу программаһы айырыуса кәрәкле. 2025 йылда республика шифаханаларында 3814 кеше дауаланған, был 2023 йылға ҡарағанда 2,2 тапҡырға күберәк. Программа тормошҡа ашырыла башлағандан алып 9155 МХО яугирына һәм уларҙың ғаилә ағзаларына шифахана-курорт хеҙмәттәре күрһәтелгән.

Әлеге ваҡытта Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың туғандары конкурс буйынса һайлап алынған 15 шифаханала дауалана. Республиканың төп шифаханалары - "Ассы", "Йәшел сауҡалыҡ", "Янғантау", "Ҡарағай", "Красноусол", "Танып", "Йомату", "Яҡтыкүл", "Ҡайынҡай", шулай уҡ "Энергетик" дауалау-һауыҡтырыу үҙәге, "Әй" профилакторийы, "Кайындар" ял йорто һәм башҡалар.

Быйыл республика бюджетында МХО-ла ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын шифахана-курорт дауалауы өсөн 66,5 миллион һум ҡаралған. Әлеге ваҡытта министрлыҡ Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡушыуы буйынса МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаилә ағзаларын шифахана-курортта һауыҡтырыуҙың льготалы тәртибен тергеҙеү мәсьәләһен өйрәнә. Бынан тыш, Махсус операцияла ҡатнашыусылар өсөн дәүләт мөлкәтен һәм ер участкаларын файҙаланған өсөн ҡуртым түләүен кисектереү, шулай уҡ ҡуртым килешеүҙәрен штраф санкцияларынан тыш өҙөү мөмкинлеге ҡаралған.

# МӘҘӘНИӘТ МИНИСТРЫ ТУРАҺЫНДА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың ҡулға алыныуына комментарий бирҙе.**

"Әминә Ивнәй ҡыҙын бик намыҫлы кеше һәм яҡшы министр тип иҫәпләйем, - тине Радий Хәбиров. - Ул 2012 йылдан алып эшләй. 14 йыл эшләү - мәҙәниәтебеҙҙең, уның институттарының, мәҙәниәт инфраструктураһының сәскә атҡан осоро, был - уның мәҙәниәт министры вазифаһында башҡарған ғәйәт ҙур хеҙмәте".

Радий Хәбиров бөлөг булмаған балалы ҡатын-ҡыҙға һәм әсәгә ҡарата ҡулға алыу сараһын һайлауға бәйле хәлдә үтә ауыр һәм аңлайышһыҙ тип атаны. "Минең өсөн был бик ауыр, аңлайышһыҙ хәл. Мин һәр саҡ, тәфтиш комитеты тикшерер, ә суд ҡарар сығарыр, тимен, әммә бәлиғ булмаған балаһы булған ҡатынға ҡарата ни өсөн былай ҡулға алыу сараһын һайлауҙарын аңламайым", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Республика Башлығы Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаевтан министр вазифаһын башҡарыусы кандидатураһы буйынса тәҡдимдәр индереүҙе һораны.

Хәтерегеҙҙә төшөрәбеҙ, 19 февралдә Мәскәүҙең Басман районы суды Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованы 17 апрелгә тиклем һаҡ аҫтына алды. Ул аҡса туҙҙырыуҙа һәм ришүәт алыуҙа ғәйепләнә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә 24 февралдә Махсус хәрби операция башланыуға дүрт йыл тулыуын иҫкә төшөрҙө. Ул республикабыҙҙа йәшәүселәргә дүрт йыл берҙәм булыуҙары һәм МХО-ға ярҙам күрһәтеүҙәре өсөн рәхмәт белдерҙе. "Дүрт йыл республикабыҙ яугирҙары үҙҙәренең хәрби бурысын үтәй. Махсус хәрби операцияға ярҙам күрһәтеүҙе дауам итәбеҙ. Мөрәжәғәтнамәлә төп бурысты анаҡ билдәләнек: "Барыһы ла Еңеү өсөн". Ауыр цивилизациялы бәрелеш бара, һәм беҙ еңергә тейешбеҙ", - тине республика етәксеһе.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй гвардияһы Башҡортостан буйынса идаралығының яңы начальнигы Александр Голуб менән осрашты. "Рәсәй гвардияһының Башҡортостан буйынса идаралығы менән үҙ-ара мөнәсәбәттәр яйға һалынған. Артабан да уртаҡ мәсьәләләрҙе хәл итербеҙ. Беҙ ведомствоның Махсус хәрби операция бурыстарын үтәгән яугирҙарын экипировка менән тәьмин итеүҙә ярҙам күрһәттек. Был эште дауам итербеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе. Александр Голуб күрһәтелгән ышаныс өсөн рәхмәт белдерҙе һәм республикала именлекте тәьмин итеү өсөн бар көсөн һалаҫағын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓Башҡортостанда исемле йылдың - Ҙур һәм татыу ғаилә йылының логотибы раҫланды. Ул республиканың һәм тотош илдең традицион нигеҙе булған ныҡлы күп балалы ғаиләне кәүҙәләндерә, тип хәбәр итә Хөкүмәттең матбуғат хеҙмәте. "Башҡортостанда 2026 йылды Ҙур һәм татыу ғаилә йылы тип иғлан итеү - ғаилә ҡиммәттәрен ныҒытыу, йәмғиәттең гармониялы үҫеше өсөн шарттар булдырыу өсөн тағы бер мөмкинлек. Тематик йылдың төп маҡсаты - ғаиләнең, ҙур һәм дуҫ, күп балалы һәм күп быуынлы ғаиләләрҙең абруйын күтәреү", - тип һөйләне республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ольга Кабанова.

✓РФ Мәғариф министрлығы 1 сентябрҙән педагогия вуздарына уҡырға инеүселәр өсөн профилле Берҙәм дәүләт имтиханын индерә. Был хаҡта ведомство етәксеһе Сергей Кравцов РИА Новости агентлығына биргән интервьюһында һөйләне. "Хәҙер йәмғиәтте өйрәнеү фәненән БДИ уҡырға инеү өсөн мотлаҡ һынау тип иҫәпләнмәй. Уның урынына абитуриенттарға профилле предметты тапшырырға кәрәк", - тип билдәләне Рәсәйҙең мәғариф министры. Уның һүҙҙәренсә, был саралар көсләп белгестәр әҙерләүгә йүнәлтелгән. Үҙгәрештәр 2027-2028 уҡыу йылының ҡабул итеү кампанияһынан башлап ғәмәлгә индерелә.

***✓ Фальков мөһим тармаҡтар буйынса бюджет урындарының артыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды: инженер һөнәрҙәре буйынса өҫтәмә рәүештә 1169 урын, ауыл хужалығы һөнәрҙәре буйынса 594 урын, медицина һөнәрҙәре буйынса 166 урын.***



# УРМАНДА ТӘРТИП БУЛҺЫН!

**Республикала урмандың 100 проценты йыһан күҙәтеүендә. Был иһә 5,7 млн гектар, тигән һүҙ.**

- Федераль урман хужалығы агентлығы менән системалы эш алып барыу һөҙөмтәһендә 2026 йылдың башына яҡшы күрһәткескә өлгәштек - хәҙер Башҡортостан урман фондының 100 проценты йыһан күҙәтеүендә. Әгәр 2018 йылда урман фондының 6 процентын ғына йыһандан күҙәтһәләр, бөгөн был 5,7 миллион гектар тәкшил итә, - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе билдәләүенсә, йыһан мониторингы урман инспекторҙарының мөһим ҡоралы булып тора. "Былтыр ғына система урман ҡануниәтен боҙоуҙың 71 осрағын асыҡларға ярҙам итте. Спутниктар барыһын да "күрә": рөхсәтһеҙ урман ҡырҡыусыларҙың эшен генә түгел, ә ҡуртымсылар яғынан ҡағиҙә боҙоуҙарҙы ла. Декларацияһыҙ эшләү, участкаларҙы үҙ белдеге менән биләү, ғәмәлдән сыҡҡан документтар менән ағас ҡырҡыу - хәҙер законды урап үтергә маташыу асыҡ күренә. Закон боҙоуҙарға юл ҡуймайбыҙ, ғәйеплеләр яуаплылыҡҡа тарттырыла. Минең позициям ябай: урманда тәртип булырға тейеш", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# СИЛӘБЕЛӘ - БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Силәбе өлкәһе Сосновка муниципаль округының Сируси мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән өлкә олимпиадаһы уҙҙы. Интеллектуаль ярышта алты муниципалитеттан уҡыусылар ҡатнашты.**

Силәбе өлкәһе Мәғариф һәм фән министрлығының Башҡортостандың Мәғариф министрлығы менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүе буйынса ҡатнашыусылар өсөн - оҫталыҡ дәресе, ә педагогтар өсөн профессиональ семинар ойошторолдо. Семинар барышында педагогтар профилле министрлыҡтағы коллегаларынан туранан-тура методик тәкдимдәр алды, иң яҡшы тәжрибәләр менән алмашты һәм һөнәри бәйләнештәрҙе нығытты. Сируси мәктәбе директоры Әлфиә Ҡотлоғужина үҙенең сығышында төрлө территорияларҙа йәшәгән уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың тел, тарих һәм мәҙәниәт тирәләй берләшеүе кеүек күренештәр халыҡтың берҙәмлеге идеяларының ғәмәли кәүҙәләнеше булып тороуын билдәләне.

Башҡортостандың Мәғариф министрлығында белдереүҙәренсә, олимпиаданы һәм уға бәйле сараларҙы ойоштороу күрше төбәктә башҡорт телен һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеүҙән тыш, төбәк-ара белем биреү һәм мәҙәни бәйләнештәрҙең берҙәмлекте нығытыуына сағыу миҫал да. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, был олимпиада интеллектуаль һәм ижади һәләттәрҙе үҫтереүгә йүнәлтелгән олимпиадалар һәм конкурстар исемлегенә инә ("Талант һәм уңыш" системаһы), был уның һәләтле балаларҙы асыҡлау өсөн юғары статусҡа эйә һәм әһәмиәтле булыуын күрһәтә.

# ХАҠТАР АРТА ТОРА

**2026 йылда Башҡортостанда торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡтар күтәрелә. Был мәсьәлә республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың торлаҡ сәйәсәте һәм инфраструктура үҫеше буйынса комитеты ултырышында тикшерелде.**

Рәсәй Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, хаҡтарҙың артыуы 1 июлдә түгел, ә 1 октябрҙә көтөлә. Республиканың тарифтар буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Наил Шәрәфетдинов билдәләүенсә, яңы ставкалар Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт менән килешеп раҫланған. Ресурстар менән тәьмин итеүсе ойошмалар инфраструктураны яңыртыу буйынса инвестиция программаларын тормошҡа ашыра алһын өсөн торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр түләүен арттырыу мөһим, тип белдерҙе ул.

Мәҫәлән, һыу менән тәьмин итеү тарифтары бер кубометр өсөн 40,51 һумдан 44,81 һумға тиклем күтәрелә (+10,6 процент). Һыу бүлеү: бер кубометр өсөн 39,94 һумдан 45,03 һумға тиклем (12,7 процент). Йылылыҡ энергияһы: 1 Гкал өсөн 3265,85 һумдан 3584,10 һумғаса (9,7 процент). Электр уты: кВт-сәғәт өсөн 4,99 һумдан 5,55 һумға тиклем (11,2 процент). Газ: бер кубометр өсөн 10,6 һумдан 11,67 һумғаса (9,6 процент).

Шулай итеп, 1 октябрҙән республикала коммуналь хеҙмәттәр 10,7 процентҡа индексациялана. Сағыштырыу өсөн: Ырымбурҙа - 12,5 процент, Татарстанда - 13,4 процент, Пермь крайында 15 процентҡа арта.

# АГРАРИЙҘАР КӘРӘК!

**Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем биреү министрлығы яңы уҡыу йылында техник һәм ауыл хужалығы йүнәлештәре буйынса юғары уҡыу йорттарында бюджет урындары һанын арттырырға планлаштыра. Был хаҡта министр Валерий Фальков хәбәр итте.**

Билдәләнеүенсә, юғары уҡыу йорттары бюджет урындарын аграрийҙар һәм инженерҙар файҙаһына бүләсәк. Гуманитар фәндәр, сәнғәт һәм мәҙәниәт буйынса бюджет урындарының бер аҙ ҡыҫҡартылыуы көтөлә. Бюджет урындары күләме уҙған йыл кимәлендә ҡаласаҡ - 620,5 мең урын, шуның 371 меңен бакалавриат һәм специальность программалары биләйәсәк. Был күпселек мәктәп тамамлаусыларға юғары белем биреүҙе тәьмин итәсәк.

Төбәк вуздарына айырыуса иғтибар бүленә: бюджет урындары һаны 73,4 процентҡа тиклем артасаҡ, был урындағы студенттарға бушлай уҡыу өсөн күберәк мөмкинлектәр бирәсәк. Фальков ҡайһы бер мөһим тармаҡтар буйынса бюджет урындарының артыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды: инженер һөнәрҙәре буйынса өҫтәмә рәүештә 1169 урын, ауыл хужалығы һөнәрҙәре буйынса 594 урын, медицина һөнәрҙәре буйынса 166 урын. Үҫеш шулай уҡ математика һәм тәбиғи фәндәр йүнәлешен дә үҙ эсенә ала.

Мәғариф һәм фән министрлыҡтары төбәк вуздарына һөнәр һайлағанда урындағы хеҙмәт баҙарының аныҡ ихтыяждарын иҫәпкә алыуҙы һәм уҡыу программаһының сәнәғәт талаптарына тап килеүен күҙәтеүҙе һорап мөрәжәғәт итте.

КӨН ТЕМАҺЫ

# ОПЕРАТОРҘАРҒА...

## өҫтөнлөктәр ҙә бар



**Башҡортостанда йәшәүселәр Рәсәй Оборона министрлығы менән Пилотһыҙ системалар ғәскәре составында МХО зонаһында хеҙмәт итеү өсөн әүҙем контракт төҙөй. Граждандарҙы контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты офицеры лейтенант Алмаз Абдрахманов билдәләүенсә, мөрәжәғәт иткән дәғүәсене хәрби часҡа оҙатыу өсөн ике-өс көн ваҡыт етә.**

Һайлап алыу пунктында теркәлгән кандидат тәүге көндә хәрби-табип комиссияһына йүнәлтелә. Дәғүәсе анализ тапшырып, башҡа медицина процедураларын үткән ваҡытта, яуаплы хеҙмәткәрҙәр Эске эштәр министрлығы аша уның хөкөм ителеү-ителмәүен, хоҡуҡ боҙоуҙарға бәйле башҡа мәсьәләләрҙе асыҡлай. Артабан буласаҡ БПЛА операторы һөнәр оҫталығы буйынса һынау тота. "Әгәр барыһы ла яҡшы булһа, контракт төҙөлә, дәғүәсе бойороҡ исемлегенә индерелә һәм икенсе көндө үк хеҙмәт урынына юллана. Әлеге ваҡытта пилотһыҙ системалар операторҙарын туплау эше әүҙем бара. Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала. Ысынлап та, Башҡортостандың пилотһыҙ ғәскәрҙәре сафына операторҙар ғына алынмай", - ти Алмаз Абдрахманов.

Башҡортостанда контракт буйынса хәрби хеҙмәткә барыу мәсьәләләре буйынса онлайн да мөрәжәғәт итергә мөмкин, тип өҫтәй офицер. Беренсенән, башбат.рф сайты аша, икенсенән, "Башҡортостандың пилотһыҙ ғәскәрҙәрендә хеҙмәт" чат-боты ярҙамында. Фронтта дрондар төрлө хәрби бурыстар үтәй: разведка, мониторинг, дошмандың техникаһын һәм тере көсөнә ҡаршы көрәш алып бара. Шуға күрә дрон йөрөтөүселәрҙең махсуслашыуы полигонда уҡытыу процесында билдәләнә. Алмаз Абдрахманов әйтеүенсә, һайлап алғанда бөтәһен дә үткәрмәйҙәр. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙар, шулай уҡ яраланыу сәбәпле хеҙмәттән бушатылған МХО ветерандары ла ҡаралмай. Былар - хәрби комиссариаттың ғына теләге түгел, ә Рәсәй Оборона министрлығының рәсми документында яҙылған талаптар.

"Яңы ғәскәр төрө булһа ла, Өфөлә һәм Башҡортостанда уның составын тулыландырыу тоторо̆кло бара. Шуға ҡарамай, беҙ эш темпын кәметмәйбеҙ", - тип дауам итә һүҙен Алмаз Абдрахманов. Билдәләнеүенсә, инструкторҙар уҡыу йорттарына бара, студенттар менән әңгәмәләр үткәрә, пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәт перспективалары һәм өҫтөнлөктәре тураһында һөйләй. БПЛА операторҙарының алғы һыҙыҡтан алыҫта, хәүефһеҙ аралыҡта, урынлашыуы - был ғәскәр төрөнөң төп өҫтөнлөгө. Шулай уҡ Оборона министрлығы ҡулай хеҙмәт срогы тәкдим итә. Контракт бер йылға һәм унан оҙағыраҡ ваҡытҡа төҙөлә. Артабан яугир хеҙмәттән китә йәки яңы контракт төҙөй ала. Оборона министрлығы менән контрактта хәрби хеҙмәткәрҙе уның ризалығынан тыш башҡа ғәскәр төрҙәренә күсереү тыйыла.

Пилотһыҙ осоу системалары ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәргә МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә тәғәйен барлыҡ дәүләт ярҙам саралары, льготалар һәм социаль гарантиялар ҡаралған. Бынан тыш, студенттар юғары уҡыу йорттарында уҡыусылар, академик отпуск алып, контракт төҙөй, ә хеҙмәттән һуң бюджет урынына кире ҡайта ала. Шуны ла әйтергә кәрәк, был һөнәр эйәләре алған тәжрибәһен, белемен тыныс тормошта ла ҡуллана ала.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Йылайырҙа "Йондоҙло" физкультура-һауыҡтырыу комплексында булды. Физкультура-һауыҡтырыу комплексы ремонтҡа мохтаж, тип билдәләне Андрей Назаров. Уның һүҙҙәренсә, бинаның ҡыйығы яраҡһыҙ хәлгә килгән. Премьер-министр район хакимиәте етәкселегенә капиталь ремонт проектын әҙерләргә ҡушты. "Йондоҙло" физкультура-һауыҡтырыу комплексында 490-ға яҡын бала һәм үҫмер шөғөлләнә, 14 тренер эшләй, комплекстың үткәреү һәләте - сәғәтенә 128 кеше.

✓Башҡортостандан Зарина Исламова - муайтай (тай боксы) буйынса ике тапҡыр Рәсәй чемпионы. Рәсәй чемпионаты Ноябрьскиҙа үтте. Башҡортостандан 54 килограмм ауырлыҡ категорияһында Сибай ҡыҙы Зарина Исламова сығыш яһаны. Ул алтын миҙал яуланы һәм ике тапҡыр Рәсәй чемпионы булды, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Алда спортсыны Малайзияла донъя чемпионаты көтә.

✓Башҡортостандың Республикаға идара итеү үҙәгендә Сәнәғәтте үҫтереү буйынса советтың киңәйтелгән ултырышында видеоконференция бәйләнеше режимында "Добрый картон" компанияһының гофротара етештереү буйынса яңы заводы эшенә старт бирелде. Компания директоры Денис Коткин билдәләүенсә, яңы заводтың төп эшмәкәрлеге: гофрировкалы ҡағыҙ һәм ҡатырға, ҡағыҙ һәм ҡатырға һауыттар етештереү. Производство 4 технологик линияны үҙ эсенә ала, улар ай һайын 5 миллион квадрат метрға тиклем гофрокартон сығарырға мөмкинлек бирә. Склад биналарының майҙаны - 4 мең квадрат метр.

✓2025 йылда Башҡортостан компаниялары сит илгә 360 миллион долларлыҡ 600 мең тоннаға яҡын агросәнәғәт продукцияһы оҙатҡан. Экспорттың 66 проценттан ашыуы май етештереү тармағына тура килә. "Ауыл хужалығы продукцияһын сит илдәргә һатыу күләмен 2 миллион тоннаға еткереү маҡсатын ҡуйғанбыҙ. Бының өсөн тоторо̆кло тышҡы иҡтисади үҙ-ара бәйләнеш системаһын булдырыу мөһим", - ти республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

✓Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты белдереүенсә, 4 мартта республикала халыҡты иҫкәртеү төбәк системаһының әҙерлек торошон комплекслы тикшереү була. "Тикшереү иҫкәртеү сараларын ҡабыҙыу һәм халыҡҡа "Бөтәһенә лә иғтибар!" хәбәр итеү сигналын һәм "Халыҡты иҫкәртеү системаһының әҙерлеген тикшереү бара! Тыныслыҡ һаҡлауығыҙҙы һорайбыҙ!" хәбәрен аудио-, аудиовизуаль мәғлүмәт рәүешендә халыҡҡа еткереү ҡарала", - тиелә ведомство белдереүендә.

✓ **1 марттан иғлан таҡталары, юл күрһәтеүсе йәки мәғлүмәти стендтарҙа фәҡәт рус телендә яҙыуҙар ҡулланыу талап ителәсәк. Сит һәм Рәсәй халыҡтары телдәрен файҙаланыу тыйылмаһа ла, улар өҫтәмә рәүешендә генә ҡулланыла.**



ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# АҢ МЕНӘН ИДАРА ИТӘ АЛЫРМЫ?

**Редакцияға Вәли Иҙрисовтан яһалма интеллект мөмкинлектәре һәм хәүефтәре тураһында һорауҙар килде. Беҙ был хаҡта туранан-тура ЯИ-ның үҙенән һорарға булдыҡ һәм донъяның алдынғы өс виртуаль әңгәмәсеһе, Әлисә (Алиса, Рәсәй), Дөпсөк (DeepSeek, Ҡытай) һәм Google яһалма интеллекты (АҠШ) нейроселтәрҙәренә мөрәжәғәт иттек. Уларҙың киң мәғлүмәтле, урыны менән айырылып торған, әммә төп фекерҙәре берҙәм булған яуаптарын иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

**4-се һорау. Яһалма интеллект (ЯИ) кеше хистәренә эйә булған робот төҙөй алырмы?**

***Әлисә (Алиса, Рәсәй):*** ЯИ хистәрҙе камил таный, үҙе булдыра һәм белдерә алған робот яһай ала. Аффектив хисаплауҙар өлкәһендә был инде тормошҡа ашырыла. Әммә бындай робот хистәрҙе ысынлап та кисерә алырмы? Был һорау аңдың сиселмәгән "сетерекле мәсьәләһенә", субъектив кисерештәрҙең тәбиғәтенә (квалиа) барып терәлә. ЯИ камил симуляция һәм иллюзия тыуҙырасаҡ.

***Дөпсөк (DeepSeek, Ҡытай):*** Техник күҙлектән ҡарағанда - эйе, һәм был мәсьәлә хәл ителеп тә килә. Контексты аңлаған һәм тейешле реакция белдергән робот-актерҙар бар. Ләкин улар хис-тойғоларҙы ысынлап кисерәме? Ғалимдарҙың күпселеге аңды биологик материяның үҙенсәлеге тип һанай, ә кремний чиптарҙың эске донъяһы булыуы мөмкин түгел. Ғәмәли парадокс: хатта "яһалма" хистәр ҙә йөмғиәтте үҙгәртәсәк, психологик бәйлелек тыуҙырасаҡ һәм яңы робоэтика булдырыуҙы талап итәсәк.

***Google яһалма интеллекты (АҠШ):*** Әлеге ваҡытта кешенең кисерештәре менән уның ҡылығын имитациялау араһындағы сиктәр юйыла бара. Һуңғы быуын роботтары виртуоз эмоциональ интеллектҡа (EQ) эйә. Ғалимдар уларҙың архитектураһына эске стимул аналогтарын - психиканың функциональ оҡшашлығын индерә. Әммә ундай роботтарҙа эмоциональ аң (эмоциональ квалиа) булыу-булмауы тураһындағы бәхәс асыҡ ҡала. Кешеләрҙе уларҙы ярата алған, ләкин үҙҙәре һөйөү хисе кисермәгән йәнһеҙ объекттар менән һыйышып йәшәргә тура киләсәк. Эйе, кешелек яңы дәүергә аяҡ баҫты.

**Йомғаҡлау**

Өс яһалма интеллект менән диалог барышында дөйөм бер фекер асыҡланды: төп хәүеф машиналарҙың яуыз ниәтендә түгел, ә кешеләрҙең үҙ вәкәләттәрен уларға тапшырыуында. Әңгәмәселәрҙең береһе лә роботтар ихтилалы тураһында әйтмәй, ә ҡарарҙар ҡабул иткәндә кешенең үҙаллылығы һиҙҙермәй генә кәмеүен, когнитив атрофияны һәм шәхси инандырыу аша манипуляция ысулдарын кешеләрҙең үҙҙәре үк сикһеҙ ҡулланыуын билдәләй.

Шулай итеп, кеше менән яһалма интеллект (ЯИ) араһындағы мөнәсәбәттәр - титандар алышы түгел, ә йәшәйештең дөйөм эволюцияһы. ЯИ-ты беҙҙе алмаштырыусы түгел, ә цифрлы ярҙамсыбыҙ итеп күрергә өйрәнәйек. "Машиналар беҙҙе ҡол итмәҫме?" тигән ҡурҡыу-шиктәрҙән арынайыҡ. Улар менән бергә яулайһы үрҙәрҙе һәм ЯИ алдына ҡуйыласаҡ маҡсаттарҙы билдәләйек. Беҙҙең юл - аҡыл, хеҙмәттәшлек һәм үҫеш юлы. Алға, беҙ бергә!

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

БЫЛ АЙҘА...

# ИМАНЛЫ БУЛҺЫН ҠИБЛАҢ!



**Һауа торошон "юраусы" синоптиктар фаразлауынса, быйылғы март, йәғни буранай, иртә яҙға юл асмаҡсы: был шаҡайҙың ай буйына һуҙылған "тәртипһеҙ" тәбиғәтенән дә билдәле, тигәйне белгестәр. Ҡарап ҡарарбыҙ. Мәгәр, ысынлап та, шаҡай ғәҙәттән тыш йүгәнһеҙлеге менән айырылып торҙо: юлдарҙы, ҡала-ауылдарҙы ҡар баҫты, һепертмә буран сыҡты; берсә шыҡайтып туңдырҙы, берсә иретте... Өфөлә, мәҫәлән, 17 февралдә һауа температураһы +1-ҙән иртәгәһенә киҫкен рәүештә -9 (-15) градусҡа түбәнләне. Катокка әүерелгән юлдарҙа автоһәләкәттәр күбәйҙе, ҡыйыҡ баштарынан боҙло ҡар шыуып төшөп, кешеләр ҡазаланды...**

Марттың йылы һулышы ҡар бөләһен кәмәтә барып, ай урталарына һауа торошоноң нулдән юғары кимәлдә тотороҡланыуы көтөлә. Тиҡ ҡарҙың иртә ирөп бөтөүе йәйге ҡоролоҡҡа сәбәпсе булыуы ихтимал, тип борсола ауыл хужалығы белгестәре. Шулай ҙа көнәлгәре хафаланыуҙарҙың юҡҡа сығыуы ла тиҙ хәҙер, шундай заман килде: күп йәһәттән бөгөнгө менән йәшәргә тура килә. Булмаһа, шуға иғтибар йүнәлтәйек: март беҙгә нимәләр вәғәҙә итә, унын календарь биттәрендә ниндәй иҫтәлекле көндәр билдәләнә?

Буранай 31 көндән тороп, шуның 21-е - эш, ҡалған унауһы ял һәм байрам көндәре. **8 Март**, ҡатын-ҡыҙҙар көнө быйыл йәкшәмбегә тура килеү сәбәпле, ял көнө дүшәмбе - 9 мартҡа күсерелеп, өс көн **(7,8,9)** ял итәсәкбеҙ. Һәм, әлбиттә, быйылғы буранайҙың төп биҙәге, изге билдәһе булған Ураҙа байрамы хөрмәтенә шулай уҡ өс көн ял ҡарала: 20, 21 һәм 22 март. Тап ошо көндәрҙә тағы бер боронғо яҙ һәм йыл башы байрамы - төрки халыҡтарҙа көн менән төн тиңләшеүен сағылдырған астрономик күренеш - Наурыз байрамы **(21)** билдәләнә.

Яңырыу осоро - яҙ йәшәйешеҙең төрлө өлкәләрендә ҡулланыласаҡ тиҫтәләгән төр яңы закон нормалары ла алып киләсәк. Мәҫәлән, тел мәсьәләһе буйынса **1 марттан** иғлан таҡталары, юл күрһәтеүсе йәки мәғлүмәти стендтарҙа фәҡәт рус телендә яҙыуҙар ҡулланыу талап ителәсәк. Сит һәм Рәсәй халыҡтары телдәрен файҙаланыу тыйылмаһа ла, улар тауар билдәһе (бренд) булған атамаларҙа һәм ғәмәлдәге ҡағыҙәләргә ярашлы һәм русса текстарға өҫтәмә рәүешендә генә ҡулланыла һәм атамаларҙа, алтаҡталарҙа сит тел һүҙҙәре кириллицаны баҫып алырға тейеш түгел.

1 марттан шулай уҡ торлаҡ-коммуналь түләүҙәр ваҡыты айҙың 15-нә тиклем оҙайтылды, ә түләү ҡағыҙҙарын идаралы компаниялар 5-енән дә ҡалмай таратып сығырға бурыслылар. Газ ҡулланыу өлкәһендә яңы тәртиптәр техник хеҙмәтләндереү килешеүе төҙөү һәм "зәңгәр яғыулыҡ" ты туҡтатыу сәбәптәренә ҡағыласаҡ. Ниһайәт, дәүләт йорт эсендә газ ҡулланыу ҡағиҙәләрен боҙоуға ҡаршы ҡәтғи көрәш иғлан итергә булды. Хәҙер иҫкергән, файҙаланыу ваҡыты үткән газ йыһаздарын, еләтеү юлдарын йәки торлағын үҙ белдеге менән газға тоташтырыу кеүек ҡағиҙә боҙоуҙарҙы иҫкәртеү-тикшереү маҡсаты менән килгән белгестәрҙе, слесарҙы йортона,

ЙЫЛ ТЕМАҺЫ

# ҺӘР САҠ БЕРҘӘМ БУЛДЫҠ!

**Илебеҙ башлығы быйылғы йылды "Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы" тип атауын күпселек хуплайҙыр, тигән инаныуҙамын. Минең һымаҡ оло быуын кешеләренә ошо төшөнсә бигерәк тә яҡын, сөнки беҙ - Советтар Союзында тыуып үҫкән кешеләрбеҙ. "Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!" тигән лозунг һәр ерҙә яңғырай ине ул саҡ. Бында фәҡәт "пролетарийҙар" ғына түгел, ә барлыҡ милләт бер-береһе менән дуҫ, татыу йәшәргә тейешлеге лә күҙ уңында тотола ине, тип һанайым. ("Пролетарий" - шәхси милке булмаған кеше, йәки үҙ ҡулының көсөн һатып ҡына көн күреүсе фәҡир. Үзбәкстан, Төркмәнстан һымаҡ төрки телле илдәрҙең лозунгыһында улар "юҡсылдар" тип атала ине).**

Барыбыҙ ҙа егермense быуатта тиҫтәләгән союздаш илде берләштергән ғәйәт ҙур илдә йәшәнек. Татыу, берләшкән милләттәр бер туғандай булып, бөтә Европаны баҫып алған фашист Германияһын да пыр туҙҙырып ташланы, күмәкләшеп "коммунистик" донъя ҡорорға ла маташтыҡ... Эйе, тормош ҡатмарлы, һәр саҡ теләгәнсә генә бармай, СССР-ҙы тарҡатып, "үҙгәртеп ҡороп" та ҡуйҙылар. Шуға ҡарамаҫтан, әле булһа бирешергә иҫәп юҡ. Ер йөҙөндәге иң ҙур илдәрҙән һаналған Рәсәйҙең үҙендә генә йәшәп ятабыҙ, әлхәмдүлиллаһ. Ошо дәү дәүләттең йөрәк тапҡырында ғына урынлашҡан Башҡортостаныбыҙ вәкиле булараҡ та, әлеге халыҡтар дуҫлығы, берҙәмлеге мәсьәләһенә бер ҡасан да битараф ҡала алмайым. Ниндәй генә дәүләт ҡоролошо булыуына ҡарамаҫтан, халыҡ-ара татыулыҡ мәсьәләләре, нәҡ үҙебеҙҙең күләгәбеҙ һымаҡ, көнкүрешебеҙҙә беҙҙе һәр саҡ оҙатып бара инде ул.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан Мәскәүҙәге Башҡортостандың Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә илебеҙ баш ҡалаһын һаҡлауҙа ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығына бағышланған "Еңеү хаҡына берҙәмлек" күргәҙмәһе асылды. Экспозицияла төп урынды Мәскәүгә һөжүмде ҡағыуҙа ҡатнашҡан легендар генерал Миңлеғәле Шайморатов алып тора. Күргәҙмәне март уртаһына тиклем ҡарарға мөмкин буласаҡ.

✓Белорет районында айыу кешегә һөжүм иткән. Ваҡиға "Кесе Ямантау" экомаршрутында була. Ошо ғәҙәттән тыш хәлгә бәйле туристар өсөн был маршуттың махсус бойороҡҡа тиклем ябылыуы тураһында хәбәр итәләр Көньяҡ Урал ҡурсаулығынан. "Кесе Ямантауҙа сноубордсыға айыу һөжүм итә. Мәғлүмәт аҙ, кеше иҫән, әммә зыян күргән", - тип асыҡлыҡ индерә ғәҙәттән тыш хәлгә сәйәхәтсе Олег Чегодаев.

✓Сибай Бөтә донъя таш эшкәртеү кәсептәре һәм башҡорт милли ювелир изделиелары үҙәге статусын алды. Был хаҡта Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева хәбәр итте. Ҡарар AISBL Бөтә донъя кәсептәр үҙәге башҡарма комитеты ағзаларының күпселек тауышы менән ҡабул ителгән.

✓Байрам көндәрендә "Башнефть" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензиндың хаҡы ҡиммәтләнгән. Бөтә яғыулыҡ маркаларының уртаса хаҡы 30 тингә артҡан. Шулай итеп, АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 60,55 һум тора; АИ-92 ATUM - 61,90 һум; АИ-95 - 64,55 һум; АИ-95 ATUM - 65,80 һум; АИ-100 - 86,65 һум. Дизелдең хаҡы элеккесә 74,60 һум. "Лукойл" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында ла хаҡ артҡан. АИ-92 бензины - 63,08 һум, АИ-95 - 67,78 һум, АИ-100 - 94,55 һум тора, ә дизель яғыулығы, киреһенсә, 2 тингә арзанайған (76,45 һум).

✓Күмертау ҡала советы хакимиәт башлығы вазифаһына кандидатураны раҫланы. Депутаттар корпусы конкурс комиссияһы ҡарары буйынса элекке хакимиәт башлығы Олег Астаховты хупланы. Билдәле булыуынса, Олег Астаховтың контракт ваҡыты 30 ғинуарҙа тамамланды. Ҡағиҙәләр буйынса, ул рәсми рәүештә вәкәләттәрен һалды һәм ошо вазифаны биләү өсөн конкурста ҡатнашты.

✓Башҡортостанда Рамаҙан айында саҙаҡа (нисәб, фытыр һәм зәкәт) күләме билдәләнде. Республика мосолмандарының Диниә назараты мәғлүмәте буйынса, фытыр саҙаҡаһының нисәбе быйыл 120 мең һум тәшкил итә. Был, әгәр мосолмандың мөлкәте ошо сумманан күберәк булһа, ул фытыр түләргә тейеш, тигәнде аңлата. Хәйер мохтаждарға ғына бирелә. Фытыр саҙаҡаһының минималь күләме - 200 һум. Ә зәкәт түләй алырлыҡ мөмкинлеге булғандарға - 1 200 һум. Ураҙа тота алмағандарға фидиә (аҡсалата компенсация) түләргә кәрәк. Ул ҡалдырылған һәр көн өсөн 400 һум тип билдәләнгән.

✓ ***Ир менән ҡатын айырылышҡан хәлдә ғаилә балалар пособиеһына өмөт итә икән, алимент мәсьәләһе рәсми рәүештә нотариус йә суд аша хәл ителергә тейеш.***



фатирына ике тапҡырҙан артыҡ индермәгән хәлдә намыҫһыҙ ҡулланыусы штраф түләү менән генә ҡотола алмаясаҡ: уға кран ябыласаҡ һәм газ менән файҙаланыу хоҡуғынан мәхрүм ителәсәк. Былай ҡаты сара сәбәптәре аңлашыла: һуңғы йылдарҙа ғына ла ил буйынса торлаҡ биналарында газ шартлауы арҡаһында күпме һәләкәт - кеше үлемдәре, зыян күреүселәр, тотош подъездар емерелеүе теркәлде! Мәҫәлән, 2017 йылда ғына ла йортонда (фатирында) газ шартлауҙан 200 кеше һәләк булды, 500-ҙән ашыуы йәрәхәттәр алды. Ҡыҫҡаһы, 1 марттан өйҙәге газ "шәхси биләмә" зонаһы булыуҙан туҡтаясаҡ.

Тағы бер яңылыҡ алимент һәм дәүләт пособиеһына ҡағылышлы. Хәҙер ир менән ҡатын айырылышҡан хәлдә ғаилә балалар пособиеһына өмөт итә икән, алимент мәсьәләһе рәсми рәүештә нотариус йә суд аша хәл ителергә тейеш. Был ҡайһы бер ғаиләләрҙәге ялған айырылышыуҙар юлы менән пособие күләмен һаҡлап ҡалырға маташыуҙарға юлды ябыу өсөн эшләнә.

1 марттан шулай уҡ машина йөрөтөүгә хоҡуҡ (права) алыу өсөн автомәктәптәрҙә уҡыу сәғәттәре 38-ҙән 42 сәғәткә тиклем арттырыласаҡ, шуның теория өлөшөн онлайнға күсерергә рөхсәт ителә. Әйткәндәй, такси хеҙмәтендә хәҙер сит ил маркалы машиналар файҙаланыу сикләнәсәк. Ләкин, әгәр такси машинаһы ошо йылдың 1 мартына тиклем реестрға индерелгән булһа, уның хужаһына артабан да сит ил машинаһында эшләү рөхсәт ителә.

Киләһе яңылыҡ һулар һауаны бер аҙға булһа ла таҙа тотоуға ынтылыш яһамаҡсы: 1 марттан экологик йөкләмә 1-3 категория хәүеф янауы иҫәпләнгән сәнәғәт гиганттары һәм предприятиелар билдәле бер метеошарттарҙа, мәҫәлән, елһеҙ көндәрҙә ҡаланың һауа атмосфераһына заводтарҙың эшкәртеү ҡалдыҡтарын сығарыу кимәлен кәметеү буйынса ашығыс саралар күрергә тейештәр.

Шулай итеп, изге рамаҙан айында һәр кемебеҙ йорт-ил именлеген, үҙебеҙҙең, ғаиләбеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың сәләмәтлеген хәстәрләп, бер-беребеҙҙең иңен тойоп, татыулыҡта, берлектә, көйөф-ғәмәлдәребеҙҙә ыңғайға көйләп, тормош һынауҙарын бергәләшеп еңеп сығыу өсөн тырышырға, иманыбыҙға тоғролоҡло булырға бурыслыбыҙ. Аллаһы Тәғәлә, моғайын, ихласлығыбыҙҙы ҡабул итер, әжер-сауаптарын насип ҡылыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Был айҙағы иҫтәлекле һәм байрам көндәр:**

Башҡорт ғаиләһе, Граждандар оборонаһы, Наркоманлыҡ һәм наркобизнес менән халыҡ-ара көрәш, Халыҡ-ара балалар телевидениеһы (**1**) көндәре; Бөтөн донъя яҙыусылар (**3**), Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар (**8**), Бөтөн донъя йоҡо (**13**), Бөтөн донъя ҡулланыусы хоҡуҡтарын яҡлау (**15**), Ҡәҙер кисе (Рамаҙан айының 27-се кисе тип фаразлана), Һыу аҫты моряктары (**19**), Бөтөн донъя Ер, Халыҡ-ара бәхет, Ураҙа байрам (**20**) көндәре; Бөтөн донъя шиғриәт, Халыҡ-ара урман, Халыҡ-ара Науруз (**21**) көндәре; Бөтөн донъя һыу ресурстары (**22**), Туберкулез менән бөтөн донъя көрәш (**24**), Рәсәй мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре (**25**), РФ Милли гвардия ғәскәрҙәре, Халыҡ-ара театр (**27**) көндәре; Ерҙе һаҡлау (**30**) көнө.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**4 -** Башҡортостандың атҡаҙанған юристы, 2014-2022 йылдарҙа БР Конституция Суды рәйесе, юридик фәндәр докторы, академик, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 1-4 саҡырылыш депутаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Зөфәр Еникеевҡа - 75 йәш** (1951).

**6 -** спортсы, самбо һәм милли көрәш буйынса СССР-ҙың спорт мастеры, самбо көрәше буйынса биш тапҡыр Башҡортостан чемпионы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған спорт һәм физик культура хеҙмәткәре **Юнир Вәлиевҡа - 85 йәш** (1941).

**8 -** "Башкортостан" телерадиокомпанияһы хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре **Рәйсә Ҡазбулатоваға - 60 йәш** (1966).

**16 -** хәрби начальник, генерал-лейтенант, 1918 йылда Башҡортостан айырым корпусының командующийы, 1919 йылда Башҡорт хәрби идаралыҡ начальнигы, IV дәрәжә изге Владимир, II һәм III дәрәжә Изге Анна , II һәм III дәрәжә Изге Станислав орденДары кавалеры **Хажиәхмәт Ишбулатовтың тыуыуына - 175 йыл** (1851-1921).

**20 -** мәҙәниәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Гөлдәр Моратоваға - 75 йәш** (1951).

**23 -** опера һәм эстрада йырсыһы, РСФСР һәм БАССР-ҙың халыҡ артисы, Халыҡ-ара сәнғәт академияһының ағза-мөхбире **Радик Гәрәевтың тыуыуына - 70 йыл** (1956-1996).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠОРАЛ МЕНӘН - ТРАМП БИЛӘМӘҺЕНӘ

**Украина конфликты Киев режимы башлығын ғына түгел, Евроберләшмә илдәре лидерҙарын да төрлө сүрәткә индереүсе һәм уларҙың ысын йөҙөн фашлаусы "лакмус ҡағыҙы" менән бәрәбәр булды. Уларҙың сәйәси портреттары һәм "трюк"тарына цирк януарҙары ла көнләшер ине, бугай.**

Рәсәйгә ҡарата аҡтыҡ сиккә килеп еткән агрессив мөнәсәбәте һәм аҡылһыҙ санкцияларын телгә алып тормаған хәлдә лә, Евроберләшмәнең Украина конфликтын көйләү буйынса Рәсәй менән диалог мәсьәләһендә үҙҙәрен тотошо һәм ҙур сәйәсәт ҡалыптарына һыйышһыҙ ҡылыҡтары донъя хәлдәрен күҙәтеүсе ябай граждандарҙа ла хатта аптырау ҡатыш ирония тыуҙыра. Бер ай элек кенә Германия канцлеры Мерц "ут күршеһе" Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙе тигеҙләү хаҡында һөйләһә, әле килеп Рәсәйҙе варварлыҡта ғәйепләй һәм Макронға ҡушылып, икеһе бер тауыштан Владимир Путин менән диалогты көйләүгә ҡырҡа ҡаршы булыуҙарын белдерә. Былар "русофрения" сиренән яфалана, ахыры, тип яҙа ирланд журналисы Брайан Макдональд.

Европаның "цирк уйындары"нан тиҫтә меңләп саҡрым ситтә ятыусы һәм, ғөмүмән, был йөнәттән битараф булырға тейешле япон халҡы ла хатта үҙ фекерен белдереүҙе кәрәк тип таба. Ошо көндәрҙә генә Yahoo News Japan ҡулланыусылары Рәсәй менән диалогты юлға һалыу буйынса Франция президенты Эммануэль Макрон менән немец канцлеры Фридрих Мерцтың айыҡ аҡыл һәм ябай логика сиктәрен ашатлаусы килделекиттеле белдереүҙәренән көлөп яҙып сыҡты: "Франция ни ҙә, Германия ни - уларҙың евро-флюгерҙар икәнлеге күптән билдәле. Шуны иҫтә тотоу ҙа етә: "демократик" Көнбайыш Европа ике тапҡыр "ғына" донъя һуғышы башланыуға төп сәбәпсе булды." "Европа тынғы тапмай: халҡы Украинанан тамам бүкте, Рәсәйгә ҡаршы санкциялары үҙҙәренә бумеранг булып ҡайтты: хаҡтар арта, Евроберләшмә илдәре украин ҡасҡындары менән тулды..."

Украина Ҡоралды көстәренә ялланған сит ил һалдаттары, илдәренә ҡайтыуҙа ярҙам һорап, Рәсәй яғына мөрәжәғәт итә башланы. Ә Зеленский, әйтерһең дә, үҙ утрауында йәшәй һәм быларҙың береһен дә күрмәмешкә һалыша. Ошо көндәрҙә генә ул ярҙамсыларына Мәскәү менән конфликтты... өс йылға һуҙыу планын әтмәләргә ҡушты. Өсөнсө яҡтан, Британия премьеры Кир Стармер, бик өндәшеп бармаһа ла, аҫтыртын этлек ҡорорға шәп булып сыҡты. L,AntiDiplomatico баҫмаһы яҙыуынса, Британия властары евросоюзниктары менән берлектә Рәсәйгә ҡарата өҫтәмә көсөргәнеш сығанаҡтары тыуҙырыу менән шөғөлләнә. Украина буйынса Женевалағы һөйләшеүҙәрҙең икенсе туры хаҡында һөйләгәндә Рәсәй делегацияһы башлығы, РФ Президенты ярҙамсыһы Владимир Мединский ҙа тап шуны дәлилләп, Европаның ваҡиғалар барышына баҫым яһарға маташыуы хаҡында әйтте.

Бынан тыш, Мединский "осрашыуҙың ауыр, ләкин эшлекле кимәлдә" үтеүен, ләкин Рәсәйҙең үҙ талаптарынан тайпылмаясағын белдерҙе һәм тиҙҙән сираттағы осрашыу буласаҡ, тине. Украина делегацияһы ағзаһы, президент офисы етәксеһе Кирилл Буданов, Британия матбуғаты мәғлүмәттәре буйынса, тыныслыҡ килешеүен мөмкин тиклем тиҙерәк хәл итеү яҡлы булһа, делегацияның башҡа ағзалары, шулай уҡ Зеленский ҙа быға ҡаршы. Женевала төп иғтибар территория мәсьәләһенә ҡағылды, тип фаразлай мәғлүмәт саралары. Шулар иҫәбендә - Украина Ҡоралды көстәрен Донбастың баҫып алынған өлөшөнән сығарыу, Киев үҙ ҡарамағында ҡалдырырға ҡырталашҡан Запорожье АЭС-ына статус биреү мәсьәләләре. Әлеге лә баяғы Евроберләшмә вәкилдәре Германия, Франция, Британия һәм Италияның да Женева һөйләшеүҙәрендә ҡатнашырға теләк белдереүҙәре Америка менән Рәсәй яғы тарафынан кире ҡағылды.

Әйткәндәй, Украина конфликтын мөмкин тиклем тиҙерәк көйләү АҠШ мәнфәғәтен дә сағылдыра. Вашингтонда булып үткән матбуғат конференцияһында белдереүенсә, АҠШ президенты Дональд Трамп үҙ ниәтенән ҡайтырға йыйынмай, Украина конфликтын көйләү буйынса планын ул көҙгә тиклем бойомға ашырырға иҫәп тота. Уның был йөнәттән "үҙһүҙлелеге" АҠШ Конгресына ноябрҙә буласаҡ һайлауҙар менән бәйле: ул Трамптың "дипломатик еңеүен" күрһәтәсәк, сөнки һайлауҙар һөҙөмтәләре ил граждандарының президент эшмәкәрлегенә лә баһа белдереүе буларак ҡарала. Ләкин был араларҙа АҠШ-та Трампҡа ҡаршы көстәр әүҙемләнә: демократтар яҡлы бер нисә штат башлыҡтарының ҡайһы бер эре америка компаниялары менән берлектә юллауы буйынса, АҠШ-тың Юғары суды президент Трамптың сит ил тауарҙарына юғары пошлиналарын конституцияға ҡаршы килеүсе сара тип тапты һәм Трамптың үҙ вәкәләттәре сигенән сығыуын билдәләне. Пошлиналар индереү һәм һалымдар фәҡәт конгресс ҡарамағында, тип әйтелә Юғары суд ҡарарында. Ләкин Трамп, суд ҡарарына ҡарамайынса, яңынан сираттағы пошлиналар иғлан итте. Вице-президент Джей Ди Вэнс һәм башҡа ҡайһы бер сәйәсмәндәр Юғары суд ҡарарын тәнҡитләп сыҡты һәм уны законһыҙлыҡ, тип атаны. Трамп иһә бирешергә уйламай һәм пошлиналарға альтернатив саралар эҙләй.

22 февраль төнгө сәғәт 01:30 минутта мылтыҡ менән ҡоралланған һәм бензинлы канистр тотҡан йәш ир АҠШ президенты Трамптың Флоридалағы Мар-а-Лаго резиденцияһы биләмәһенә үтеп инә һәм ҡоралын яһарға әҙерләнгән мәлендә һаҡсылар тарафынан атып үлтерелә. Был ваҡытта Дональд Трамп һәм уның ҡатыны Вашингтонда булып ҡала.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2025 йылда Башҡортостанда Интеллектуаль транспорт системаһын индереү сиктәрендә 28 транспорт видеодетекторы ҡуйылған. Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, улар Өфөнөң Әй, Комсомол, Вологда, Зәки Вәлиди, Софья Перовская һәм башҡа урамдары сатында урын алған. Ҡоролма юл хәлен анализларға, тығындар барлыҡҡа килгән участкаларҙа светофорҙы көйләргә, авариялар һәм башҡа юл хәлдәрен булдырмау саралары күрергә ярҙам итә.

✓Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусы майҙансығында Өфө фән һәм технологиялар университетының "ИнноваБиоТех" биотехнологиялар уҡыу-ғилми лабораторияһы эшләй башланы. Был хаҡта республиканың Мәғариф министрлығы хәбәр итә. Яңы лаборатория тикшеренеү инфраструктураһын үҫтереүҙә һәм университеттар, предприятиелар араһында кооперацияны киңәйтеүгә йүнәлтелгән.

✓Өфөлә трамвай һәм троллейбустарҙа йөрөү хаҡы ла 1 марттан арта. Электр транспортында бер тапҡыр йөрөү өсөн срокһыҙ пластик карталар һәм транспорт ҡушымтаһы булған берҙәм транспорт карталары буйынса түләү - 34 һум. Ҡулаҡса һәм банк карталары менән иҫәпләшкәндә транспортта бер тапҡыр йөрөү 41 һум тәшкил итәсәк. Мәктәп уҡыусылары өсөн транспорт ҡушымтаһы булған берҙәм транспорт карталары менән түләү 21 һум була.

✓1 мартта "Өфө ҡәлғәһе" мәҙәни-тарихи комплексында "Һырғалаҡ - 2026" ҡышҡы спорт фестивале үтә. Сара Өфөнөң Киров районына ҡараған Локотки ауылында иртәнге сәғәт 12-лә башлана. Фестиваль ҡунаҡтарын саңғы ярыштары, "Иң көслө батыр" ҡышҡы көс һынашы, бура һуғыу, ҡарҙа футбол һәм волейбол буйынса ярыштар көтә. Шулай уҡ этно-мәҙәни концерт программаһы ла ҡаралған.

✓Өфөлә XII "Мисс Башҡортостан-2026" республика матурлыҡ конкурсында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә башланы. Унда һомғол буйлы, кейәүгә сыҡмаған 15-25 йәшлек ҡыҙҙар саҡырыла. Конкурста ҡатнашыусылар өсөн оҫталыҡ дәрестәре, фотоға һәм видеоға төшөү, экскурсиялар ойоштороla. Конкурс ҙур финал шоуы менән тамамлана. Еңеүселәр Башҡортостан исеменән халыҡ-ара һәм ил кимәлендәге матурлыҡ конкурстарында ҡатнаша. Ғаризалар 8 (919) 157-65-43 номеры буйынса ҡабул ителә.

✓Кипрҙа карате буйынса Европа беренселеге үтте. Турнирҙа 47 илдән 1200-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Яҡташыбыҙ Эмиль Әлмөхәмәтов көмөш призер булды. Финалда 63 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында ул Италия спортсыһынан 3:4 иҫәбе менән еңелде.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✔ *Үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы ғорурланып телгә алам. Милләттәр дуҫлығы өлгөләренең өлгөһө була килде беҙҙең халҡыбыҙ һәр дәүерҙә лә. Хатта әле әйтелгән "үҙгәртеп ҡороу" мәлендә лә!*



ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Сәләмәтлек сихәте

Алтын тамыр ҡушылған бал организмды ҡанға ифрат та кәрәк микроэлементтар, витаминдар менән байыта, тәнгә ҡеүәт өҫтәй, дәртте күтәреүгә, һаулыҡты нығытыуға, оҙон ғүмерлелеккә булышлыҡ итә. Бал мумие менән бергә бөтә тән ағзаларына, айырыуса ҡан барлыҡҡа килтереүгә, һөйәктәргә, нервы системаһына, иммунитетҡа тергеҙгес, сәләмәтләндергес йоғонто яһай. Йәнә спирулиндар һәм С витамины менән бергә бал ҡушымтаһы сихәтле, биологик йәһәттән тәьҫирле. Уны көн һайын ҡулланғанда, интеллектуаль һәм физик әүҙемлек күтәрелә, шулай уҡ йөрәк-тамыр системаһының һәм ашҡаҙан-эсәк юлының эше яҡшыра.

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге тәбиғи балға биологик актив өҫтәлмәләр, минераль һәм органик компоненттар өҫтәп, туҡланыу ризыҡтары ла әҙерләй. Анығыраҡ итеп әйткәндә, йод-казеин, неоселен, сәскә һеркәһе һәм С витамины, сәскә һеркәһе һәм "Тьянши" биологик актив өҫтәлмәһе, инә ҡорт һөтө һәм "Тьянши" өҫтәлмәһе өҫтәлгән "Дәрт" балы тәҡдим итә. Мәҫәлән, йод-казеин ҡушылған бал кеше организмында матдәләр алмашыныуын яҡшырта, йод етешмәүен тулыландыра, нервы системаһын нығыта, ҡалҡан биҙе эшмәкәрлеген һәйбәтләй, үҫеүгә булышлыҡ итә.

Имселәр, табиптар бик тапҡыр билдәләгәнсә, бал - йәшәреү эликсиры, тән шифаһы, оҙон ғүмерлелек тәғәме. Халыҡ медицинаһында шешектәргә ҡаршы - әрекмән һуты ҡушылған; йүткереүҙән - тормаға һалынған; экземаны, һөйәлде, һытҡыны, бешкән урынды имләүҙә - ҡырылған картуфҡа өҫтәлгән; сәс үҫтереүгә һәм нығытыуға һуғанлы бал ҡулланалар. "Табиплыҡ фәне ҡануны"нда балды таҙа көйө һәм дарыу үләндәре, еләк-емеш, йәшелсә, аш-һыу менән ҡулланыу буйынса бихисап кәңәш, тәҡдим бирелә.

Бал косметикала ла киң ҡулланыла, дауалау битлектәре яһағанда файҙаланыла. Уның нигеҙендә бит, тән, ҡулдар, аяҡтар өсөн туҡландырыусы кремдар, желелар эшләп сығарыла. Сәләмәтлек һәм матурлыҡ тәбиғәттең үҙенән тип белдереп, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге косметик сараларҙың "Тылсымлы бал ҡорто" тигән яңы серияһын тәҡдим итә: төрлө-төрлө махсус кремдар, душ өсөн гель, шыйыҡ һабын, ванна өсөн күбек.

Күреүебеҙсә, белеүебеҙсә, хәҙер замандаштарыбыҙ йылдан-йыл күберәк тәбиғәткә, уның шифалы үҫемлектәренә, тәбиғи ниғмәттәренә һәм шулай уҡ бал ҡорто тәғәмдәренә иғтибарын көсәйтә, улар менән туҡлана, дауалана, сәләмәтләнә. Балды балалар ҙа, йәштәр ҙә, ололар ҙа хуш күрә. Ул медикамент һымаҡ, табиптар тарафынан да тәҡдим ителә. Терапевтик ҡиммәте составында прополис, һитә, инә ҡорт һөтө, организмға кәрәкле төрлө матдәләр булыуы менән аңлатыла.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 1-7-се һандарҙа).**

ЙЫЛ ТЕМАҺЫ

# ҺӘР САҠ БЕРҘӘМ БУЛДЫҠ!




**(Башы 4-се биттә).**

СССР тарҡалыуына ҡарамаҫтан, Рәсәй күп милләтле ил булып ҡалды бит. Ул ғына ла түгел, үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы ғына алайыҡ: элек-электән унда әллә күпме халыҡ вәкилдәре йәшәй. Шуға күрә лә был барыбыҙ өсөн дә бик мөһим. Тарихыбыҙ биттәрен асып ҡарай башлаһаҡ, ошо мәсьәлә көнүҙәк булып, ҡасандыр күльминацион нөктәләргә лә барып етешкәнен күрәбеҙ. Күп кенә тарихи ваҡиғаларҙан ғибрәт, ә бәғзеләренән, киреһенсә, үрнәк алып, киләсәк тормошобоҙҙоң именлеге хаҡында һәр кемебеҙҙең уйланыуы - тәбиғи. Һәр нәмә ситтән ҡарағанда баҙығыраҡ күренгән һымаҡ, теге йәки был дәүерҙең ыңғай һәм кире яҡтарын күпмеләр ваҡыт үтеп киткәндән һуң ғына тейешенсә анализлау мөмкиндер.

Уҙған быуат аҙағында бөтөрөлгән Совет илен төрлө яҡлап тәнҡитләүселәр етерлек. Ә минең бөгөнгө һүҙем уның ана шул иң яҡшы сифаттарының береһе, киләсәк заман кешеләре өсөн дә үрнәк булырлығы - халыҡтар дуҫлығы хаҡында. Сирек быуат Совет Армияһы сафында йөрөгән кеше булараҡ, әлбиттә, илебеҙҙән бер нисек тә айырып булмай торған ана шул мөхиттәге хәлдәргә ҡағылышлы һүҙ алып бармаҡсаҡмын. Йәшерен-батырыны юҡ, дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, ул осор Союзыбыҙ хаҡында бер ҡырын һүҙ әйтергә түгел, ә тик уны маҡтарға ғына бурыслы инек. Шуға күрә лә, киң матбуғат сараларында ла илебеҙҙәге күп кенә нәмәне бер аҙ шыттырыбыраҡ күрһәтергә тырышыу һиҙелә ине. Беҙҙең яҡта әйтмешләй, унығын белмәйем, ә бына "халыҡтар дуҫлығы" тигән бына ошо мөһим төшөнсәнең һис кенә лә яһалма булмағанлығын, тап шул дәүергә уның хас булыуын һәр оло быуын кешеһе раҫлар. Бөтә Союздан йыйылған милләт вәкилдәрен - дуҫтарымды, таныштарымдың бик күптәрен әле булһа яҡшы хәтерләйем. Барыһы ла бер иштән Совет һалдаты формаһы кейгән урыҫ Иван, тажик Фәруҡ, грузин "генацвали" Курашидзе, "ара" Мнацян, молдован Цауляну, үзбәк Ибраһим һәм башҡа бик күп хеҙмәттәштәремдең яҡты йөҙҙәре, һәр эштә бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тороуы, һәр кемеһенең үҙенсәлекле акцент менән мине "Халик" йә "Халил әкә" тип атауҙары әле булһа күҙ алдымда. "Һин - нацмен, ә беҙ - бөйөк милләт" тип, кемдеңдер икенсе берәүҙе кәмһеткән осраҡтарҙы ла хәтерләмәйем. Хатта Балтик буйы илдәре вәкилдәре Скроделис, Янулявичус фамилиялы һалдаттар ҙа беҙҙең менән бер рәттә ине бит. Һәр кем башҡаларға тик уның кешелеклегенә ҡарап мөнәсәбәт ҡылды ул саҡ. Һәр союздаш республикала ла үҙебеҙҙе иркен тойҙоҡ. Ял йорттарында булһынмы ул, хәҙерге ваҡытта әйтмешләй, әлеге "яҡын сит ил"дәрҙең береһенә барып йәшәү беҙҙең өсөн бер ни ҙә торманы. Сөнки барыбыҙ ҙа СССР-ҙы дөйөм бер ил тип һананыҡ.

Үҙемдең госпиталь начальнигы - Сидоров фамилиялы командирымды ла иҫкә алып китәйем әле. Хәрби табиптар араһында урыҫ милләтенән булған медицина хеҙмәте офицерҙары, әлбиттә, күп ине. Шуға ла ҡарамаҫтан, уның мине - әлегә тик "өлкән лейтенант" званиеһында ғына булған йәп-йәш "ҡара башҡорт" балаһын госпиталь бүлеге начальнигы вазифаһына тәғәйенләп ҡуйыуы күп нәмәгә ишара. "...Я знаю, товарищ Суюндуков, у тебя в "верхах" нет "волосатой руки", чтоб поддерживать. Ты не против, если я тебя назначу на должность подполковника?" - тигәнен әле булһа иҫләйем. Уның ошо һүҙҙәрен ишеткәс, мин үҙ ҡолағыма үҙем ышанмаһым тиерлек. Әммә был - ысынбарлыҡ ине. Офицерҙарҙың фәҡәт тырыш хеҙмәтенә генә ҡарап баһа биреүсе командир ине ул. Милләтенә түгел, ә һәр кешенең эшкә, үҙенә йөкмәтелгән бурысын үтәүгә ҡарашына ныҡ иғтибар ителә ине ул саҡтарҙа.

Бергә хеҙмәт иткән өлкән званиелағы бер килке милләттәшемде һанап китһәм, бәғзе берәүҙәр ғәжәпләнер ҙә, әммә был да ысынбарлыҡ! Подполковниктар - хәрби госпиталдә офтальмолог булып эшләгән Айҙар Ҡулбаев (Бөрйән районы), рентгенолог Марат Әхтәмов (Салауат районы) дивизия госпиталендә юғары категориялы табиптар, абруйлы офицерҙар ине. Подполковник Рәүил Зарипов иптәш, гарнизондағы сержанттар мәктәбенең начальнигы, алдынғы командирҙарҙан һаналды. Арабыҙҙа хатта полковниктар ҙа булды: дивизияның баш инженеры полковник Марат Мәүлитбирҙин (Стәрлебаш районы), полк командиры Фәһер Күҙбаев (Ырымбур өлкәһенең Аллабирҙе ауылынан, үткән йыл мәрхүм). Үҙебеҙҙең Стратегик ракета ғәскәрҙәрендә бына ошо дуҫтарымдың арҙаҡлы шәхестәр булып танылыуы хаҡында айырыуса ғорурланып иҫкә алам. Башҡорт милләтенән булыуыбыҙ беҙгә хеҙмәт баҫҡысы буйлап күтәрелергә бер ҡасан да ҡамасауламаны, тип әйтмәксемен.

Әлеге Октябрь байрамы йә булмаһа Совет армияһы көнөмө, һәр частан йыйып, үҙешмәкәр артистар араһында конкурстар ҙа йыш ҡына үткәрә инеләр. Ана шул байрамдарҙа ла "халыҡтар дуҫлығы" темаһы иң алғы планда торҙо. Һәр милләт вәкиле үҙенең концерт номерын әҙерләй... Тажиктар, молдавандар, Балтик буйы, Кавказ вәкилдәре һәм башҡаларҙың араһында йырсылар, бейеүселәр күп кенә. Барыһы ла үҙенең милли кейемендә сығыш яһарға тейешле. Башҡортостан союздаш ил түгел, ә Рәсәй составындағы автономлы республика булыуына ла ҡарамаҫтан, "Ни булһа - булһын", тип, бер мәл мин дә тәүәкәлләргә булдым. Төрлө яҡтан йыйылған ана шул халыҡҡа үҙебеҙҙең башҡорт ҡурайын күрһәтәйем әле, тигән теләгем тыуҙы. Иңемә башҡорттоң оҙон аҡ еләнен һалып, башыма "төлкө кәпәс" кейеп, ғөмүмән, боронғо ата-бабаларыбыҙға оҡшатырға тырышып, үҙемсә кейендем-яһандым. Аяғыма кейергә аҡ итек булмағас, үҙемдең "офицерский" хром итегемде аҡҡа буятып, ҡунысына милли башҡорт биҙәген төшөргәс, ҡәҙимге килешеп ҡалды. Музыкаль взводта баянсы булып хеҙмәт иткән бер урыҫ һалдатына башҡортса көйҙәр өйрәтеп, "Дом офицеров"тың сәхнәһендә дуэт менән сығыш яһаныҡ. Башта "Сыңрау торна", унан бернисә бейеү көйөн уйнаным. Дәррәү ҡул сабыуҙарға баштараҡ үҙем дә ышана алмай ҙа торҙом хатта (ҡурайҙы бер кем дә аңламаҫ, тип уйлағайным). Концерттан һуң ҡайһы берәүҙәр килеп ҡурайҙы тотоп, әйләндергеләп ҡарай, өрөп тә маташалар. Араларында бер офицерҙың ошо һүҙҙәре хәтеремдә: "Бындай музыкаль инструментты ғүмеремдә беренсе тапҡыр ишетеүем. Уйнаған көйөгөҙ бигерәк һағышлы. Уны тыңлағанда, матур тәбиғәтле, йәнлек, ҡош-ҡорттар, малдар менән тулы икһеҙ-сикһеҙ иркен далалар күҙ алдына килә..." Ә иң ҡыҙығы - Ракета частары дивизиялары араһындағы уҙғарыла торған ярышҡа, йәғни финалға үтеүем, шунда төрлө милләт вәкилдәренән торған жюри ағзаларының башҡорт ҡурайына беренсе урынды биреүе булды! Генерал миңә радиоприемник бүләк итте. Ул осорҙа милләт-ара ҡапма-ҡаршылыҡтар булыу ихтималлығын хатта күҙ алдына ла килтерә алмай инек бит. Эйе, ябай халыҡтарҙың һәммәһе һәм һәр саҡ үҙ-ара дуҫ йәшәргә тырыша...

Тик илдә әлеге "үҙгәртеп ҡороу" башланғас, "ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡан" һымағыраҡ булып китте шул. Элекке союздаш республикаларыбыҙ барыһы ла айырым дәүләткә әүерелде. Бәғзе берәй милләт вәкиленең - аныҡ бер кешенең фәҡәт үҙ яғын ғына ҡайырып, башҡаларҙы "һанға һуҡмауы", ул ғына ла түгел, айырыуса халҡын, телен ятраҡ-андарҙы милләтселеккә өгөтләп хөсөт таратыуы, башҡа милләттәргә ҡарата кире ҡараш пропагандалау осраҡтары ла күренеп ҡалғылай башланы. Һәр халыҡта тиерлек "ойоштороусылар" табылып тора бит әле. Был, әлбиттә, бер ҡасан да яҡшыға алып бармай. Милләтселектең ниндәй һөҙөмтәләргә алып килгәнен беҙ хәҙерге көндә көнбайыш Украина, Балтик буйы илдәре миҫалдарында күрәбеҙ. Хатта элекке фашистарға "оло ихтирам" тойғоһо йөрөтөүселәр ҙә ярайһы ғына иркенләп "баш ҡалҡыта" башланы. Илдә "перестройка" булып, Советтар Союзы тарҡалыу алдында торғанда, бер мәл ҡырғыҙҙар менән үзбәктәр ҙә талашып киткәне хәтеремдә. Әрмегә саҡырылған үзбәк һәм ҡырғыҙ егеттәрен бер часҡа ҡушып алмаҫҡа тырыштылар ул мәлдә. Шул осорҙары, мин хеҙмәт иткән хәрби гарнизонда ингуш һәм дағстанлы һалдаттар ҙа үҙ-ара низағлашып, көскә баҫтырҙылар. Һуғышыу арҡаһында бер Дағстан егетенең тома һуҡыр ҡалыуын иҫләйем. Уларҙы төрлө дивизияларға таратып ҡына ҡотолдолар.

Ошондай темаға һүҙ алып барғанда, үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы ғорурланып телгә алам. Милләттәр дуҫлығы өлгөләренең өлгөһө була килде беҙҙең халҡыбыҙ һәр дәүерҙә лә. Хатта әле әйтелгән "үҙгәртеп ҡороу" мәлендә лә! Кемдәрҙе генә үҙ ҡуйынына һыйындырманы эскерһеҙ, изге күңелле йомарт, ҡунаҡсыл башҡорт халҡы. Милләтселекте динебеҙҙең дә хупламауы хаҡында беҙҙең ата-бабаларыбыҙ яҡшы белгәндер. Барыбыҙ ҙа бер ата һәм бер әсәнән яралған, йәғни, Әҙәм һәм Һауа балалары. Шуға күрә бер халыҡ та икенсеһенә ҡарағанда өҫтөн булырға тейеш түгеллеге, Аллаһ ҡаршыһында барыбыҙҙың да тигеҙ булыуыбыҙ, Уның хозурында иң һөйкөмлөләр - Уға буйһоноусылар булыуы хаҡында Ҡөрьән аяттары ла бар.

Бына шулай, дуҫтар, кемгәлер, бәлки, оҡшап та етмәҫ, әммә үткән замандың ошо бик тә мөһим бер яғы хаҡында әйтмәй булдыра алманым. Һәр нәмә тик кире сифаттарҙан ғына тормай һәм, шул уҡ ваҡытта, гел идеаль яҡшы ғына ла була алмай шул...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*✓ Ағас тирмәндән тыш, башҡорттарҙа бик йыш булмаһа ла, таш ҡул тирмәне лә осраған. Борон улар киң таралған булһа ла, бындай тирмәндәрҙе миңә бары тик тау башҡорттарында ғына күрергә тура килде.*

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**



Ҡайһы бер урындарҙа йырындар тотошлайға ошо таш һибелмәләре менән тулған, бындағы кешеләр уларҙы "таш шишмәләре" тип йөрөтә. Уларҙың килеп сығышы хаҡында башҡорттарҙа шундай риүәйәт бар. Ҡасандыр бында шайтандар һәм фәрештәләр араһында һуғыш булып үткән, шайтандар күп булғас, ул оҙаҡ барған. Фәрештәләргә ярҙамға яңылары ебәрелгән, шунан һуң улар шайтандарҙы еңгән һәм, ҡаяны ватып, уларҙы таш менән күмеп ҡуйған. Тап шуға күрә башҡорттар бындай урындарҙан үтеп йөрөргә хәүефләнә һәм бынан үткән саҡта бер ҡасан да үҙ-ара һөйләшмәй, сөнки ниндәйҙер бер шайтандың уянып китеүенән ҡурҡа.

Юлыбыҙҙың Инйәргә тиклемге икенсе яртыһы бынан да төпкөлөрәк урындарҙан үтә, һәм шул уҡ ваҡытта тәбиғәт ҡеүәтенең кешенән ни тиклем бөйөгөрәк булыуы анығыраҡ тойола. Кеше үткеһеҙ төпкөл. Көнө буйына барһың, әммә бер әҙәм заты ла осрамай. Үле тынлыҡ урынлашҡан. Бер тауыш та юҡ; әмәлгә ҡалғандай, бер генә булһа ла ҡошсоҡтың ҡысҡырғаны ишетелмәй. Тынлыҡ ат аяҡтары тауышы менән генә боҙола, йә булмаһа ҡор осоп киткәндә йә иһә тейен йүгереп үткәндә ботаҡ шыртлағаны ғына ишетелеп ҡала.

Тауҙар сәскә атҡан муйыл, гөлйемеш, төрлө бал биреүсе үләндәрҙең хуш еҫтәре менән тулған, һәм быларҙың барыһы өҫтөндә - бер болотһоҙ зәңгәр күк. Уралдың ошо ҡырағай урындарында, ошондай юлдан үткән саҡта ниндәйҙер бер айырым хистәр кисерәһең, күңелеңдә ниндәйҙер бер кешеләрҙән ситләшелгәнлек, айырылғанлыҡ тойғоһо биләп ала, шул уҡ ваҡытта тау түбәләренә күтәрелгәндә, йә иһә үҙәндәргә төшкәндә ошо ҡырағай, кеше ҡулы тейелмәгән тиерлек Урал тәбиғәтенең гүзәл күренештәренән ләззәт алаһың: урмансыларҙың йыртҡыс ҡулдары бында тиклем үтеп инә алмаған.

Өшөрә йылғаһының түбәнге ағымында, уның Оло Инйәргә ҡойған урынында Осман (Усман)-Галина тигән ауыл урынлашҡан (Уҫманғәле ауылы. - **Тәрж. иҫк.**) Бынан башлап Өшөрә йылғаһы үҙәне киңерәк һәм тигеҙерәк була бара - тауҙар алыҫтараҡ ҡалған кеүек тойола, туғайҙар һәм сабынлыҡтар осрай.

Осман-Галина ауылы янында Инйәрҙе аша сығырға тура килде, ул бында үҙен ҡамалап алған тауҙар араһынан сығыу юлын тапҡан, киңәйә биргән, әммә тәрәнәймәгән. Яҙҙарын һәм ямғырлы көндәрҙә ул ярһып аға, уны аша сығып та булмай. Инйәр ярҙары иҫ киткес матур, бигерәк тә заводтан түбәнерәк һәм уға яҡын ерҙәрҙә: бында һыуға перпендикуляр рәүештә тиерлек төшөп торған һоро ҡаялар бик күп, улар араһында тәрән йырындар һәм үҙәндәр күренә. Билләғош, Ҡараташ, Ямантау һәм башҡа тауҙарҙан бик гүзәл күренеш асыла. Ошо тауҙарға артылыу нисек кенә ауыр булмаһын, уларҙан Урал армыттары, тауҙар араһындағы үҙәндәр ғәжәп матур булып күренә, ә һуңғыларын күҙгә әллә ни салынырлыҡ булмаған башҡорт ауылдары төйәк иткән.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 3-7-се һандарҙа).**

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# СУҠЫНДЫРЫУ СӘЙӘСӘТЕН...

## башҡорттар ҡабул итмәгән

### Өсөнсө осор



1736-1789 йылдарҙы үҙ эсенә ала, йәғни 1736 йылдың 11 февралендәге указ баҫылғандан алып Өфөлә I Ырымбур мосолман Диниә назараты асылғанға тиклемге осор. Батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы Ислам дине һәм уның институттарына ҡаршы һәжүменең иң ҡыҙыу мәле ошо осорға тап килә. Әйтергә кәрәк, мәжүси һәм мосолмандарҙы суҡындырыу тыныс юл менән дә, көсләү юлы менән дә үткәрелә.

Батша хөкүмәтенең 1736 йылдың 11 февралендәге указы Башҡортостанда үҙенең сикһеҙ хакимлығын нығытыу өсөн программа була. Ошо маҡсатҡа өлгәшеү һәм башҡорттарҙың баш күтәреүенән һаҡланыу ниәтендә, Башҡортостанды хәрби нығытмалар менән уратып алыу өсөн Яйыҡ, Зәй, Шишмә йылғалары буйлап һәм Себерҙә нығытылған сик буйы селтәрен төҙөү көсәйтелә. Шулай уҡ үрҙә әйтелгән указ һәм башҡа акттарҙа мәжүсиҙәр араһында Ислам динен таратыу һәм яңы мәсеттәр төҙөү, дини мәктәптәр асыу тыйыла. Иң юғары мосолман руханиҙары һаны ла ҡыҫҡартылып, һәр даруғаға берәр ахун ғына ҡалдырыла. Шәриғәт хоҡуҡтары ла ҡыҫыла. Мосолман руханиҙарының эшмәкәрлеге урындағы администрация күҙәтеүе аҫтына алына.

Башҡорттарҙың 1735-1740, 1755 һәм 1773-1775 йылдарҙағы ихтилалдары барышында ла, улар аяуһыҙ баҫтырылғас та, хөкүмәт дини мәсьәлә буйынса программаһын тормошҡа ашырыуын дауам итә, хатта көсәйтә төшә. Атап әйткәндә, баш күтәреүселәрҙең балаларын һәм ҡатындарын суҡындырыу һәм Башҡортостандан ситкә алып китеү хоҡуғы менән һатыу һәм һатып алыу рөхсәт ителә. Башҡорттарҙы суҡындырыу 1738 һәм 1776 йот йылдарында айырыуса көсәйә. Ихтилалдарҙы мәрхәмәтһеҙ баҫтырыу һөҙөмтәһендә башҡорттар бөлгөнлөккә төшә, аслыҡ башлана, ә власть әһелдәре һәм миссионерҙар ошонан файҙалана ла инде: беренсенән, суҡынған өсөн бушлай икмәк бирелә, икенсенән, фәҡир башҡорттар суҡындырыу шартына ризалашып, балаларын һәм ҡатындарын икмәккә алыштыра, өсөнсөнән, үҙҙәрен-үҙҙәре һатып, христианға әйләнеү осраҡтары күҙәтелә. Шулай уҡ карателдәргә суҡындырыу хоҡуғы менән әсир ихтилалсылар таратып бирелә.

Сенаттың 1742 йылдың 9 ноябрендәге указы менән яңы мәсеттәрҙең бөтәһен дә емерергә бойороҡ бирелә. Һөҙөмтәлә, 536 мәсеттең 418-е юҡҡа сығарыла. Ә 1743 йылдағы указ менән яңы суҡындырылғандар йәшәгән ауылдарҙа мәсет төҙөү бөтөнләй тыйыла.

Миссионерлыҡ эшмәкәрлеге уңышлыраҡ булһын өсөн ҡайһы саҡта көсләп суҡындырыуҙы туҡтатып торалар, 1744 йылдан христиан миссионерҙарына берәү ҙә ҡаршылыҡ күрһәтергә тейеш булмаған. Улар мосолман һәм мәжүсиҙәр ауылдарында йөрөп, Мөхәммәт менән Ғайса бәйғәмбәрҙе (Иисус Христосты), Ҡөрьән менән Тәүратты сағыштырып, тәүгеләрен яманлап, икенсеһен маҡтап йөрөгәндәр.

Әйтергә кәрәк, суҡындырылған башҡорттарҙы, ғәҙәттә, Башҡортостандан ситкә сығарып, крепостной крәҫтиән сифатында алпауыттарға таратып йә һатып биргәндәр. Шул сәбәпле Рәсәйҙең күп төбәктәренә таратылған керәшен башҡорттар билдәле бер этнос вәкиле булараҡ юҡҡа сығырға - русҡа әйләнергә мәжбүр ителгән. Ә бына керәшен татарҙарға һәм мәжүсиҙәргә мөнәсәбәт башҡасараҡ булған. Керәшен татарҙарын Ҡаҙан губернаһынан ситкә сығарһалар ҙа, йыш ҡына Башҡортостанға килтерер булғандар һәм уларҙан ҙур-ҙур ауылдар ойоштороғандар. Мәҫәлән, Ноғайбәк ҡәлғәһе, Баҡалы, Бөгөлсән, Мәләүез һәм Петровское ауылдары. Уларҙы казактар сословиеһына индергәндәр һәм башҡаларҙан айырғандар. Улар бер төрлө эш башҡарып, бер идара аҫтында булғандар.

1735-1740 йылдарҙа ғына башҡорттар араһынан, язаланғандарынан тыш, 3 236 кеше флотҡа ебәрелә, 8 380 ҡатын-ҡыҙ һәм бала-саға Рәсәйҙең эске губерналарына оҙатыла.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Дауамы. Башы 4-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү





Аҙыҡҡа ҡулланыу алдынан башҡорттар игенде кәбәктән айырып, унан ярма яһаған, тарттырған. Тары, арпа, бойҙайҙы кәбәктән килелә (**һүрәт**) төйөп айырғандар йәки бер тапҡыр ҡул тирмәнендә (**һүрәт**) тартҡандар. Ҡул йәки ағас тирмәне бер ваҡыт башҡорттарҙа киң таралған була. XX быуат башында инде кәмей, шулай ҙа уны һәр ерҙә осратырға мөмкин. Бындай тирмәндәр бейеклеге 25 сантиметр, диаметры 60-70 сантиметр булған ике ҡайын түмәрҙән эшләнгән. Тирмәндең аҫҡы өлөшөнә ағас йәки тимер кендек ҡуйылған, уға өҫкө өлөштә киң генә тишек тура килгән. Ике өлөштөң бер-береһенә тейеп торған өлөштәре ҡабырғаһы менән һәм ваҡлап ҡағылған суйындан торған. Тирмәндең аҫҡы өлөшө уртаға ҡарай ҡабарынҡы, ә өҫкөһө, киреһенсә, саҡ ҡына соҡорайған булған. Өҫкө өлөштөң бер ситенә бәләкәй генә ҡаҙыҡ-тотҡа урынлаштырылған. Ул өҫкө өлөш менән бергә эшләнгән, йәки айырым эшләнеп, нығытылып ҡуйылған. Ошо тотҡа ярҙамында тирмәнде әйләндергәндәр. Тирмән тартҡанда уның аҫтына быҙау йәки ҡолон тиреһе эс яғы менән киндер япма итеп һалынған. Тирмәндә игенде бер тапҡыр тартҡанда уның кәбәге айырылып, ярма барлыҡҡа килгән, ә он алыу өсөн игенде өс-биш тапҡыр тартырға тура килгән.



Ағас тирмәндән тыш, башҡорттарҙа бик йыш булмаһа ла, таш ҡул тирмәне лә осраған (**һүрәт**). Таш тирмәндәр ағас тирмәне кеүек үк ике яҫы таштан яһалған. Борон улар киң таралған булһа ла, бындай тирмәндәрҙе миңә бары тик тау башҡорттарында ғына күрергә тура килде. Башҡорттар йыш ҡына йәйләү йәки боронғо ауыл урындарын баҫыу итеп һөргәндә бөтөн йәки ватыҡ тирмәндәр тапҡан.

Тирмән тартыу менән бары тик ҡатын-ҡыҙ шөғөлләнгән.

Ҡул тирмәндәренән башҡа, Башҡортостанда борондан һыу тирмәндәре - ябай "таҡыя" һәм "тәгәрмәсле" тирмәндәр ҙә булған. XVIII быуаттың беренсе яртыһындағы документтарҙан күренеүенсә, башҡорттар ерҙәренә татарҙарҙы индергәндә уларҙың да "таҡыя"-тирмәндәрҙе үҙҙәре теләгәнсә, ә инде тәгәрмәслеләрен бер йәки ике поставалы итеп төҙөргә хоҡуҡлы булыуҙарын билдәләгән.



"Таҡыя"-тирмәндәр ҡул тирмәне кеүек булған, әммә улар двигатель урынына һыу энергияһын ҡулланған (**һүрәт**). Бындай тирмәндәр XIX быуат һуңында Башҡортостан Ырымбурында осраған.

Башҡортостанда күп осраған ҙур һыу тирмәндәре билдәле рус тирмәндәренән бер нимәһе менән дә айырылмаған.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Урал батыр заманы хәҙер. Урал батырҙың әйткән һүҙҙәре һәр заманда ла бөтә кешелек өсөн актуаль булырға тейешле. Ошо хәҡиҡәтте кешегә еткереп, кешелекте иҫкәртер мәл хәҙер.***



# ИХЛАС, АСЫҠ

## Урал батыр һүҙенә

(Башы 1-се биттә).

**"Аҡһыу" студияһы генераль директоры, продюсер Рөстәм Сәрүәров, бындай йырҙы яҙып, донъяға сығарыр өсөн миллиард һумдар кәрәкмәй, яҡшы идея һәм эпос булыуы мөһимерәк, тип яҙа һәм хәҡиҡәткә яҡынлай ҙа.**
**Нисек кенә булмаһын, "Әй Йола" төркөмө, ошо "Һомай" йырын башҡарып, тарихта тәүге тапҡыр халҡыбыҙҙың һүҙен бар донъя кимәлендә берәгәй яңғырата алды. Үҙәк телеканалдарҙың һәр ҡайһыһында тиерлек сығыш яһаны улар, "Һомай" йырын донъя халыҡтары үҙ телдәренә тәржемә итеп башҡарырға керешә.**
**Шунан да ҙурыраҡ баһаның булыуы мөмкинме икән! Афарин, "Әй Йола", афарин, Ринат, афарин, Руслан, афарин, Аделя-Әҙиләкәй! Һеҙ мөмкин булмағанды эшләй, халҡыбыҙҙың тарихын, йыр-моңон, тауышын бар донъяға ишеттәрә алдығыҙ!**
**Халыҡта "Ашаған белмәй, тураған белә" тигән әйтем бар. Тап шуның өсөн дә "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө етәксеһе, "Әй Йола" төркөмөнөң солисы, атаҡлы ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Ринат РАМАЗАНОВ менән әңгәмә ҡороп, төркөм башҡарыуындағы "Һомай" йыры феноменының ҡайһы бер серҙәре хаҡында белергә теләнек.**

**Ринат, һеҙ "Һомай" йыры менән донъя кимәлендә популярлыҡ яуланығыҙ. Һеҙҙең уңыштың нигеҙендә нимәләр ята тип уйлайһың: оригиналь көймө, ритммы, йыр тексымы, ҡурайҙың, думбыраның, өҙләүҙең синтезымы, костюмдарығыҙмы, замандың электрон мөмкинлектәрен файҙаланыуымы, йырҙы башҡарыусы Аделяның "рафинад" башҡорт телеме, тарихмы һ.б.? Нимә генә тимәйек, был уңышығыҙ осраҡлы ғына күренеш булманы. Ҡыҫҡаһы, "Әй Йола" феноменының нигеҙҙәрен нимәлә күрәһең?**

- Иң беренсе нәүбәттә, Урал батырҙың рухы, Аллаһ Тәғәләнең ризалығы, халҡыбыҙҙың ҡатмарлы һәм аңлатып бөтә алмаслыҡ тарихы ярҙам иткәндер. Меңәр йылдар буйына Урал батыр рухы менән йәшәү һәм шуға тоғро булып ҡалыу, Урал бәйғәмбәр һүҙен еткерергә тырышыуҙан һәм уны миллиондарҙың ҡабул итеүенән килеп сыҡты ла инде был ижади уңыш.

Йыр тексының авторы Диана апай Килдина туғыҙ йыл элек миңә Урал батырға арналған шиғырҙарын уҡып күрһәткәйне. Ул мәшһүр эпосыбыҙҙы ғүмере буйына өйрәнә, уның иң төрән һәм йәшерен мәғәнәләрен сығарып, шиғырҙар ижад итә. "Арғымаҡ" төркөмө егеттәре менән сығыш яһап йөрөгәндә биргәйне ул шиғырҙарҙы. Шул саҡтан туғыҙ йыл үткәс кенә уларға тотонорға форсат тыуҙы. Унан алда ҡыйманыммы, әллә кимәлем етмәнеме, шиғырҙары көтөп ятты. "Арғымаҡ" төркөмөнә нигеҙ һалғанда төп эш ҡоралдарыбыҙ ҡурай, думбыра, ҡумыҙ, өҙләү, шулай уҡ заманса стилләштерелгән төрлө музыка ҡоралдары ярҙамында халҡыбыҙҙың тарихына, уның мәшһүр шәхестәренә, арҙаҡлы батырҙарыбыҙға төп иғтибарыбыҙҙы йүнәлткәйнек.

**Бер нәмә лә осраҡлы булмай, тиҙәр, улай ғына ла түгел, философия күҙлегенән ҡарағанда, һәр бер осраҡлылыҡ законлы күренеш тиҙәр. Шулай ҙа "Арғымаҡ" төркөмөн ойоштороу нисегерәк башланып китте?**

- Мин бәләкәй саҡта уҡ "Рәсүл ағай Ҡарабулатов һымаҡ ҡурайҙа уйнаясаҡмын" тигән маҡсат менән ҡурайға тотонғайным. 2007 йылда Өфө сәнғәт училищеһында уҡығанда гитарасы бер егет менән заманса йүнәлештә ижад итә башлағайныҡ. Ә 2009 йылда инде "Арғымаҡ"тың тәүге репетицияһы булды. 2023 йылда инде төркөмдә паузаға ҡуйҙым. Сөнки өс йыл буйына барған пандемия, аҙаҡ донъя болалары башланғас, егеттәр менән аҙыраҡ туҡтап торҙоҡ. Пауза юҡҡа ғына яһалманы, сөнки йылдар буйына "Арғымаҡ"та ижад итеү Урал батырға тотонорға әҙерлек тә булды.

**Ә Руслан Шәйхетдинов - Руслан Север менән нисегерәк танышып киттең?**

- Руслан Северҙың кассетаһын ағайым миңә 11 йәштә бүләк иткәйне. Ул Өфө сәнғәт училищеһында уҡып йөрөй ине, мин Мәләүездә мәктәптә уҡыным ул саҡта. "Нимәгә кәрәк ул миңә?" - тигәйнем, ағайым: "Әле электрон музыка яңы башланып тора, Өфөлә был нигеҙҙә сығыш яһаусылар ҙа бар", - тине. Шул ваҡытта кассетаны тыңлап, шундай кешенең барлығы хәтеремдә тороп ҡалды. Күпмелер ваҡыт үткәс, 2023 йылда филармониянан киткән осорҙа социаль селтәрҙәр аша Руслан Северҙа диджейға уҡыған, "Хан ҡыҙы" тип атап йөрөтөлгән ҡурайсы ҡыҙыҡайҙы күреп ҡалдым. Ул электрон музыкаға ҡушылып ҡурайҙа уйнай. Шунан Руслан Северҙың сәхифәһенә инергә булып киттем. Артабан уның менән танышыу теләгем тыуҙы. Бер нәмә лә осраҡлы түгел, бала саҡта миңә Руслан Северҙың кассетаһы ла осраҡлы ғына бүләк ителмәгәнлеген аңланым шул саҡта.

**Шулай ҙа яңы ижадташтарың, Руслан Север, уның ҡыҙы Әҙилә менән танышыуыңдың осраҡлы булмауын тағы ла нисек аңлатаһың?**

- Әйтәйек, минең буйым - 1 метр 82 сантиметр, Русландың буйы - 1 метр ҙа 86 сантиметр, Әҙилә бәләкәй генә, матур ғына ҡыҙыҡай. Әгәр ҙә бүтән күрһәткестәрҙе лә системалаштырып алһаң, был күптәнге, Хоҙай Тәғәлә тарафынан беҙгә яҙылған тәҡдир булғандыр.

Руслан - үҙенең йүнәлешендә ныҡ үҫешкән юғары профессионал. Уның кеүек оранжировка эшләүсе оҫталар бармы икән? Улар бөтә нәҫеле менән музыканттар. Әҙиләнең дә тауыш мөмкинлектәре бик киң. Ул заман музыкаһын да үҙенә һеңдереп үҫкән. Ә башҡорт мөхитендә, башҡорт көйҙәрен генә тыңлап үҫкән кешегә донъя кимәлендәге музыкаға ҡулайлашыуы бик ауырға тура килә.

Үҙем дә 1-се кластан 9-сыға тиклем рус мәктәбендә уҡыным. 10-сы синыфта ғына башҡорт класына күсеп, рухи яҡтан нығындым. Класташтарым нефть, авиация буйынса уҡыу йорттарына уҡырға инделәр. Мин дә улар һымаҡ, шул йүнәлештә китергә уйланым башта. Шул саҡта атайым, әсәйем, инәйем ҡурай уйнап, төрлө конкурстарҙа алған дипломдарыма, бүләктәремә ишаралап, сәнғәт буйынса китергә тәҡдим итте. Шуға күрә Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә һынау тотоп ҡараным, тик алманылар.

Әле килеп, Руслан, уның ҡыҙы менән бергә ижад итә башлағанда, төп йүнәлешебеҙҙе этностиль тип билдәләнек. Шул саҡта архивымдан Диана апай Килдинаның 9 йыл элек миңә биргән шиғырҙарын табып алдым. Доктор яҙған рецепт һымаҡ булды ул. Руслан менән икебеҙ студияла был хәлдә икәүләп бер тауыштан шатлыҡлы ауаз менән билдәләнек. Шиғырҙа быға күрелмәгән яңылыҡ бар ине. Уға яҙылған йырҙың бар донъяны шаңҡытыр аһәнен тойҙоҡ шунда уҡ.

***Руслан - үҙенең йүнәлешендә ныҡ үҫешкән юғары профессионал. Уның кеүек оранжировка эшләүсе оҫталар бармы икән? Улар бөтә нәҫеле менән музыканттар. Әҙиләнең дә тауыш мөмкинлектәре бик киң. Ул заман музыкаһын да үҙенә һеңдереп үҫкән. Ә башҡорт мөхитендә, башҡорт көйҙәрен генә тыңлап үҫкән кешегә донъя кимәлендәге музыкаға ҡулайлашыуы бик ауырға тура килә. Әле килеп, Руслан, уның ҡыҙы менән бергә ижад итә башлағанда, төп йүнәлешебеҙҙе этностиль тип билдәләнек.***

**Һин әйткәндәрҙе йомғаҡлаһаҡ, "Һомай" йыры феноменында бер нисә факторҙың синтезын күрергә була, шулаймы?**

- Иң беренсе нәүбәттә, әлбиттә, Урал батырыбыҙ, эпостың мәғәнәһе. Ул мәктәп программаһына индерелгәнсә ябай ғына әкиәт түгел, ә ысынбарлыҡ, Урал бәйғәмбәрҙең васыяты. Халҡыбыҙ Ислам диненә тиклем дә йәшәгән, артабан Исламды ҡабул иткәндә лә Урал батырҙың:

*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ:*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ, -*

тигән васыятын иҫтә тотоп, Аллаһ Тәғәләнең юлына тоғро булып ҡала. Аллаһ Тәғәләгә ихтирамды, һөйөүҙе, иғтибарҙы, ҡәлебендә Хаҡ Тәғәләне тойоуҙы кешегә еткерергә тырышыуыбыҙ ошо уңышҡа килде. Дан өсөн дә түгел, аҡса өсөн дә түгел, йондоҙ булырға ынтылыу ҙа түгел. Аллаһтың хаҡ һүҙен кешелеккә, тереклеккә, бигерәк тә тыуған халҡыбыҙға еткерергә тырышыуыбыҙҙың һөҙөмтәһе булды был сығышыбыҙ.

Беҙ бында сәбәпсе генә булдыҡ. Беҙ Урал батырҙы һайланыҡ, тибеҙ ҙә ул, кем белә, бәлки, Урал батыр беҙҙе һайлағандыр әле. Сөнки күп кенә ижади коллективтар, айырым кешеләр "Урал батыр" эпосына тотоноп ҡараны, ниндәйҙер кимәлдә уңыштарға ла өлгәштеләр, әммә бар донъяға яңғырарлыҡ итеп юғары кимәлгә сығыу беҙҙең өлөшкә яҙҙы. Күктән ниндәйҙер ярҙам килеп, беҙҙе ҡул менән йөрөткән һымаҡ та булды. Клиптарҙы төшөргәндә Руслан менән әрләшеп тә бөттөк. Ямғыр яуа, көслө ел, тубыҡтан батҡаҡ булһа ла, шул-шул урынға өс-дүрт сәғәт барырға кәрәклекте мин уға аңлатам. Руслан батҡаҡҡа буялып бөтәбеҙ, көнөбөҙҙө юғалтабыҙ, тип ҡаршы төшә. Шул урынға барып еткәнсе ямғыр яуа, баш осонда болоттар өйөрөлә, әммә килеп кенә етеүебеҙ була, ямғыр ҙа туҡтай, болоттар ҙа тарала, ҡояш та йылмая. Беҙ эшкә тотонабыҙ, үҙебеҙгә кәрәкле кадрҙарҙы төшөрөп бөтөп, ҡайтырға сыҡҡанда, тағы ла болоттар ҡуйыра, тағы ла ямғыр яуырға тотона. Тәүҙә беҙ был хәлде осраҡлылыҡ тип ҡабул иттек, аҙаҡтан инде ул тәбиғи күренешкә әйләнде. Миңә: "Әллә ғәләмдәр канцелярияһына хат яҙаһыңмы?" - тип тә аптыранылар.

**Һеҙҙең клиптарҙы ҡарағанда Башҡортостандың ғына түгел, башҡа яҡтарҙың да тәбиғәте һынлана. Уларҙы төшөргәндә ҡайһы тарафтарҙа булдығыҙ?**

- Якутияға, мәҫәлән, ҡыш бөткәс, әле туристик миҙгел асылмаған саҡта килдек. Турист һуҡмаҡтары, транспорт бәйләнештәре ябыҡ. Беҙҙе иң юғары кимәлдә Саха-Якутия Республикаһы Башлығы Айсен Николаев ҡабул итеп, үҙенең вәкилен беркетте. Шунан Транспорт министрлығы аша махсус рөхсәттә Лена йылғаһы буйлап ике катерҙа экспедиция астылар. Йәшәргә ҡунаҡханалар бикле, уларҙың береһенең хужаһын эшкә сығарып, йәшәргә бүлмәләр бирҙеләр, һый ҙа әҙерләнеләр. Беҙ килеү менән ҡояш сыҡты, сүллектәге шикелле футболкаларҙа ғына йөрөп ятабыҙ. Лена йылғаһының таш-ҡая бағаналарын, бизондарҙы төшөрҙөк. Өс көн эшләнек. Аҙаҡҡы кадр боҙлоҡта булды. Унда минең кадр ине. Шуны төшөрөп, машинаға ултырғайныҡ, күк йөҙөн ҡап-ҡара болоттар ҡапланы, көн боҙолдо.

Артабан Үзбәкстанға киттек. Унда эҫелек 50-55 градус тирәһе. Кешеләр был көндәрҙә урамға сыҡмай, кондиционер аҫтында ята. Беҙ килеп төшкәйнек, температура 30-30-ға тиклем түбәнәйҙе лә ҡуйҙы. Үзбәктәр: "Был ваҡытта беҙҙә ғүмерҙә лә ундай һауа торошо булғаны юҡ ине", - тип аптыранылар. Ҡаҙағстанда ла иң юғары кимәлдә ҡабул иттеләр, кадрҙар төшөрөргә рөхсәт бирҙеләр, үҙҙәренең кешеләрен беркеттеләр.

Шулай итеп, Урал батырҙың фатихаһы менән йөрөгән һәр еребеҙҙә юлдар асылып, болоттар таралып, ҡояш сығып торҙо. Кәрәкле ваҡытта тейешле кешеләр үҙҙәре килеп сыҡты, эшебеҙҙә тотҡарлыҡ булманы.

Урал батыр заманы хәҙер. Ни өсөн тигәндә, кешелек яңылыш юлға баҫты. Донъяла ҙур үҙгәрештәр бара, машиналар, технологиялар яңыра, ә рухи хәләт Урал батырҙың васыяты кимәлендә һаҡланып ҡаламы, юҡмы, әйтеүе ҡыйын. Урал батырҙың әйткән һүҙҙәре һәр заманда ла бөтә кешелек өсөн актуаль булырға тейешле. Ошо хәҡиҡәтте кешегә еткереп, кешелекте иҫкәртер мәл хәҙер.

**Беҙҙең сәнғәт экзотикалы булыуы менән дә башҡаларға**

✓ *Әҙиләбеҙ - Салауат Юлаевтың ырыуҙашы, көҙәй ҡыҙы. Ул бер ҡарашы менән башҡорт ҡатын-ҡыҙының эске матурлығын күрһәтә алды. Диана апайҙың шиғырында ла шундай һүҙҙәр бар: "Тамырҙарым минең һорай, йәнем дә, ҡаным да һорай..."*



# ЙӨРӘКЛЕЛӘР...

## сарсап йәшәй

**ҡыҙыҡлы. Һеҙҙең уңыштың нигеҙендә экзотика ниндәй урын алып тора?**

- Әлбиттә, экзотик ҡараш та бар. "Астың асыуы яман", ти халҡыбыҙ. Тап шуның кеүек, рух та ашарға теләй. Рухи аҙыҡ - ул сәнғәт, тарих, ижад, дин һәм рухты туҡландыра торған башҡа мөмкинлектәр. Әле телеканалдар, социаль селтәрҙәр шәрә ҡыҙҙар менән тулған. Ирендәре бүрттерелгән, түштәре һыйырҙың елене кеүек ҙур, арт яҡтары яланғас, уларҙы береһен икенсеһенән айырып булмай. Был күренештәрҙе ҡарап та булмай, күңел болғана.

Әҙиләбеҙ - Салауат Юлаевтың ырыуҙашы, көҙәй ҡыҙы. Ул бер ҡарашы менән башҡорт ҡатын-ҡыҙының эске матурлығын күрһәтә алды. Диана апайҙың шиғырында ла шундай һүҙҙәр бар: "Тамырҙарым минең һорай, йәнем дә, ҡаным да һорай..."

Төрлө илдәрҙә, төрлө телдәрҙә һөйләшеүсе кешеләр беҙҙең "Һомай" йырын сүллектә сарсаған юлсылай ҡабул итте. Йырҙың тексын рус, инглиз, итальян, испан, төрөк, үзбәк, ҡаҙаҡ һ.б. телдәргә тәржемә итеп, титрҙар эшләнек. Башҡортса сыҡҡан йырға интернет аша тәржемәләр һорай башланылар. Бөтә донъя буйынса Google белешмәһендә 1-се урында - "Һомай" йырының тәржемәһе, артабан - "Башҡортостан", шунан "Урал батыр" торҙо. Үҙ телдәрендәге йырҙың тәржемәһе аша уҡыусылар беҙҙең ижад менән тағы ла нығыраҡ ҡыҙыҡһына башланы. Беҙҙе иң күп тыңлаусылар: Рәсәй (1-се урында), Дания (2-се), Голландия (3-сө). Үҙебеҙ ҙә аптыраныҡ. Шулай уҡ Мексикала ла, Ҡытайҙа ла, Корея ла, Филиппинда ла, Аргентинала ла тыңлайҙар. Бынан шундай һығымта яһап була: ҡайҙа ихлас, йөрәктәре асыҡ кешеләр - шулар Урал батырҙың һүҙенә сарсап йәшәй.

Экзотика тигәндә, беҙ Африка һаҡалын, Ҡытай драконын, Бразилия карнавалын күҙ уңында тотабыҙ. Ә беҙҙең сығышҡа килгәндә, тик милли костюмыбыҙ ғына экзотиканы тәшкил итәлер. Шулай уҡ, бәлки, декорациялар экзотикалыр.

**Ҡасандыр "Ламбада" йыры киң таралыу алғайны. Уны бөтә донъя халыҡтары йырланы һәм көйөнә бейене. Әммә бөгөн ул йырҙы онотҡанда бер иҫкә төшөрәбеҙ. Һеҙҙең артабан ниндәй үҫеш перспективаларығыҙ бар? "Һомай" кеүек яңғырашлылары булырмы?**

- Электрон музыка семплдарҙан төҙөлә. Электронщиктар, төрлө билдәле артистарҙың йырҙарының өҙөктәрен алып, шуларҙы бер-береһенә йәбештереп сығалар. Руслан - ғүмере буйы электрон музыка менән шөғөлләнеүсе диджей. Музыкаль банктарҙы тәшкил итеүсе шундай сайттар бар, унда музыка ҡоралдарының, вокалистарҙың өлгөләрен инеп ҡарарға була. Музыкаль банк асыҡ, һәр кем инеп ҡарай һәм ундағы мәғлүмәтте ҡуллана ала. Сайтҡа ингән өсөн абонент түләүе генә бар. Инәһең дә, рәхәтләнеп музыка яҙаһың. Йырҙы тыңлаусы семпл ҡулланғаныңды белмәҫкә лә мөмкин. Был осраҡта музыкант үҙенән көйҙөң мотивын ғына ҡуша. Һәр кемдең үҙ рецепты.

**Яһалма интеллект та йырҙы шул семплдарҙан алып яҙамы?**

- Әлбиттә, техник яҡтан ул йыр яҙа ала, әммә уны йыр тип атап буламы икән? Сөнки яһалма интеллекттың йәне һәм моңо юҡ. Ҡайһы бер кеше йырлай, моңо бар, тик тауышы профессиональ түгел, йәки - киреһенсә. Тап шуның кеүек. Моң һүҙен руссаға тәржемә итеп булмай, тик беҙ уның нимә икәнен беләбеҙ. Салауат батыр быны ябай ғына итеп аңлата:

*Һүҙем бөтһә лә телемдә,*
*Йырым бөтмәне, Уралым, -*

ти. Һәр бер башҡорт халыҡ йырында, тимәк, Аллаһты маҡтау, йәғни зекер ята.

Яһалма интеллект был хәлде бирә алмай. Кеше профессионалмы-юҡмы, әгәр ҙә йөрәге асыҡ икән, Аллаһҡа рәхмәтле булып, ҡыуанып-шатланып, шөкөр итеп йәшәй икән, уның бар эше лә килеп сығасаҡ. Беҙ ҙә ошо хәлдә ижад итергә тырыштыҡ. Урал батыр аша Аллаһ Тәғәлә беҙгә еткергән һүҙҙе һәр кешенең ҡәлебенә етһен тип тырыштыҡ. Һәр кем йәшәү дәрте менән янһын тигән ниәт ҡуйҙыҡ.



*Төрлө илдәрҙә, төрлө телдәрҙә һөйләшеүсе кешеләр беҙҙең "Һомай" йырын сүллектә сарсаған юлсылай ҡабул итте. Йырҙың тексын рус, инглиз, итальян, испан, төрөк, үзбәк, ҡаҙаҡ һ.б. телдәргә тәржемә итеп, титрҙар эшләнек. Башҡортса сыҡҡан йырға интернет аша тәржемәләр һорай башланылар. Үҙ телдәрендәге йырҙың тәржемәһе аша уҡыусылар беҙҙең ижад менән тағы ла нығыраҡ ҡыҙыҡһына башланы. Беҙҙе иң күп тыңлаусылар: Рәсәй (1-се урында), Дания (2-се), Голландия (3-сө). Үҙебеҙ ҙә аптыраныҡ. Шулай уҡ Мексикала ла, Ҡытайҙа ла, Корея ла, Филиппинда ла, Аргентинала ла тыңлайҙар.*

**Йырҙың, моңдоң нисек тыуыуын һүҙҙәр менән аңлатып булмай, уны йөрәк менән генә тойорға мөмкин, тиҙәр. Әле һин һүҙҙәр менән аңлатырға тырыштың. Ошо амплуанан һуң үҙеңдең ниндәй кимәлдә үҫеүеңде тойҙоң? Рухи яҡтан ниндәй үҫеш кисерҙең?**

- Беренсенән, шатлыҡ, ҡыуаныс кисерҙем, әлбиттә. Иҫ белгәндән алып ижад менән йәшәйем бит. Һәр бер артист халҡының, тамашасыһының ҡабул итеүен теләй. Был йәһәттән мин маҡсатыма ниндәйҙер кимәлдә өлгәштем. Икенсе яҡтан ҡараһаң, быға нисек өлгәшәһең бит әле һәм ниәтең ниндәй? Дан алам, аҡса эшләйем, популяр йырсы булам, тигән маҡсат ҡуйһаң, былары донъяуи ғына ҡараш. Ә Урал батырға бәйле ижадҡа донъяуи ҡараш менән генә тотоноп булмай, сөнки унда халҡыбыҙҙың тарихы ята. Киләсәккә тапшырыла торған сикһеҙ ҡиммәтле ҡомартҡы менән эш итеү ҙур яуаплылыҡ талап итә. Шуға күрә шатлыҡ менән бергә яуаплылыҡ та килә. Һәр аҙымыңды үлсәп, уйлап йәшәү бурысы тыуа. Уңға һәм һулға бер миллиметр ҙа китергә ярамағанлығын да аңлайһың әле ул. Хатта магазинға барғанда ла һине танығанда, ҡарап торалар, һынайҙар, шул кимәлдә лә яуаплылыҡ тояһың.

**Һиңә ҡарап, милләтеңә лә баһа бирәләр бит әле ул...**

- Әлбиттә, был халҡың алдында ла яуаплылыҡ.

**Гастролдәрҙә үҙегеҙгә, шулай уҡ халҡыбыҙға ҡарата ниндәй мөнәсәбәт тойҙоғоҙ?**

- Рәсәйҙең 22 ҡалаһында сығыш яһаныҡ. Барыһында ла беҙҙе йылы ҡабул иттеләр, концерттарҙа беҙ быны тойҙоҡ. Калининград менән Архангельскийҙан алып Красноярск менән Краснодарға тиклем йөрөп сыҡтыҡ. "Арғымаҡ" менән йөрөгәндә лә, урында йәшәгән башҡорттарҙан тыш, бүтән милләт вәкилдәре лә килә торғайны. Мексика, Ҡытайҙан алып, Истанбул, Лондон, Парижға тиклем барып еттек, йәғни "Арғымаҡ" менән гастролдә йөрөгәндә тамашасыларҙың иғтибарына лайыҡ булғайныҡ.

Әлеге концерттарҙа маҡсатлы аудитория, беренсенән, юҡ. Калининградта, мәҫәлән, 70-80 йәшлек өлкән йәштәгеләр күп килде. Уларҙың билдәре лә ауыртманы, аяҡтары ла һыҙламаны. Түбәтәйҙәрен кейеп, түшелдеректәрен тағып: "Бер, ике, өс, беҙҙә барлыҡ көс", - тип беҙҙең ыңғайға аяғүрә баҫып ҡысҡырып тәбрикләнеләр. Омскиҙа ҡаҙаҡтар диаспораһы ныҡ ойошҡан. Улар беҙҙе үҙҙәренә саҡырып, ҡунаҡ иттеләр, бергәләп фотоға төштөк. Новосибирскиҙа татарҙарҙың диаспораһы ҡаршы алды. Рәсәй күп милләтле дәүләт, ҡайҙа барһаҡ та, атыбыҙҙы бәйләп, ҡунаҡ итеп, күстәнәстәр биреп оҙатып ҡалалар. Бындай хәл шуны ла аңлата: барыһы ла Урал батыр рухына мохтаж.

**Осрашыуҙар барышында ниндәйҙер бер ҡыҙыҡлы йә хикмәтле ваҡиға булдымы?**

- Әйтергә кәрәк, беҙҙең сығышыбыҙға ҡарата һәр бер илдә, һәр бер ҡалала айырата мөнәсәбәт булды. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, беҙҙе һағынып көтөп торҙолар. Ошо ғына хәл дә күпкә ишара ине: беҙ ҡасандыр килеп, тап ошо составта, тап ошо "Һомай" йыры менән барыбер ҙә донъяны яуларға тейеш булғанбыҙҙыр. Бер ҡыҙыҡлы ғына хәл: 1 августа беҙ - Алмалыҡта, 2 август - Минскиҙа, 3 август Ҡырымда сығыш яһауға өлгәштек. Себер - Беларусь - Ҡырым араһын, шулай итеп, өс көндә үтеп, үтеп кенә түгел, һәр урында ла меңәр тамашасы йыйылған урындарҙа сығыш яһап өлгөрҙөк. Самолеттар үҙ ваҡытында осмаған хәҙерге заманда әлеге лә баяғы хикмәт менән генә өлгөрөп була торған маршрут булды был.

**Нисек уйлайһың, бер-ике йылдан үҙегеҙҙе нисек итеп күрәһегеҙ?**

- Юрий Антонов ҡасандыр: "Иҫке йырҙары насар булғандар ғына яңы йырҙар ижад итә", - тигәйне.

**Тарихыбыҙ ҙа, сәнғәтебеҙ ҙә бай. Беҙҙең тағы ла ниндәй асылмаған мөмкинлектәребеҙ бар, тип уйлайһың?**

- Был эш дөйөм мәғариф системаһына һалынырға тейеш. Әлеге методикалар бик матур, әлбиттә, әммә донъя шул тиклем тиҙ үҙгәрә, беҙҙекеләр көндән-көн һүлпәнерәк эшләй. Сәнғәт училищеһын, институтын тамамлаған кешеләр артабан ни эшләргә белмәй, баҙап ҡала. Шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр ҡайһыһының йондоҙ булғыһы килә. Килеп сыҡмағандары берәй урынға уҡытырға йә оркестрға, бик тә булмаһа, хорға бара. Баштан уҡ: "Мин оркестрҙа уйнаясаҡмын", - тигәндәр һирәгерәктер тип уйлайым. Бәлки: "Мин оркестрҙы ойоштором", - тип башлаусылар ҙа барҙыр, улар икенсе кимәлдәгеләр. Әммә шоу-бизнес менән шөғөлләнергә теләүселәр юҡ иҫәбендә. Нимә генә тимә, шоу-бизнесмы, башҡа төрләһөмө, бизнестан бизнес айырылмай. Уларҙың нюанстары ғына бар. Әммә ошо белем беҙҙең артистарҙа бөтөнләй тиерлек юҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Улар гастролгә сығып, бер нисә район-ҡаланы үтәләр ҙә, шуның менән туҡтап ҡалалар. Ә һәр бер йырҙан аҡса килһен өсөн реклама интеграцияһы мотлаҡ. Беҙгә ошо йүнәлештә белем бирерлек айырым уйланған, алдан ҡаралған уҡыу-уҡытыу системаһы, институт кәрәк.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

*✓ Әгәр ҙә республикала шоу-бизнесты үҫтереү продюсер үҙәге булһа, һәр бер артист беҙҙең республиканы донъя кимәленә күтәргән шәхес була алырлыҡ. Беҙҙә таланттар иҫ киткес күп, тик уларҙы үҫтерә торған продюсерҙар ғына юҡ.*

# ИХЛАС, АСЫҠ ЙӨРӘКЛЕЛӘР...

## Урал батыр һүҙенә сарсап йәшәй

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Әлбиттә, беҙ ғүмер буйы концерт ҡуйып, ҡыйҡандап йөрөмәйәсәкбеҙ бит инде. Сөнки әлеге график менән эшләүе ауырға тура килә, һәр ҡайһыбыҙҙың ғаиләһе, балалары бар. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең туплаған тәжрибәне йәшерәк быуындарға еткереү хаҡында ла уйланырға, беҙҙең тапалған юл менән йәш йондоҙҙарҙы үҫтереү мәктәбе булдырырға тейешбеҙ. Бының өсөн иң тәүҙә "Әй Йола"ны "тутыҡҡан ҡаҙау" менән донъяның башҡа йондоҙҙары араһына ҡағып ҡуйырға кәрәк. Шунан был эште яйлап-яйлап башларға була. Мин был йүнәлештә 2012 йылдан алып эшләйем. "Евразия йөрәге" фестивален Мәҙәниәт министрлығы менән алдан планлаштырып, Торатауҙа, Йөрәктауҙа ойоштороҙоҡ. Аҙаҡтан 2014 йылда "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткәрергә мөмкинлек бирҙеләр. Унда Бүрәтстандан, Ҡаҙағстандан дуҫтарымды саҡырҙым. Шунан һуң артабан был сара Салауат батыр һәйкәле аҫтындағы майҙанға күсеп китте. 2016 йылдан Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының йәштәр бүлеген етәкләнем. Шунда грант алыуға өлгәштек. Ул аҡсаға "Бишбармаҡ", "Дарман", "Зәйнетдин" төркөмдәре, Миләүшә Хәйбуллина һәм балалар ҡатнашлығында сифатлы ете клип эшләнек. Беҙҙән күрмәксе, күршеләребеҙ "100 клип" тигән оран ташланы.

Урал батырға нигеҙләнгән Дисней Ленд формаһындағы этнопарк булдырыу проекты эшләнде. Урал батыр ҡиммәттәренә тура килгән бизнес төрҙәре төҙөү ҙә уға индерелде. Шулай итеп, бөтә республикала "Урал батыр" буйынса эшләргә мөмкинлек тыуҙы.

Шул концепцияны республика кимәленә еткереү маҡсаты менән 2012 йылдан башлап эш алып барам. Был эште дәүләт кимәленә еткереү бик ауыр. Сөнки ҡайҙалыр, кем исеменәлер хат яҙырға, ул хатҡа кемдәндер ҡул ҡуйҙыртырға кәрәк. "Эт - эткә, эт ҡойроҡҡа әйтә" тигән һымаҡ килеп сыға. Хат бер урындан икенсе урынға барып еткәнсе, донъя үҙгәреп тә өлгөрә.

2009 йылда "Арғымаҡ" менән тәүге репетиция яһап, 2011 йылда сәхнәгә сығып, артабан филармония штатында эшләп, 2019 йылда "Арғымаҡ"тың 10 йыллығын билдәләп, артабан пандемияға инеп китеп, бөтә туплаған тәжрибә нигеҙендә "Әй Йола"ға килдек. Мин Мәҙәниәт министрлығына ныҡ рәхмәтлемен, сөнки ошо юлды үткәндә улар миңә грант конкурстарында ҡатнашырға, тәжрибә тупларға мөмкинлек бирҙеләр. Шул уҡ ваҡытта, донъя кимәленә үҫәм тиһәң, тотороҡло һәм системалы алға барыу кәрәк. Продюсер ул бушҡа ғына продюсер түгел, сөнки ул һәр бер аҙымды күҙ уңында тота. Артист - ул ижадсы, ә продюсер уның ижадын һата белгән кеше булырға тейеш. Әгәр ҙә ижадсы үҙе артист, үҙе костюмер, үҙе водитель булһа, уның ижад өсөн ваҡыты ҡалмаясаҡ. Филармонияла, мәҫәлән, эш хаҡы алыр өсөн норманы үтәргә кәрәк. Бынан тыш, рәсми сараларҙа, тантаналарҙа сығыш яһарға тейешһең. Ә ижади яҡтан үҫергә артистың мөмкинлеге бөтөнләй ҡалмай. Айлыҡ эш хаҡын йәшәргә лә, ижади үҫешкә лә еткереү - мөмкин булмаған ғәмәл. Ижадсы ысынлап үҫәм тиһә, дәүләт системаһында ныҡ ауырға төшә. Дәүләттең берәй айырым программаһы эшләһә, ул сағында бигерәк шәп булыр ине. Әммә бындай шарттарҙа үҫкән ижадсы бер көн килеп "ҡаймаҡ ялап туйған бесәй" хәленә ҡалыуы бар. Әҙергә - хәҙер, тип йәшәгән ижадсы, ғөмүмән, үҫештән туҡталмаҫ тимә. Иң ҡурҡынысы - ижадсының номенклатураға әйләнеүе.

**"Айлығым (айлыҡ эш хаҡым) - байлығым, фәҡирлегем - мәңгелегем" тигән мәҡәл дә бар бит әле халыҡта. Тимәк, һин, Ринат, өҫтән кемдеңдер нимәлер әйткәнен көтөп ултырырға яратмайһың инде. Үҙең башлап хәрәкәткә киләһең. Шулаймы?**

- Дөп-дөрөҫ әйттең, Әхмәр ағай. Был - бик ҡатмарлы мәсьәлә, сөнки кемдеңдер әйтеүе буйынса түгел, үҙенең инициативаһы менән ынтылып, янып, ижад иткән саҡта ғына нимәгәлер өлгәшеп булалыр. Ижадсыны күрә белергә һәм уға әҙерәк кенә этәргес көс бирергә кәрәк. Ни өсөн "Арғымаҡ" башҡалар араһында "ала ҡарға" һымаҡ йөрөнө, сөнки мин үҙем һәр саҡ бер кемдән дә көтмәйенсә, алға ынтылып, булған мөмкинлектәр менән генә сикләнмәй, "аяғың тәпелдәмәһә, ауыҙың сәпелдәмәй" тигән принцип менән алға барҙым.

**"Арғымаҡ"тан "оҙайлы каникулға" китеүеңдә мин пандемияны ғына сәбәп итеп күрмәйем...**

- Шоу-бизнес менән ҡәҙимге бизнестың бер ниндәй айырмаһы юҡ, тинем бит әле башта. Шуға күрә, пандемия сәбәп түгел, һылтау ғына булғандыр, тием. Ғөмүмән, һәр бер бизнес ул тәүәккәллек талап итә. Һин бында йә уңаһың, йә туңаһың.

Ошоларҙы иҫәпкә алғанда, ниндәй һығымта яһап була: һәр бер артист - ул потенциал шәхси бренд. Мәҫәлән, донъя кимәлендә популярлыҡ яулаған шоу-бизнес йондоҙо Рианна Фентиҙың косметик тауарҙар етештереү буйынса шәхси компанияһы бар. Ул бушлай сығыш яһай, йырлағанда үҙенең компанияһында эшләнгән пудра менән макияжын рәтләй. Быны бөтә донъя күрә һәм уның компанияһы етештергән косметиканы һатыу 800 процентҡа арта, йәғни бер секунд эсендә компания 12 миллион доллар табыш ала. Бер компания спорт тарихында киң билдәле Америка баскетболсыһы Майкл Джордандың исеме менән футболкалар, бейсболкалар, кроссовкилар етештерә. Уның исеменә бәйле һәр бер тауарҙы һатыуҙан Джорданға 5 проценты түләнә. Киләсәктә уның балалары, ейәнейәнсәрҙәре ошо проценттар иҫәбенә генә йәшәй аласаҡ.

Әгәр ҙә беҙ ошо юҫыҡта уйлап ҡараһаҡ, әгәр ҙә республикала шоу-бизнесты үҫтереү продюсер үҙәге булһа, һәр бер артист беҙҙең республиканы донъя кимәленә күтәргән шәхес була алырлыҡ. Беҙҙә таланттар иҫ киткес күп, тик уларҙы үҫтерә торған продюсерҙар ғына юҡ.

Әгәр ҙә Майкл Джексон сығышы менән Башҡортостандан булһа, белмәйем, нимә булыр ине беҙҙә?

Тейлор Свифт хәҙерге көндә поп музыкала 1-се һанлы феномен булып тора. Берәр илдә оло ваҡиғаға торош сара булһа, йырсы шунда килә. Уның артынан армадаһы менән туристар эйәреп йөрөй. Ниндәйҙер бер илгә уның артынан ике йөҙ мең турист эйәреп килеп, илдәге бөтә аҙыҡ-түлекте ашап бөтөргән. Был илдә яһалма рәүештә аҙыҡ-түлеккә хаҡ артып, инфляция башланған. Шуға күрә теге йәки был ил ошондай хәлгә әҙер булмаһа, уны саҡырмайҙар. Был миҫал менән нимә әйткем килә: әгәр ҙә дәүләт ошондай артистар кимәлендәге продюсер үҙәктәре төҙөй алһа, артист үҙе уның ҡулындағы ҙур инструмент булыуы ла бар.

Беҙҙең беренсе альбом яҙылды, әле икенсе альбом өҫтөндә эшләйбеҙ. Донъя кимәлендә концерттарыбыҙ, гастролдәребеҙ туҡтауһыҙ дауам итә. Бөгөнгө көндә евротур өҫтөндә эшләйбеҙ. Бер туҡтауһыҙ төрлө урындарҙан шылтыратып саҡыралар. Әле Рәсәй турын үттек. Башҡортостанда ҙур фестиваль ойошторорға ниәт иткәнбеҙ. Беҙ башлаған эштәр ейән-ейәнсәрҙәрҙең ейән-ейәнсәрҙәренә етерлек. Эш ныҡ күп, башыбыҙ идеялар менән лыҡа тулған. Уларҙы эшләп бөтөрөргә бер генә ғүмерем етмәҫкә лә мөмкин.

**Мин барыбер ҙә шоу-бизнес менән ысын сәнғәт араһына тигеҙләмә ҡуймаҫ инем. Ни өсөн тигәндә, бөтә артистар ҙа һинең һымаҡ була алмай, шул уҡ ваҡытта шул тиклем оҫта музыканттар, моңдары урғылып торған йырсыларыбыҙ күп. Шоу-бизнеста ысын сәнғәттән башҡа факторҙар ҙа өҫтөнлөк итә түгелме? Шул уҡ ваҡытта шоу-бизнес беренсе урынға аҡса эшләүҙе ҡуя.**

- Сәнғәт менән дә аҡса эшләп була бит. Минеңсә, беҙҙә шуны аңлау юҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Сәнғәтте шундай кимәлгә күтәрергә кәрәк: ул тамашасының рухи ихтыяжын да ҡәнәғәтләндерһен, артабанғы үҫеш өсөн табыш та килтерһен. Шоу-бизнес инструменттары менән кәзәне лә, шул уҡ ваҡытта берәр төпкөл ауылдағы халыҡ талантын да йондоҙ итә алаһың. Бөгөн шундай заманда йәшәйбеҙ: бөтөн кешене лә йондоҙ итеп була.

Беҙ аҫаба халыҡ, һәр яҡтан етеш булып, үҙаллы йәшәргә өйрәнгәнбеҙ. Үҙебеҙсә йәшәйбеҙ, шуға күрә беҙгә һығылмалылыҡ етешмәй. Әгәр ҙә башҡалар кеүек, уңыш килтерә торған төрлө алымдарға өйрәнеп йәшәй башламаһаҡ, ауырға тура килеүе бар. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе шундай сифатыбыҙ һаҡлап та килә. Йәғни "эт саба тип бет саба" тигәнде белмәйбеҙ. Беҙ шуға ла барбыҙ. Шуға ла беҙҙең Башҡортостан Республикабыҙ бар. Шуға ла беҙҙең батырҙарыбыҙ бар. Шуға ла Салауат Юлаевыбыҙ, уның исемендәге ҡала, район, проспект, һәйкәл, хоккей командаһы, уның исемендәге премия, парк, бизнес үҙәге бар.

*Беҙ аҫаба халыҡ, һәр яҡтан етеш булып, үҙаллы йәшәргә өйрәнгәнбеҙ. Үҙебеҙсә йәшәйбеҙ, шуға күрә беҙгә һығылмалылыҡ етешмәй. Әгәр ҙә башҡалар кеүек, уңыш килтерә торған төрлө алымдарға өйрәнеп йәшәй башламаһаҡ, ауырға тура килеүе бар. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе шундай сифатыбыҙ һаҡлап та килә. Йәғни "эт саба тип бет саба" тигәнде белмәйбеҙ. Беҙ шуға ла барбыҙ. Шуға ла беҙҙең Башҡортостан Республикабыҙ бар. Шуға ла беҙҙең батырҙарыбыҙ бар. Шуға ла Салауат Юлаевыбыҙ, уның исемендәге ҡала, район, проспект, һәйкәл, хоккей командаһы, уның исемендәге премия, парк, бизнес үҙәге бар.*

Шул уҡ ваҡытта шул сифатыбыҙҙы һаҡлап та, заман ҡайҙа барһа, шул мөмкинлектәрҙе ҡулланып, үҙебеҙгә файҙа ла алырға бурыслыбыҙ. Айкидола бар ул алым, йәғни ҡаршы яҡтың көсөн үҙенә ҡаршы йүнәлтеү. Ә беҙ иһә көрәшергә, һуғышырға өйрәнгәнбеҙ. Беҙгә көслө баҫым бара, үҙебеҙгә барған ҡаршы һөжүмдән һаҡланабыҙ. Шуның арҡаһында ла барбыҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең өйрәнгән ғәҙәткә яңы алымдар индерһәк, алға китер инек. Бөгөн ата-әсәләр, гаджеттарҙа, телефондарҙа ултырған балаларына зарланып, туған телебеҙҙә һөйләшмәүенә зарлана. Туған телебеҙҙә һөйләшмәгән балалар менән көрәшергә, уларға телде көсләп тағырға ярамай. Ә ҡытайҙар нимә эшләне? Улар үҙҙәренең персонаждары нигеҙендә ҡушымталарҙа ҡытай телендә төрлө уйындар сығарҙы. Быны беҙ ҙә эшләй алабыҙ. Йәнһүрәттәрҙе, клиптарҙы, комикстарҙы, парктарҙы, аттракциондарҙы башҡортлаштырып була бит. Бында бер ниндәй ҙә көрәш кәрәкмәй. Бындай мөмкинлекте әлегә етди рәүештә файҙаланғаныбыҙ ғына юҡ. Технология йәһәтенән беҙ күптән еңелгәнбеҙ, шуға беҙ бар донъяны яулаған ошо ағымды үҙ файҙабыҙға ҡуллана ғына алабыҙ.

"Арғымаҡ" менән сығыш яһағанда бер мәл беҙҙе халыҡ йырҙарын, ижади гәүһәрҙәребеҙҙе боҙоп башҡарыуҙа ғәйепләй башланылар. Бер мәл мин үҙем дә төшөнкөлөккә бирелеп алдым. Шул саҡта остазым Салауат ағай Килдин: "Һин уны боҙмайһың, ә йәштәрҙе халыҡ ижадына йәлеп итер өсөн ҡапҡалар ғына эшләйһең", - тип тынысландырҙы. Хәҙер уның хаҡлығына тулыһынса ышандым. Сөнки йәштәр халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһынып, тәүсығанаҡты эҙләй башлай. "Әй Йола" менән "Һомай" йырын башҡарғандан һуң магазиндарҙа "Урал батыр" эпосы китаптары тиҙ генә һатылып бөттө. Әле булһын йәштәребеҙ йүгереп йөрөп шул китапты эҙләй. Тимәк, беҙ маҡсатыбыҙға өлгәштек булып сыға. Шул уҡ ваҡытта беҙ эпостың тексы буйынса ғына эш итмәнек, икенсе һүҙ менән әйткәндә, беҙ "Урал батыр" эпосына реклама ғына яһаныҡ. Тимәк, был алым бик уңышлы эшләй. Кеше нимә генә уйламаһын, минең ниәтем шулай ине: Халҡым! Телем! Ерем! Илем! Киләсәгем! Балаларым! Балаларымдың балалары! Балаларымдың балаларының балалары!

Хоҙай Тәғәлә беҙҙе башҡорт итеп бар иткән икән, беҙгә ошо халыҡты һаҡлап ҡалыу бурысын да йөкмәткән. Аллаһ Тәғәләгә тоғролоғобоҙ ҙа халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалыуға тиң буласаҡ! Мин бик-бик теләһәм дә, Африка кешеһе була алмаҫ инем. Нисек кенә теләһәм дә, Ҡытай кешеһе була алмайым!

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, беҙ заман биргән мөмкинлектәрҙе дөрөҫ итеп һәм үҙ мәлендә ҡулланһаҡ, стадиондарҙы ла йыясаҡбыҙ, филармонияның ысын сәнғәт концерттарына ла халыҡты йыя аласаҡбыҙ. Шулай уҡ филармонияның традицион артистарының концертына, "Әй Йола" сығышын тамамлаһа ла, халыҡ эркелеп киләсәк. Беҙҙең сығыштан алда ысын сәнғәт өлгөләре яңғыраясаҡ. Был ябай ғына инструмент.

**Фәһемле һәм ҡыҙыҡлы әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Ринат туғаным! Һәр ваҡыт шулай рәхмәтле булып йәшәгеҙ! Аллаһ Тәғәләнең хозурына вә шәфәғәтенә өлгәшегеҙ! Ижади уңыштар һеҙгә!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Айыуҙы ла бейетеп була, тиҙәр. Булалыр, ниңә булмаһын. Оҫта булыр өсөн бер процент һәләткә 99 процент тырышлыҡ һалыу етә, тигән фекер бар. Бала ихлас тырышһа, теләге көслө булһа, ул ҙур уңыштарға өлгәшә ала.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЕРҘЕҢ ҠОЯШЛЫ ЯҒЫНДАЛАР



**Концерт-маҙарҙарҙа бейеү ансамблдәренең сығышын тамашасылар дәррәү алҡыштарға күмә. Сәбәбе ябай: бейеү коллективының дәрте, бейеү рухы арбай уларҙы. Ә бит шундай ансамблдә тәрбиәләргә лә көс кәрәк. Ошо хаҡта һәм бейеү серҙәрен аңлау тураһында 3-сө Сибай полилингваль күп профилле гимназия-интернатының "Салтанат" өлгөлө халыҡ бейеү ансамбле етәксеһе Фәнүзә МӨХӘМӘТЙӘНОВА менән һөйләштек:**

### Бейеүгә әүәҫтәр

Сибайҙы электән, бейеүселәр ҡалаһы, тип йөрөтәләр. Мин дә һөнәрем буйынса хореограф, оҙаҡ йылдар ҡала мәҙәниәт һарайында эшләнем. Бейеү сәнғәтен яратҡас, балаларға ла бейеү серҙәрен өйрәтергә тигән ҙур теләгем була торғайны. Ул ваҡыттағы Сибай гимназия-интернаты директоры Кинйәғол Хәйбулла улы Ғайсинға ниәтемде еткерҙем. Ул уйымды ихлас ҡабул итте, шулай итеп, төрлө райондарҙан йыйылған ауыл балалары уҡыған интернат-мәктәптә бейеү түңәрәге ойоштороҙом. Был башланғыс үҙем өсөн дә, күҙҙәре балҡып янып торған балалар өсөн дә бик тә оҡшап ҡалды. Улар шул тиклем бейеүгә әүәҫтәр, килеүемде ишек төбөндә көтөп торалар, бейеү бөттө ниһә, мине ебәрмәйҙәр, һаман да бейегеләре килеп тора. Хәҙерге балалар менән сағыштырам да, айырма бик ҙур булған, тип һығымта яһайым.

### Исем ҡушыу

Интернат-мәктәптең статусы үҙгәреп, уҡыу йорто яңы урынға күскәс тә, башлаған эшемде дауам иттем. Яңы мәктәптә түңәрәккә исем ҡушыу кәрәклеген аңланым, сөнки элек ундай йола булмай торғайны. Бәхтиһәң, 15 йыл дауамында тик бейеү түңәрәге генә булып йөрөгәнбеҙ, уйлап ҡараһаң, беҙ күптән ул кимәлдән үткәнбеҙ. 2010 йылда бейеүгә йөҙҙән ашыу бала килде. Кемдәр тырыш, кемдең бейеүгә оҫталығы күберәк икәнен ҡарап, күҙәтеп йөрөп, байрам сараларында, төрлө бейеү конкурстарында ҡатнашыу өсөн бейеү ансамбле төҙөргә булдым. Исем ҡушыу тураһындағы уйымды мәктәп директоры Роза Хаммат ҡыҙы Бикбоваға еткерҙем. Ниндәй варианттарығыҙ бар, яҙып алып килегеҙ, тип, ул һис һүҙһеҙ риза булды. Күңелемә яткан исемдәрҙе яҙып, балалар менән кәңәшләшеп, улар тәҡдим иткән исемдәрҙе өҫтәп, директорға күрһәттем. Ниндәйҙер бер әҙәби әҫәргә ҡолаҡҡа ятышлы "тылсымлы, ҡеҙрәтле" мәғәнәһендәге Салтанат исеме күңелемә уйылып ҡалғайны, шуға исемлеккә иң тәүҙә шуны теркәгәйнем. Роза Хаммат ҡыҙы исемлекте ҡарап сыҡты ла, нәҡ шул атамаға туҡталды. Ысынлап та, ят исем, бер ансамблдә лә ундай юҡ. "Салтанат"ҡа балалар ҙа ҡушҡуллап риза булды.

### Бейеүсе булып тыумайҙар

Бейеүселәрҙе һайлағанда иң тәүҙә баланың ихлас теләгенә иғтибар итәм, әлбиттә, буй-һыны, тышҡы ҡиәфәте лә мөһим. Ҡайсаҡ эске тойом менән ҡыҙҙарҙың ҡайһы берҙәрен үҙем саҡырам. Бөтөнләй бейей белмәгәндәр ҙә яйлап-яйлап өйрәнеп, матур ғына бейей башлайҙар. Егеттәрҙе һайлағанда ҡыйынлыҡтар була, сөнки улар бейеүгә артыҡ ылыға һалып бармайҙар. Бәләкәйерәк саҡтарында ҡыҙыҡһынып йөрөйҙәр ҙә, 9-сы класҡа етһәләр, һүлпәнәйәләр, ситкә тайпыла башлайҙар, күбеһе спортҡа өҫтөнлөк бирә. Шулай булһа ла, егеттәрҙе тотороға тырышам, улар беҙҙә бар, ансамблдә һигеҙ пар гел һаҡланып килә. Иң күңелһеҙе шул: сығарылыш класына еткәс, беҙ улар менән хушлашабыҙ, бәләкәйҙәрҙән яңы төркөм төҙөйбөҙ, был күсегелешлек йыл һайын ҡабатлана. Әле көрсөк мәле кисерәбеҙ, былтыр 9-сы, 11-се кластарҙа уҡыған егеттәр-ҡыҙҙарыбыҙҙың яртыһы мәктәпте тамамлап китте. Хәҙер шуларҙың артынан эйәреп килгән балалар менән шөғөлләнәбеҙ, ансамблгә ҡушабыҙ. 5-се кластарҙы мин әҙерлек төркөмө тип атайым, улар ябай күнекмәләр яһайҙар, кәүҙәләрен матур итеп тура тотоп атларға өйрәнәләр, шунан яйлап иң енел бейеүҙәрҙе өйрәнә башлайҙар. Урта төркөмдәгеләр ҡатмарлыраҡ хәрәкәттәрҙе өйрәнәләр, улар менән былтыр декабрҙә Өфөгә конкурсҡа барып, беренсе урын алып ҡайттыҡ. Төп төркөмдә, әлбиттә, өлкән класс уҡыусылары шөғөлләнә, ҡатнашып бейегән осраҡтар ҙа була. Былтыр 10 апрелдә ансамблдең 25 йыллыҡ юбилей концертында 60 бала бергә сығып бейене.

### Улар ҙа беҙҙе тәрбиәләй

Айыуҙы ла бейетеп була, тиҙәр. Булалыр, ниңә булмаһын. Хатта ошо әйтемгә оҡшаш бер миҫал килтерә алам. Оҫта булыр өсөн бер процент һәләткә 99 процент тырышлыҡ һалыу етә, тигән фекер бар. Бала ихлас тырышһа, теләге көслө булһа, ул ҙур уңыштарға өлгәшә ала, тип, беҙҙең мәктәптә булған хәлде балаларға гел һөйләйем. Бейеү түңәрәгенә яҙылған бер егетебеҙ көйҙә лә ишетмәй, ритмды ла тота алмай ине. Етмәһә, аяҡтары ла әҙерәк кәкере, арҡаһы көмөрө, бейеүсегә бөтөнләй бармай. Тик бейеүсе булыу теләге көслө икәне күренеп тора. Балаларға ҡаршы барыу гүҙәтем юҡ, "Һин түңәрәккә йөрөмә", - тип әйтә алмайым, баланың күңелен ҡыймайһың бит инде. Башҡаларға эйәреп, бергә шөғөлләнә, тик арҡыры баҫа. Әйҙә, йөрөһөн, үҙе китер әле, тип уйлайым, сөнки ҡайһы бер балалар үҙ хәлен аңлап, бейеүҙе ташлайҙар. Ә был нығышмалы күренә, үҙенсә тирләпбешеп тырышып йөрөп тик ята. Бер йыл йөрөнө, ике йыл, өс йыл булып китте. Тап булған һайын, тура йөрө, тип, гел уның арҡаһына һуға торғайным. Шунан был яйлап-яйлап турайып килә, турайып килә, хәрәкәттәре лә матурая бара. Шулай булһа ла, уны коллектив бейеүгә ҡуймайым, ситтә генә йөрөй, ә үҙе бейеү хәрәкәттәрен белә. Мәктәп кимәлендә үткән концертта бер егетебеҙ ауырып китте. Фидан, әйҙә, тороп ҡара әле коллектив бейеүгә, тим. Был шатланып риза булды. Ҡараһам, был бейеүҙе башынан аҙағына тиклем ҡәҙимге белә, тик көйгә әҙерәк кенә арҡырыраҡ баҫҡан һымаҡ. Ярай, мәктәп эсендәге бейеүгә бара, тип уйлайым. Етмәһә, һигеҙ парҙы етәүгә ҡалдырғы ла килмәй, сөнки балалар буташа башлайҙар, парһыҙ ҡалған ҡыҙ өсөн дә борсолам, уның да бейегеһе килә бит. Шунда уның шатланғанын күрһәгеҙ! Сәхнәгә сығып бейеүенә ҡыуанып, күҙҙәре янып тора. Шунан һуң уны яйлап-яйлап коллектив бейеүҙәргә ҡуя башланым. Күрәм, был тырыша, гел ваҡытында йөрөй, бер дәресте лә ҡалдырмай. Шулай йөрөй торғас, ул тамам бейергә өйрәнеп алды. Бәхтиһәң, нығышмал шөғөлләнһәң, тырышһаң, кеше үҫешә, көй ҙә ишетелә башлай, ритм да яйға һалына икән, һыу аҫтында бейегән дельфиндар кеүек. Тәбиғәттән бирелмәһә, бирелмәй, тип әйтһәләр ҙә, тырышлыҡ булғанда һәләт барлыҡҡа килә икән - мин шуны аңланым. Тәжрибә тигән нәмә шулай булалыр. Элек ундайҙар тураһында, ҡолағына айыу баҫҡан, унан бер нәмә лә сыҡмай, тип уйлай торғайным. Аҙаҡтан Фидан беҙҙең менән әллә күпме конкурстарҙа ҡатнашты - Ҡурғанға ла, Магнитогорскийға ла барҙыҡ, Өфөләрҙә лә йөрөнөк. Мин уны башҡаларға үрнәк итеп ҡуя башланым, сөнки ул оҫта итеп бейергә өйрәнеүҙән тыш, кәүҙәһе лә турайҙы.

(Дауамы 16-сы биттә).

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# БҮРЕ ҺӘМ ӘРӘМТАМАҠ ТӨЛКӨ



Урманда ике дуҫ йәшәгән - һоро бүре һәм ҡыҙғылт ҡуңыр төҫтәге ерән төлкө. Икеһе ике төрлө холоҡло булһа ла, айырылмаҫ дуҫтар булған, ти улар. Бүре - көслө, ҡурҡыу белмәҫ ҡыйыу һунарсы булып танылған. Бер үҙе ҡоралай, ҡыр сусҡаһына һунар итә алған. Ҡайһы саҡта яҡын-тирәләге ауылдарҙан кәзә, йә һарыҡты ла һөйрәп килтергән. Ә төлкө инде сысҡан һәм ҡуяндарҙы ғына тота алған. Һуйыр һәм ағуналарҙың ояларын туҙҙырған, йәки ауылдарға барып әтәс-тауыҡтарҙы кетәктән урлаған.

Бүре - хәйләһеҙ, бер ҡатлы һәм йомарт булған. Һунарҙан тапҡанынан үҙенә етәрлек кенә өлөштө алып ҡала ла, ҡалғанын бүре туғандарына һәм төлкө дуҫына биргән. Төлкө был дуҫлыҡты бик ҡәҙерләгән һәм һаҡларға тырышҡан. Ул бүрегә үҙенең эскерһеҙлеген һәм тоғро булыуын ышандырыр өсөн, тота алһа, ҡайһы саҡта сысҡан һәм ҡуяндары менән бүлешкән.

Төлкө - төлкө түгел инде, бар ҡыланыштары ла гәҙел булһа! Уның бүлешеүендә лә хәйлә бар ине: "Мин уны сысҡан, ҡуян менән һыйлаһам, ул тотҡан ҡоралайы менән бүлешәсәк! Әгәр мин тотҡан ағуна менән уртаҡлашһам, ул һарыҡ боғаҙлап килтерәсәк... Был дуҫлыҡты миңә һаҡлар кәрәк! Бүре - минең өсөн бик уңайлы һәм ҡиммәтле дуҫ", - тип фекерләгән мәкерле төлкө. Хәйләкәр төлкө бүрене бәләкәй генә сысҡан менән һыйлағанда ла бүре ысын күңелдән шатланған: "Һеңлекәш! Һин һәр саҡ мине ҡайғыртаһың! Нимәң бар - барыһын да миңә бирергә әҙерһең! Шундай дуҫың булыуы ниндәй бәхет!"

Хәйләкәр, мут ерәнкәй, ысын күңелдән бирелгәнлеген, тоғролоғон күҙҙәрендә сағылдырырға тырышып, бүрегә мөлдөрәп ҡарай, ә үҙе эстән генә мыҫҡыл итеп көлә: "Һин һунар итерһең, мин ашармын. Һин ҡоралайҙар артынан хәлдән тайғансы сабырһың, ә мин уларҙы тотоп алып килеүеңде тынныс ҡына көтөрмөн... " Ошолай итеп, айҙар артынан айҙар үтә. Йәҙҙы йәй алмаштыра, көҙ артынан ҡыш килә. Бүре ашарға таба, ә хәйләкәр төлкө көндәр буйы йомшаҡ яҫтыҡ-түшәктәрҙә аунап ял итә, үҙенең матур тунын таҙарта, үҙе кеүек эшһеҙлектән нимә эшләргә белмәгән ерән әхирәттәре менән сәғәттәр буйы урман яңылыҡтарын һәр яҡлап тикшереп, гәпләшәләр.

Арҡанды күпме ишһәң дә осо була, тигәндәй... Ҡыштың һыуыҡ бер көнөндә бүре, гәҙәттәгесә, һунарға сыға. Ул болан эҙҙәренә юлыға. Тәрән көрттә йырып, хәлдән тайғансы, уларҙы оҙаҡ ҡына эҙәрләклә. Ниһайәт, бүре боландарҙы табып ала. Улар уны тиҙ генә һиҙеп ҡалалар. Көтөүҙең иң көслө, иң ҙур боланы - көтөүҙең башлығы, башҡаларҙы ҡурсалап һаҡҡа баҫа. Үҙенең тарбаҡланып торған ҙур, мөһабәт мөгөҙҙәрен бүрегә тоҫҡап һөжүмгә күсә. Алыш оҙаҡ бармай. Болан мөгөҙө менән бүрене һөҙә. Ә бүре, уның муйынына йәбешер өсөн, боланға һикерә, ләкин болан да юғалып ҡалмай, көслө тояҡтары менән уның башына тибә. Бүренең күҙ алдары ҡараңғыланып китә һәм ул иҫһеҙ йығыла. Иҫенә килгәндә, энер төшә башлаған була. Бүре ятҡан тирә-йүндәге ҡар, уның ауыр яраларынан һарҡҡан ҡандан ҡып-ҡыҙылға әйләнгән. Бөтә тәне һыҙлай ине бүренең. Торорға маташып ҡараһа ла, тора алмай интегә, үҙенең өңөнә саҡ шыуышып барып ауа ул.

Төлкө бүрене көнө буйы көтөп ала алмағас, уның өңөнә табан юллана. "Әй! Бүре дуҫ! Мин бөгөн урманды көнө буйы ҡыҙырып сыҡтым. Исмаһам, бер ҡуян да, хатта сысҡан да тота алманым! Аслыҡтан һәм ныҡ арыуымдан саҡ аяҡтарымда баҫып торам! Ә һин бөгөн, моғайын, һунарға сыҡҡанһыңдыр? Үҙең тиҡ булғас, минең турала онотточ инде! Дуҫтар улай ҡыланмай! Мин һәр саҡ һинең менән табышымды бүлешә инем!.."- тип йәлләтеп һөйләнә бүренең өңөнә яҡынлашҡас. Өңгә яҡын килгәс, ул бүренең ҡаты яраланғанын, ауыр итеп тын ала-ала, ут кеүек янған тәнен һыуытыр өсөн ҡар ашағанын күрә. Эйе, хәҙер ул оҙаҡ ҡына һунарға сыға алмаясаҡ! Уның үҙенә хәстәрлек, тәрбиә кәрәк... Ике йөҙлө төлкө уға ярҙам итеү тураһында уйламай ҙа хатта. Бынан һуң бүренән файҙа булмаясағын аңлай. Һәм шунда уҡ үҙенә башҡа көслө дуҫ эҙләргә сығып та йүгерә.

Бүре ауыр яраларынан ялай-ялай үкенеп уйлай: "Нисек итеп мин ошо хәйләкәр, мут төлкөнөң алдаҡсы һүҙҙәренә ышандым икән?" Әгәр был хәл булмаһа, бүре оҙаҡ ҡына төлкөнөң ысын йөҙөн һәм дөрөҫлөктө белмәҫ ине. Юҡҡа әйтмәйҙәр бит: "Дуҫтар ауыр саҡта, бәлә килгәндә беленә!" - тип.

"Кеше яҡын дуҫы тотҡан дингдә тота, шунын өсөн кем менән дуҫ булыуыңа иғтибар ит!" - тиелә хәҙистәрҙә.

ИНТЕРНЕТТАН



# ДАРЫУЫҢ НИНДӘЙ ТӨҪТӘ?

■ Теге йәки был ауырыуҙан үҙ белдеге менән дарыу һайлағанда кеше иң тәүҙә препараттың төҫөнә һәм исеменә иғтибар итә икән. Һиндостан ғалимдары әйтеүенсә, кешеләр бигерәк тә ҡыҙыл һәм алһыу таблеткаларҙы һатып алырға тырыша. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 14 проценты алһыу таблеткаларҙы ҡыҙылдарына ҡарағанда татлыраҡ, тип тапҡан. Һары төҫтәге дарыуҙар - тоҙло, ә ҡыҙғылт һарылары әсерәк тойолған.

■ Көлөү - ғүмерҙе оҙайтып ҡына ҡалмай, ауыртыуҙы ла баҫа икән. Ғалимдар асыҡлауынса, кеше көлгәндә эндорфиндар - тәҙәләшә буйынса опитаттарға оҡшаған үҙенсәлекле химик берләшмәләр бүленеп сыға. Был матдәләрҙе икенсе төрлө "шатлыҡ гормоны" тип тә йөрөтәләр. Физик күнекмәләр мәлендә лә ошо уҡ яҡшы кәйеф гормондары бүленә.

■ Ауыртыу - организм өсөн ауыр көсөргәнеш, шуға ла көлөү ауыртыу синдромы мәлендә алыштырғыһыҙ арҙамсы булып сыға. Оксфорд университеты ғалимдары билдәләүенсә, көлөү эндорфиндар бүленеп сығыуҙы әүҙемләштереп, ауырыуҙы баҫа ала. Тик бының өсөн көлөү ихлас булырға тейеш. Тикшенереүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бер төркөмөнә - комедиялар, икенсеһенә йәнлектәр, тәбиғәт, хаҡындағы фәнни фильмдар, гольф уйыны буйынса инструкциялар күрһәткәндәр. Кемдәр комедия ҡараған, улар ауыртыуҙы бөтөнләй тиерлек тоймаған. Шуға ла көлөү - ауыртыуҙы баҫа торған тәбиғи сара, ти ғалимдар.

■ Кешенең тән массаһы индексына физик әүҙемлек, ҡулланылған калориялар иҫәбе кеүек факторҙарҙан тыш, уның диңгеҙ кимәленән ниндәй бейеклектә йәшәүе лә йоғонто яһай. Был күрһәткес ни тиклем юғары, кешенең артыҡ ауырлыҡ йыйыу хәүефе лә түбәнерәк. Ғалимдар Колорадо штатында йәшәүсе 400 мең кешене тикшергәндән һуң шундай һығымтаға килгән. Улар билдәләүенсә, был феномендың сәбәбе булып кешенең буйы, аппетиты, тәүлегенә нисә калорий яндырыуы өсөн яуап биреүсе гормон тора.

■ Фунготерапия - медицинаның бәшмәктәрҙең дауалау үҙенсәлектәрен һәм уларҙың ауырыу кешегә нисек тәьҫир итеүен өйрәнеүсе йүнәлеше шулай атала. Был атама латин һүҙенән килеп сыҡҡан һәм "бәшмәк" тип тәржемә ителә. Бәшмәктәр ярҙамында ауырыуҙарҙы борондан дауалайҙар. Хатта билдәле дауалаусы Ву Син тәҙәгән махсус трактат та бар. Ул унда Япония менән Ҡытай территорияһында үҫкән бәшмәк төрҙәрен һүрәтләй. Ву Син фекеренсә, бәшмәктәр үләндәргә ҡарағанда ла шифалыраҡ. Мәҫәлән, шиитаке тигән бәшмәкте ул "бәшмәк женщины" тип атай. Медицина белгестәре фекеренсә, был бәшмәк яман шешә лә дауалай. Бәшмәктәр хәтерҙе нығыта, уларҙа фосфор, нервы системаһын нығытыусы В төркөмө витаминдары күп.

■ Күпме генә күнекмәләр яһама, мускулдарҙы йәш килеш һаҡлап булмай, тип белдерә Лафборо университеты профессоры Джэми Тиммонс. Уның фекере буйынса, даими күнекмәләр кешегә мускулдарҙың көсһөҙләнеү процесын туҡтатырға мөмкинлек бирмәй, сөнки бының сәбәбе физик әүҙемлек етешмәүҙә түгел. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 25 процентына физик күнекмәләр бөтөнләй тәьҫир итмәүе асыҡланған. Ғалим әйтеүенсә, ҡайһы берәүҙәргә күберәк йоҡлау һәм дөрөҫ туҡланып, артыҡ калориялар йыймау мускулдарҙы формала тотоуҙың иң яҡшы һәм дөрөҫ юлы булып ҡала.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ҒӘМӘЛ

# ГИПНОЗ: ФАНТАЗИЯМЫ, ӘЛЛӘ ЫСЫНБАРЛЫҠМЫ?



## Сирлеләрҙе дауалап та була

Гипнотерапия менән даими шөғөлләнмәнем, сөнки бының өсөн мотлаҡ медицина белеме кәрәк тигән фекерҙә ҡалдым. Шулай ҙа ҡайһы бер осраҡтарҙа психоген тайпылыштары булған балаларға ярҙамым тейҙе. Башланғыс кластар факультетының ситтән тороп уҡыу бүлегендә лекциялар һәм семинарҙар төштән һуңғы ваҡытҡа ҡуйылды. Шулай бер көндә, ҡыҫҡа табан, беҙҙең уҡытыусылар бүлмәһенә оло ғына йәштәге студентка килеп инде. Ул, педучилище тамамлағас, Белорет ҡалаһының бер мәктәбендә башланғыс кластарҙа уҡыта. Ул минә ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Эш бына нисек булған. Уның 6 йәштәге ҡыҙына урамда бер усал эт ташланған, ә ҡыҙыҡай абынып йығылған сағында күҙенә ҡоро ботаҡ ҡаҙала. Уның күҙен операция эшләп ҡотҡара алмайҙар, ҡыҙсыҡ бер күҙенән яҙа. Уның әсәһенең һөйләүенсә, ҡыҙ шунан һуң сирләй башлай, аппетиты юғала, нык ябыға, дуҫ ҡыҙҙары булмай, ул, башлыса, бер

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ХӘҘРӘТ БУЛЫУЫ ЕҢЕЛМЕ?



Урам буйлап һәлмәк кенә атлап барған ир ҡапылдан аҙымдарын яйлата төштө. Ә шулай ҙа туҡтаманы. Бер аҙ башын бора биреп, алыҫтан ишетелгән тонОҡ, әммә моңло тауышты тыңлай-тыңлай атлауын дауам итте. Ҡайҙан килә был тауыш? Кем ҡысҡыра? Әллә берәй нәмә булдымы? Атлай биргәс, ул нишләптер мәсет яғына күҙ һалды. Шунан, "Эй, мулла ҡысҡыра икән", тип еңел һулап ҡуйҙы. Ысынлап та, был мәлдә мәсет манараһынан (дөрөҫөрәге, тауыш көсәйткестән) аҙан тауышы яңғырай ине. Әммә теге ир мәсет яғына боролманы. Нишләптер, уның күңелендә Аллаһ йортона инеп, намаҙ башҡарыу ниәте тыуманы. Ул һәлмәк кенә баҫып, мәсет эргәһенән үтеп китте.

Аҙан әйтеп бөткән имам-хатиб өйрәнгән ғәҙәте буйынса тәҙрә яғына күҙ һалды. Кем белә, бәлки ошо мәлдә кемдер мәсеткә ашығып килә яталыр. Әммә уның өмөтө аҡланманы. Ул мәсет эргәһенән үтеп киткән әлеге иргә, урам буйлап ҡайҙалыр ашығып атлап барыусы йәштәргә, машиналары эргәһендә һөйләшеп торған икәүгә, ҡапҡаһы эргәһендә баҫып торған берәүгә ҡарап, доға ҡылып ҡуйҙы.

- Йә Раббым Аллаһ, иман бир кешеләргә, уларҙы тура юлға баҫтыр, уларға ишектәрен ҡайғы-хәсрәт шаҡығанда түгел, ошондай еңеллек мәлендә мәсеткә килергә сәбәбен әйлә. Һәр берегеҙгә изге эштәр ҡылып йәшәргә насип ит.

Шайтан ғына өмөтһөҙ, тигәндәй, ул тағы бер тапҡыр ишек яғына күҙ һалды ла намаҙ уҡырға тотондо. Яңғыҙы ғына.

Аңлағанһығыҙҙыр, мәҡәләмдең төп геройы - имам-хатиб. Әйткәндәй, бөгөн күптәр уны ла (мәсеттең төп хужаһын), мәзинде лә (аҙан әйтеүсе була ул), хатта намаҙға баҫҡан ауылдашын да мулла тип әйтә лә ҡуя. Миңә ҡалһа, имам-хатибҡа мулла тип түгел, ә хәҙрәт тип өндәшергә кәрәктер. Бер яҡтан, исеме есеменә тап килә. Икенсенән, әйтелеше матур. Хәҙрәт тип әйтеү менән генә күңелдә ниндәйҙер йылы тойғолар уянып китә. Ә мулла тиһәң... Шулай шул, матур тойғолар уятмай был исем. Хәтерләйбеҙ, заманында мулла китапта ла, кинола ла гел кире яҡтан күрһәтелде. Шуға беҙҙең быуын әнәп етмәйҙер уны. Ә хәҙрәт исеме ысынлап матур. Ә хәҙрәт булыуы еңел микән? Бына ошондай һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ. Һорау ябай, әммә яуап та ябай, тип яуаплар инем мин. Ҡыйын, хатта бик ҡыйын хәҙрәткә бөгөн. Был эште һәр кем түгел, ә бары тик иманы нык булғандар ғына күтәрә алалыр. Әле әйткән һүҙҙәремде тормош миҫалдарында иҫбатлап ҡарайым әле.

Алыҫҡа китмәй генә аҙан тауышынан башлап ебәрәйек әле был һөйләшеүҙе. Күптәр минең менән ризалашыр. Бына әлеге мәлдә, ашығыҙ намаҙға, ашығыҙ уңышҡа, тип мәсеткә саҡырып, аҙан әйтеп торған хәҙрәттең тауышы күптәргә оҡшамай.

- Һуҙып әйтә! Моңо юк! Бигерәк ҡыҫҡа әйтте! Намаҙ ваҡыты үтте, ә ул яңы ҡысҡырып тора! (Бәйләнәм тиһәң, сәбәбен табырға була).

Әммә шуны оноторға ярамай, хәҙрәт бит йырсы йә артис түгел! Уның ниәте - кешеләрҙе намаҙға саҡырыу. Әммә нишләптер намаҙға килгәндәрҙең ҡайһы берәүҙәренә хәҙрәт һөйләгән вәғәз (дин ҡағиҙәләрен аңлатыу, кешеләрҙе яҡшылыҡҡа өндәү) оҡшамай.

- Ҡайҙа дәлил? (Былары хәҙрәт һөйләгәндең һәр һүҙен шиккә ала).

- Әхирәт тураһында күпме һөйләргә була (Был әхирәткә күсеүҙән әҙ-мәҙ ҡурҡа).

- Һөйләгәне ҡыҙыҡ түгел (Ындайҙар вәғәз ваҡытында телефонда ултыра).

Уңайы сыҡҡанда шуны ла әйтеп ҡуйыйым әле - хәҙрәт тәҙәүсе лә түгел. Бер мәл бер хәҙрәт ошолай һөйләп "көлдөрөп" алғайны.

- Мәсет эргәһенә ыҡсым ғына итеп утынлыҡ эшләп ҡуйҙым. Улым менән аҙнаун көн эсендә тамамланыҡ уны. Үҙ эшемә үҙем һоҡланып ҡарап торһам, эргәмә берәү килеп баҫты. Әммә минең ҡыуаныcты уртаҡлашманы. Хатта минә үҙ үпкәһен белдереп ҡуйҙы.

- Һин был утынлыҡты әллә ҡасан уҡ эшләп ҡуйырға тейеш инең!

Аптырауҙан ауыҙ асылды ла ҡуйҙы. Ә нишләп мин тейеш икән? Кем минә йөк-

✓ *Борон дингә оло хеҙмәт итеп, оло хөрмәткә лайыҡ булған дин әһелдәрен ололап хәҙрәт тип йөрөткәндәр. Минең уйымса, бөгөн бындай мәртәбәле исемгә халҡым, динем, тип янып йөрөгән һәр ауылдың имам-хатибы, һис шикһеҙ, лайыҡ.*



үҙе генә өйҙә ултыра. Иң ҡыйыны, уға хәҙер 12 йәш булһа ла, энурез менән дә ыҙалана икән. Әсә кеше балаһына психологик ярҙам итеү мөмкинлеге хаҡында белеште. "Ҡыҙығыҙҙы ҡасан алып киләһегеҙ, ярҙам итермен", - тинем. "Ә ул бында, коридорҙа тора", - ти әсә. Мин был бала менән шундуҡ психик таҙарыныу, һауыҡтырыу сеансы уҙғарҙым. Сеанс технологияһы әллә ни ҡатмарлы түгел. Иң тәүҙә мин ҡыҙ балаға үҙемдең ярҙам итә алыуым хаҡында әйттем, бының өсөн тик мин һөйләгәнде генә тыңлап, мин ҡушҡандарҙы теүәл үтәп ултырырға кәрәклеге хаҡында аңлаттым. Мин, ғәҙәттә, гипноз сеансын классик музыка фонында уҙғара инем. Был юлы ла шулай иттем. Бала тиҙ арала гипноз йоҡоһона талды, һәм мин һауыҡтырыу алымдарын башланым. Ҡыҫҡаса әйткәндә, ҡыҙ йоҡо барышында минең менән хуш еҫле сәскәләр үҫкән туғайҙа йөрөнө, сәскәләрҙең шифалы еҫтәре уның тән күҙәнәктәрен таҙартты, шунан яр аҫтынан сылтырап ағып ятҡан шишмәгә төшөп, уның сихәтле һыуы менән йыуындыҡ, устарыбыҙға һалып эстек, артабан, тау башына менеп етеп, ҡоштар кеүек осоп киттек, иҫ киткес күк һауаһын һулап, тын юлдарыбыҙҙы, үпкәләребеҙҙе таҙарттыҡ. Иң аҙаҡтан диңгеҙҙә тулҡындар араһында һыу индек, шул тулҡындар әлегә тиклемге ауыр хәл-кисерештәребеҙҙе тулыһынса йыуып алып китте... Әлбиттә, сеанс барышында "Һинең барса тән ағзаларың таҙарып бара, һәр бер күҙәнәгең шифалы көс йыя, ә элек булған барса ҡыйынлыҡтарың, насар, ауыр кисерештәрең юғала бара, йәнең-тәнең бығаса булмаған, кисермәгән еңеллек менән тула", кеүек бағыу һүҙҙәре рефрен һымаҡ ҡабатлана барҙы. Сеанс тамам булғас, әсәһе, рәхмәт әйтеп, ҡыҙын коридорға алып сыҡты. Бер-ике минут үтеүгә ул кире килеп инде, борсоулы ҡиәфәттә: "Нишләптер ҡыҙым илай башланы", - ти. Ә мин: "Борсолмағыҙ, ҡыҙығыҙҙың йәне-тәнендә катарсис бара, ул элекке ауыр эмоцияларынан арына", - тип аңлаттым уға. Сеанс уңышлы үтһә лә, кәрәк булған хәлдә яңынан килергә ҡуштым.

Был ваҡиғанан һуң ярты йыл ваҡыт уҙып китте. Ситтән тороп уҡыусы студенттарҙың яҙғы сессияһы башланды, мин тәүге лекциямды уҡыр өсөн аудиторияға индем. Шул саҡта әлеге Белорет ҡатыны миңә сәскәләр гөлләмәһен бүләк итте һәм "Огромное спасибо за мою девочку!" - тип, рәхмәт белдерҙе. Уның ҡыҙын бимазалаған барса ауыр эмоциялары юҡҡа сыҡҡан, кәйефе һәр саҡ яҡшы, ул инде дуҫ ҡыҙҙары менән Ағиҙелгә һыу инергә лә йөрөй башлаған: "Доктор мне велел умываться чистой, волшебной водой", - ти икән әсәһенә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо сеанстар хаҡында күп уйланғаным бар. Минеңсә, йыһанда бар нәмә лә хәрәкәттә, мәңгелек әйләнештә ҡатнаша: Ер шары үҙ күсәре һәм Ҡояш тирәләй әйләнә, Ҡояш системаһы Ҡош юлы буйлап бара, галактикабыҙ ҙа йыһан киңлектәре аша мәңгелек хәрәкәтен дауам итә. Бәлки, миллион йылдар үтеүгә уларҙың һәр береһе йыһан хәрәкәтенең иң баштағы мәлдәренә кире урап ҡайта алыр... Шуға күрә шәхсән кеше йәндәренең йыһандағы мәңгелек әйләнеше булыуына ышанам. Нисек кенә булмаһын, әгәр кешелек үҙен үҙе юҡ итеүгә юл ҡуймаһа, ул тағы ла миллион йылдар буйына хәрәкәттән, үҫештән туҡтап ҡалмаҫ, тигән өмөт бар.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Аҙағы. Башы 5-7-се һандарҙа).**

мәтте икән был эште? Был һорауҙы мин биреп өлгөрмәнем уға. Сөнки ул, ҡурҡып торманым, шәп әйттем, тигән һауалы ҡарашын миңә бер генә ташланы ла эре генә ҡиәфәттә атлап китеп тә барҙы. Уның артынан моңһоу ғына йылмайып ҡалдым. Бер яҡтан уйлап ҡараһаң, көлкө. Ә икенсе яҡтан уйлап ҡараһаң, ҡыҙғаныс та һымаҡ.

Бер ваҡыт миңә бер хәҙрәт ошолай хәбәр һөйләп моңһоу йылмайып ҡуйғайны.

- Ҡайһы берәүҙәргә тиҙ генә ярҙам кәрәк. Әйтерһең дә, мин уларға скорая помощь.

Хәҙрәт бер аҙға тын ҡалды ла һүҙен дауам итте.

- Бар шундайҙар, улар мәсеткә үҙҙәренә кәрәк булған саҡта югереп килә. Шуныһы ҡыҙыҡ, мин нишләптер уларҙың йомоштарын югерә-сабып йөрөп үтәргә тейешмен. Ундайҙарҙың бер нисәүһен тыңлайыҡ әле.

- Балалар юлға сыҡты, йә, тиҙ генә шунда берәй нәмәне уҡып ташла әле.

- Төшөм болара, әллә кемдәрҙе күреп бөттөм, берәй доғаң юҡмы шунда.

- Хәлем юҡ, ябығып киттем, күҙ тейҙе, буғай. Өшкөрөп ебәр әле.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бар шул шундайҙар беҙҙең арала. Хатта доға уҡып ултырған хәҙрәтте ашыҡтырырға тартынмағандар ҙа бар.

- Шәберәк уҡыһаң булмаймы, ваҡытым юҡ, ҡырҡмаһа ҡырҡ эшем аунап ята (Һинең һымаҡ мин эшһеҙ мәллә, тип саҡ әйтмәй ултыра үҙе).

Хәҙрәткә бирһен түҙемлек, тигән теләк кенә теләргә ҡалалыр бындай осраҡта.

Теге юлы бер хәҙрәт менән ошолай һөйләшеп-көлөшөп торғайныҡ.

- Ҡайһы берәүҙәр өсөн мин урам һепереүсе йә ҡар көрәүсе.

Эш нимәлә? Ана, берәү мәсеткә инеп бара. Югереп бара һалып, тыңлайым әле уны.

- Ҡарын көрәп ҡуйырға ла эшкинмәгән (Хәҙрәт юлды көрәп өлгөрмәгән булһа).

- Бигерәк тар көрәгән (Әгәр тулыһынса көрәп өлгөрмәгән булһа).

- Шул хәтлем итеп көрәмәһә лә була инде (Бында әйтергә һүҙ ҙә юҡ).

Әйе, күптәребеҙ мәсеткә үҙенә кәрәк булған саҡта бара һәм хәҙрәтте үҙенә кәрәк булған саҡта ғына өйөнә саҡыра. Йә берәй туғаны мәрхүм булып ҡалһа. Йә берәй мәрхүмдең ҡырҡы (йә йыллығы) етеп килгән булһа. Тыштан йылы ҡаршы алабыҙ, ә эстән генә берәй "етешһеҙлеген" тикшереп торабыҙ.

- Йә инде, мулла башы менән йәйәү килгән (Хәҙрәт берәй машинаға ултырып килгән булһа).

- Ҡуй инде, машинаһы бигерәк иҫке (Әгәр хәҙрәт иҫкерәк машинала килгән булһа).

- Шула-а-а-ай, кемдең ҡулында - шуның ауыҙында! (Хәҙрәт яңыраҡ машина ғына түгел, хатта яңыраҡ телефон алған хәлдә лә ошондай һығымта яһала).

Әлхәмдүллилаһ, тип һөйләп ҡыуандырҙы бер хәҙрәт. Исмаһам, тей, хәҙер мәрхүмде һуңғы юлға оҙатышырға барғанда йылы ҡаршылайҙар. Ә элегерәк нисек булды икән?

- Сабып килеп етә лә һалған (Нимә тип әйтергә лә белеп булмай).

- Шалт багажникка бер һарыҡ (Аллам һаҡлаһын, әйтеү түгел, уйлауы ҡурҡыныс).

- Ике тапҡыр бит һыйпаны, ике биш меңлек кеҫәгә инеп тә ятты (Нимә әйтергә?).

Аптырарһың, тип көлә бер хәҙрәт, кемгәлер хәҙрәт исеме лә оҡшамай. Күптән түгел генә берәү мине ошондай һорауы менән аптыратты.

- Һеҙгә господин тип өндәшһәм буламы? (Бындай "елле" һорау эргәһендә арты менән һыуға сумырға маташҡан өйрәк пүстәк ул).

Мин ни әйтергә белмәй, бер мәлгә аптырап ҡалдым, ти хәҙрәт.

- Һиңә була! (Бындай яуап аптырағандан көндән булды инде).

Хәҙер "господин", үҙ сиратында, аптырап китте.

- Нишләп?

Мин тыныс ҡына яуап бирҙем.

- Аллам һаҡлаһын, хәҙрәт тип әйткәнеңдән ҡайһы бер ағзаң, йә ауыҙың ҡыйшайып ҡуйыр!

Аҫҡы эйәген ыуғылап тороп ҡалды ул. Ә мин уның эргәһенән тиҙерәк тая һалдым. Йә берәй туҙға яҙмаған һорау биреп ҡуйыр.

Ошо урында миҫалдар килтереүҙе туҡтатып торайыҡ. Сөнки хәҙрәт эшенең ауыр икәне былай ҙа аңлашыла бит инде. Ҡайһы бер кире күренештәр бер аҙ ҡабартыбыраҡ күрһәтелһә лә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай хәлдәр осрап тора. Бына әле, әлхәмдүлилләһ, рамаҙан айы башланды. Ураҙа тоторға нисип итһен барыбыҙға. Әй, әтәттәгенәһе, ураҙа тигәне ҡайһы бер хәлде иҫкә төшөрҙө лә ҡуйҙы. Һөйләмәйенсә булмай инде. Барыбыҙға ла таныш хәл, йыл һайын тигәндәй бәғзе бер мосолмандар хәҙрәткә ошолай үпкә белдерә.

- Һеҙҙең арҡала саҡ ураҙам боҙолманы! Һеҙ ураҙа ваҡытын дөрөҫ бирмәнегеҙ! Бер көнгә һуң (йә алда) бирҙегеҙ!

- Миңә уларҙы Өфөнән, Диниә назаратынан биргәйнеләр бит әле.

- Ә мин уны Иорданиянан алдым! (Нишләп унан алалырҙыр инде?).

- Әй, әттәгенәһе, минең Иорданияла бер танышым да юҡ шул. Булһа...

Ә берәй хәл-фәлән була ҡалһа... Аптырарһың, хәҙер "иорданец" хәҙрәткә югереп килә! Нишләптер Иорданияға шылтыратмай, теге танышынан кәңәш һорамай, уны аят-фәләнгә саҡыртып алмай.

Мәҡәлә башында, хәҙрәт исеме есеменә тап килә, тип яҙғайным бит әле. Ә уның мәғәнәһен аңлатырға онотҡанмын. Баҡтиһәң, борон дингә оло хеҙмәт итеп, оло хөрмәткә лайыҡ булған дин әһелдәрен ололап хәҙрәт тип йөрөткәндәр. Минең уйымса, бөгөн бындай мәртәбәле исемгә халҡым, динем, тип янып йөрөгән һәр ауылдың имам-хатибы, һис шикһеҙ, лайыҡ. Улар хәҙрәт кенә түгел, ә, алдан яҙғанымса, бихисап эш һөнәрҙәренә эйә булған кешеләр. Шул уҡ ваҡытта хәҙрәт ауырырға ла, арырға ла, ял итергә лә тейеш түгел. Отпуск-фәлән дә ҡаралмаған уға. Ҡыҫҡаһы, баш баҫып эшләргә лә эшләргә тейеш инде.

Мәҡәләмде тамамлап, шуны әйткем килә. Хәҙрәттәребеҙҙе ҡәҙерләргә өйрәнәйек. Тейешле хөрмәт күрһәтәйек. Хәлдән килгәнсә ярҙам итәйек. Аллаһ Тәғәләһенән иман ныҡлығы биреүен һорайыҡ. Рәнйеткән мәлдәребеҙ өсөн ғәфү итеүен һорайыҡ. Үҙ хәҙрәттәребеҙгә бағышлап доға ҡылайыҡ. Бигерәк тә ошо изге Рамаҙан айында!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Һыу турғайы, аҡтүш сумғалаҡ

**(Обыкновенная оляпка)**



Турғайҙарҙың араһында һыу менән бәйле булған был ҙур булмаған төркөм һыу турғайҙары ғаиләһенә ҡарай. Ғаиләлә 5 төр, Рәсәйҙә - 2, Башҡортостанда - 1. Һыу турғайы ҡара-көрән төҫтә, сыйырсыҡ ҙурлығында, йөнө ҡуйы, уға хатта һыу ҙа үтмәй. Түше, боғағы - аҡ, йәш ҡоштар көлһыу, буй-буй һыҙатлы. Һыу бөжәктәре һәм ҡыҫалалар менән туҡлана, уларҙы һыу һай ерҙә таштар араһынан тота, кәрәк булһа, тиҙ ағымлы йүгерек йылғаларҙа ла һыуға сумып һунар итә. Һыу аҫтында ҡанаттарын йәйә һәм ағым көсө уны түбәнгә этәрә, ҡанатын йыйһа, өҫкә атылып килеп тә сыға. Ә бына яй ағымлы йәки аҡмай ятҡан һыуҙа улай сума алмай. Йыры - сағыу сутылдау, кинәт кенә "черр" йәки "дзит" тип ҡысҡырып ала. Тиҙ ағымлы һәм таҙа һыулы йылғаларҙың ярына оя ҡора, ҡайһы саҡта бының өсөн шарлауыҡтарҙың аҫтын һайлай. 4-7 йомортҡа һала. Ҡышты йылғаларҙың туңмай торған өлөштәрендә үткәрә.

Һыу турғайы республиканың таулы райондарында осрай. Урал аръяғында йәшәмәй. П.П. Сушкин (1897) уны Бәләбәй ҡалҡыулығында, элекке Бөрө һәм Өфө уездарында теркәй. С.Г. Штехер (1913) был төрҙө өйрәнеп, Бөрө уездының Яманйылға тип аталған йылғаһы буйында эшләй. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988) һыу турғайы Ямантау һәм Ирәмәлдәге урмандарҙа баш алған таулы йылғалар урманлы-далалы ерҙәргә еткәнгә тиклем һыу турғайы йәшәгән ер тип билдәләй. Мәҫәлән, уларға Ҡаҫмар, Оло һәм Бәләкәй Һүрән һ.б йылғалар инә. Инйәр, Алаҡуян, Баҫыу, Ҡаға, Үҙән, Нөгөш, шулай уҡ Ағиҙелдең үрге ағымында ла бар. Беҙ был ҡошто Шүлгән йылғаһы һәм Ағиҙелгә ағып төшкән шишмәләрҙә тап иттек. М. Баянов 4 һыу турғайын Белорет районы Сермән ауылы эргәһендә Йәндек йылғаһында күрә. Был 1964 йылдың 11 ноябре була: сыйырсыҡҡа оҡшаған бер ҡоштоң ағас ботағына ҡунып һайрауы йәлеп итә, сөнки башҡа ҡоштар бит йәй һайрай! Шул мәлдә ул ҡапыл ғына һыуға сума ла, ҡабат килеп сығып, ташҡа ҡуна. Ҡалған ҡоштар һыуҙан сығып, епшек ҡарға ултырыуҙары була, көрткә батып та китә. Муйыны аҡ икәненә иғтибар итеп, уларҙың һыу турғайы, йәки аҡтүш сумғалаҡ булыуын теркәй автор. Ғафури районы Көгөш йылғаһында ла бер нисә тапҡыр был ғәжәйеп ҡоштарҙы тап итергә тура килде.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 2 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.35 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ландыши". [16+]
23.50 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Д/ф "Точка науки. Проверено наукой". [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "Жить..." [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Кўстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Давайте познакомимся". [12+]**
**1.45 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 3 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.35 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ландыши". [16+]
23.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 17.00 Полезные новости. [12+]**
**14.20 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**17.15 "География вкуса". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Д/ф О чем говорят Памятники. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). [12+]**
**2.00 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 4 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.35 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ландыши". [16+]
23.50 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 20.15 Полезные новости. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Монолог. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Вечное свидание". [12+]**
**1.45 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**3.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 5 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.35 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ландыши". [16+]
23.50 Д/ф Премьера. "Фултон: слова, ставшие гранью". [16+]
0.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.50 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**16.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Международному женскому дню.**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Формула здоровья. [12+]**
**20.30 Креативный код. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). [12+]**
**2.00 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 6 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Д/ф Премьера. "Жванецкий". [16+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Потерянный ключ". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Хором! [12+]
0.10 "Истории Большой Страны". [12+]
1.10 Х/ф "Женщины". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Дневник доктора Зайцевой". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башкорт йыры представляет". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15, 4.45 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Музыкальный чарт "Курай-ТВ". "Лучшие хиты башкирской эстрады". Прямая трансляция.**
**1.00 Х/ф "Вселенский заговор". [12+]**
**2.30 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 7 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Моих грехов разбор оставьте до поры". К 85-летию со дня рождения Андрея Миронова. [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.20 Д/ф "Березка. Красота по-русски". [12+]
14.35 Спецпроект. "30 лет вместе". [12+]
16.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Трансляция из Челябинска. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Ледниковый период". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.00 Премьера. Юбилейный концерт группы "Рондо". [12+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Прививка от лжи". [16+]
0.40 Х/ф "Прости за любовь". [12+]
4.11 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Неизвестный Башкортостан. [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 Детский концерт "Праздник весны и нежности". [6+]**
**10.30 "Елкән". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.20 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Материнство и детство. [12+]**
**17.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.00 Преображение. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 "Курай даны". [12+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**20.45 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 "Башкорт йыры представляет". [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.45 Хоккей. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). [12+]**
**2.45 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]**
**4.30 Башкорттар. [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 8 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Х/ф "Девчата". [0+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [0+]
14.10, 15.15 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
16.25 Премьера. Большой праздничный концерт "Будьте счастливы!". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Будьте счастливы!" [12+]
18.55 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
21.00 "Время".
21.35 Х/ф Премьера. "Пара на пару". [16+]
23.20 Х/ф "9 1/2 недель". [18+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.25, 1.40 Х/ф "Праздник разбитых сердец". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Большой праздничный концерт "О чём поют 8 Марта".
12.05 Х/ф "Служебный роман". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С праздником, милые женщины!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 16.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 "Курай даны". [12+]**
**8.30 Кўстәнәс. [12+]**
**9.00 Материнство и детство. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 Детей много не бывает. [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Тирмәкәй. [6+]**
**12.00 "Бирешмә. Йырла". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.15 Дорога к храму. [6+]**
**15.45 Честно говоря. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Международному женскому дню. [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Х/ф "И снова будет день". [16+]**
**2.00 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (13) дүшәмбе | 6:04 | 6:18 | 8:04 | 13:30 | 16:55 | 18:51 | 20:30 |
| 3 (14) шишәмбе | 6:01 | 6:15 | 8:01 | 13:30 | 16:57 | 18:53 | 20:32 |
| 4 (15) шаршамбы | 5:59 | 6:13 | 7:59 | 13:30 | 16:58 | 18:55 | 20:34 |
| 5 (16) кесе йома | 5:56 | 6:10 | 7:56 | 13:30 | 17:00 | 18:57 | 20:36 |
| 6 (17) йома | 5:54 | 6:08 | 7:54 | 13:30 | 17:02 | 18:59 | 20:38 |
| 7 (18) шәмбе | 5:51 | 6:05 | 7:51 | 13:30 | 17:04 | 19:01 | 20:40 |
| 8 (19) йәкшәмбе | 5:48 | 6:03 | 7:49 | 13:30 | 17:05 | 19:03 | 20:42 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*✓ Тәүге тапҡыр китапты уҡығанда, беҙ яңы дуҫ тапҡан кеүек үҙебеҙҙе хис итәбеҙ. Уҡылған китапты яңынан уҡыу - ул күптәнге дуҫты тағы күреү кеүек. (Вольтер).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ ҺӘЙКӘЛДӘР КЕМГӘ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**5-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Катод. Крючков. Алпан. Морат. Артыҡ. Автобус. Бабасыр. Алтын. Алматы. Әсе. Ата. Ҡарын. Наза. Ауди. Балыҡ. Абвер. Ваза. Девиз. Норма. Герб. Ат. наян. Аҡ.

**Вертикаль буйынса:** Болдуман. Мөбәрәков. Салехард. Каса. Етегән. Тараҡ. Каюта. Алиби. Злобин. Протазанов. Алама. Диван. Таҡ. Аса. Ҡабан. Лама. Ынйы. Ҡын. Нуҡта.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# УТ АЯУҘЫ БЕЛМӘЙ

**Республика буйынса Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы идаралығы хәбәр итеүенсә, үткән өс көнлөк ял осоронда янғында дүрт кеше һәләк булған һәм тағы ла бишәү тән йәрхәттәре алған. Йыл башынан алып иһә Башҡортостанда 654 янғын осрағы теркәлгән, уларҙа 31 кешенең ғүмере өҙөлгән, 27 кеше йәрәхәтләнгән.**

**Ҡалтасы районының** Ҡалмиябаш ауылында ағас йорт янып китә. Был ваҡытта өйҙә булған 58 йәшлек ҡатын ут эсендә ҡала һәм һәләк була. 28 йәшлек күрше егете ҡатынды ҡотҡарырға тырыша, ләкин утта ул ике ҡулын да бешерә. Уға медицина ярҙамы күрһәтелгән.

Шундай уҡ фажиғәле хәл **Ауырғазы районында** теркәлә. Талбазы ауылында янғында 85 йәшлек ҡатын һәләк була.

**Стәрлетамаҡта** Ленин урамындағы биш ҡатлы йортта янғын сыға. Ҡотҡарыусылар утты һүндерә һәм 71 йәшлек ирҙе алып сыға. Зыян күреүсе ныҡ янған була. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, табиптар ирҙе ҡотҡарып ҡала алмай.

**Стәрлетамаҡ районының** Помряскино ауылында шәхси йорт янып китә. Янғын һүндерелгәндән һуң, утта һәләк булған 1937 йылғы ирҙең кәүҙәһе табыла.

**Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы граждандарҙы һаҡ булырға, иҫерек килеш түшәктә тәмәке тартмаҫҡа һәм йортта мотлаҡ янғын хәбәр иткес ҡоролма ҡуйырға саҡыра.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 февраль, 1 март "Кейәүҙәр"** (Х.Вәхит, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

**3 март "Һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров, А. Абушахманов), докум. драма. 16+

**4 март "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27, 28 февраль "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), 6+

**27, 28 февраль "Мәйсәрә мутлыҡтары"** (Х. Ниязи, Р. Хәкимов), комедия. 16+

**1 март "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. 12+

**3 март "Волшебник Изумрудного города"** (А. Богачева, М. Күлбаев), әкиәт. 6+

**4 март "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**4 март "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ",** (М. Кәрим, М. Күлбаев). 19:00. 12+

**5 март "Күктә ике йондоҙом балҡығанда"** (И. Асылбаева, И. Лоҡманов), 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28 февраль "Гуси-лебеди".** 12:00 һәм 14:00. 0+

**28 февраль "Снежная королева"** (Г.Андерсен). 15:00. 0+

**1 март "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский). 12 һәм 15:00. 0+

**1 март "Етем төлкө"** башҡорт халыҡ әкиәте. 14:00. 0+

**4 март "В последний путь под рок-н-ролл"** (В.Денисов). 19:00. 16+

**5 март "Тьма египетская"** (М. Булгаков). 19:00. 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27 февраль "Очарование романса"** "Забава" ансамбле концерты. 12+

**3 март "Ҡыҙғанмам йөрәк йылымды..."** Лев Ҡолошев концерты. 12+

**4 март "Ҡатын-ҡыҙҙың күңел наҙы"** Айнур Туҡтаев концерты. 12+

**5 март "Органная музыка солнечной Италии"** Лоренцо Гьельми концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**3, 4 март "Машенька от 1 до 5"** (Н. Жуламанова), комедиялы драма. 12:30 һәм 14:00. 12+

**4 март "Йөрәк майым..."** (Б.Абдразаҡов), мелодрама. 19:00. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 февраль "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н.Ғәйетбаев), комедия. 12+

**28 февраль "Ятҡа бирер йәрем юҡ!"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**5 март "Өс мөғжизә мине әсир алды - Ер, йәнә күк, йәнә ҡатын кеше"** "Ашҡаҙар" фольклор-эстрада төркөмө концерты. 6+

## А. Мөбәрәков исемендәгет Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**27 февраль "Өҙөлгән өмөт"** (Н.Асанбаев), драма. 16+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**3 март Динар Ғәйнуллиндың** концерты. 6+

## БР Милли музейы

**28 февраль "Мать-Әсә"** Ғ.Ғәлимуллинаның фотоһүрәттәр күргәҙмәһе. 15:00. 0+

**28 февраль "Веселая лепка"** оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+

*Бейеүҙе күңел асыу сараһы һымаҡ ҡабул итеүселәр йышая бара, юҡсы, ул - бик етди шөғөл. Үҙ бейеүселәремә ҡарап, ҡыуанып йөрөйөм, үҙҙәренә лә әйтәм, 15 йылға ғүмерҙәрегеҙ оҙая, тим.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЕРҘЕҢ ҠОЯШЛЫ ЯҒЫНДАЛАР

(Башы 11-се биттә).

Сығарылыш кисәләре ваҡытында беҙҙә мәктәп шығырым тулы була: балаларҙың атай-әсәйҙәре килә, элекке сығарылыштан да киләләр, уҡытыусылар, уҡыусылар - бөтәһе лә бер залға йыйылалар, ҡотлайҙар, мәктәпкә ҡағылышлы йылы һүҙҙәрен еткерәләр. Кисә бөтөүгә ҡарай алып барыусы, тағы кемдәрҙең әйтер һүҙе бар, тигәйне, Фиданым йүгереп сығып, сәхнәгә менде. Ыста, ул унда ни эшләй икән, тип уйлап та өлгөрмәнем, Фидан һүҙ алды. "Фәнүзә Мәжит ҡыҙына рәхмәт әйткем килә, ул мине туҡмай-туҡмай бейергә өйрәтте", - ти. Туҡмай тигәне гел арҡаһына һуғып йөрөүҙе әйтәләр инде. Бөтәһе лә гөж итеп ҡалдылар. Йүгереп төштө лә мине ҡосаҡланы, үҙе илай. Бына бит ул нисек, бейеү унының өсөн шул хәтлем мөһим булған икән! Балалар ҙа тәрбиәләй бит ҡайһы ваҡыт, беҙ уларҙы ғына түгел, улар ҙа беҙҙе тәрбиәләй. Үҙҙәренең холоҡтары менән...

## Күңел талабы ла

Шундай балалар була, бигерәк тә егеттәр - һәләте бар, буй-һыны бар, ритмды тоя, бәләкәй саҡтан бейей башлаған, шартлатып бейерлек, тик ялҡау! Ундайҙар бейеүгә һүлпән генә, инәлтеп кенә йөрөйҙәр, дәрестәрҙе ҡалдыралар. Ҡыҙғаныска, шундай тенденция бара хәҙер, күрәһең, бейеү - күңел талабылыр инде, ул кәүҙәне матурайтыу өсөн генә түгел, рухи яҡтан үҫешеү өсөн дә мөһим. Һуңғы йылдарҙа үҙем өсөн асыш яһаным: эйе, бейеү - хәрәкәт, унының менән шөғөлләнеү тик файҙаға ғына. Кешенең мейеһен өйрәнеүсе ғалимдар һәр кеше бала сағынан уҡ музыка, вокал, бейеү, йә иһә һынлы сәнғәт менән шөғөлләнһә, мейеһенең ярымшарҙары тигеҙ үҫешә икәнен күптән иҫбатлаған. Бындай мөмкинлектән мәхрүм булғандарҙың мейеләренең бер ярымшары йоҡлай. 18-се, 19-сы быуаттарҙағы дворян ғаиләләрендә һәр баланы ни өсөн бәләкәйҙән үк берәй музыка ҡоралында уйнарға өйрәткәндәрен яҡшы аңлайым хәҙер. Мәжбүри рәүештә уҡытыуҙары бушҡа түгел, мәғәнәле булған. Бөгөн дә бар ундай ғаиләләр, тик һирәк. Етмәһә, бейеүҙе күңел асыу сараһы һымаҡ ҡабул итеүселәр йышая бара, юҡсы, ул - бик етди шөғөл. Үҙ бейеүселәремә ҡарап, ҡыуанып йөрөйөм, үҙҙәренә лә әйтәм, 15 йылға ғүмерҙәрегеҙ оҙая, тим. Әлбиттә, һүҙ тик бейеү тураһында ғына түгел, кемдер йырлауға маһир, кемдер һүрәт төшөрөргә ярата, йә иһә берәй музыка ҡоралында уйнай. "Ысын сәнғәтте яратҡан кешеләр Ерҙең ҡояшлы яғында йәшәй", - тигән бит Мостай Кәрим. Был ҡанатлы һүҙҙәр һәр кемебеҙгә ҡағыла, Ерҙең ҡояшлы яғында йәшәгән кешеләрҙең күберәк булыуын теләр инем.

## Бейеү хәрәкәт кенә түгел

"Сәнғәттең күңелегеҙгә ятҡан төрөн һайлағыҙ, башҡорт булғас, һис шикһеҙ, ҡурайҙа уйнағыҙ, бейегеҙ", - тим балаларға. Элек бит сәсәндәр быуындан-быуынға халыҡ ижадын һаҡлап алып ҡалған, йырсылар халыҡ йырҙарын йәштәргә өйрәткән, хәҙерге һымаҡ ноталарға һалып, институттарҙа уҡытмағандар бит. Бейеүҙәрҙе лә өйрәткәндәр, берәү ҙә бейеүсе булып тыумаған, бер-береһенән өйрәнеп үҫкәндәр. Был бик мәғәнәле эш.

Бейеүҙәр һәр кем өсөн мотлаҡмы, әйтә алмайым, әммә һәйбәт күренеш икәнен аңлайым. "Массовый булырға тейеш", тип, спортты пропагандалайбыҙ бит, бейеү ҙә шулай булһа, һис тә хилаф булмаҫ ине. Хәҙер күп ерҙәрҙә өлкәндәр үҙҙәре клубтар ойоштороп, бейергә өйрәнәләр. 70-90 йәшлектәр шулай аралашалар, һаулыҡтарын яҡшыртып, ғүмерҙәрен оҙайталар, ниңә, насармы ни! Бик тә мәслихәт! Өйҙә ауырыйым-ауырыйым, тип, һыҙланып ултырғансы, бейеп йөрөй икән, бик тә һоҡланғыс. Хатта "Байыҡ" конкурсында ҡатнашалар икән, тимәк, хәрәкәт өсөн генә шөғөлләнмәйҙәр, күңелдәре лә байый, яңғыҙлыҡтан да ҡотолалар. Былар бөтәһе лә һәйбәт, ыңғай күренеш, тип уйлайым.

## Кескәй генә йәштән...

Баҡтиһәң, ҡафтауҙыҡылар балаларын 4 йәштә үк бейеүгә баҫтыралар икән. Уларҙың егеттәренең һәр береһе бейей белә, сөнки бейеүҙе мотлаҡ шөғөл, тип һанайҙар. Дүрт йәштә үк малай аяғының осона баҫа башлай икән, тимәк, киләсәге бар. Беҙҙең башҡорт егеттәрен дә шулай бала сағынан бейетер кәрәк, тип уйлайым, сөнки ҡаныбыҙҙа бейеү рухы, дәрте бар, тау кешеләренән бер ҙә ҡалышмайбыҙ. Мәҫәлән, Хәлил Ишбирҙиндың бөтә бейеүҙәре лә башҡорт рухына ҡоролған, халҡыбыҙҙың үлмәҫ характерын сағылдыралар. Бейегән бала бит теләһә ҡалай йөрөмәй, аҙаҡтан унан насар кеше сыҡмай, ул тәрбиәле була. Әлбиттә, бөтә кеше лә бейеүсе булып китмәй, күптәргә тәтемәй был һәләт, һүҙ тәрбиә тураһында. 15 йыл эшләүем дәүерендә бер генә бейеүсем Стәрлелә профессиональ ансамблдә бейей, ҡалғандары ҡайҙа уҡыһалар ҙа, Мәскәүҙәме, Питерҙамы, шундағы уҡыу йорттарының бейеү ансамблдәрендә бейейҙәр, юғалмайҙар. Фидандың былтыр туйы булды, видеоһын һалған, шунда бөтәһе лә бейеп йөрөй. Үҙенең туйында матур итеп бейеп йөрөүе ғорурлыҡ уята! Ә ул бит һөнәре буйынса бейеүсе түгел, әммә унда башҡорт рухы тәрбиәләнеүе матур күренеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли рух тураһында йыш һөйләйбеҙ. Ә бит, уйлап ҡараһаң, халҡыбыҙҙың дәртле бейеүҙәре лә ошо тирмәндең таштарын әйләндереүсе көс икән дә баһа!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮПТЕ КӨҪӘҺӘҢ...

## йылан һымаҡ шыуышырһың

Аҡыллы тигәнең маҡтана башлаһа, тинтәк тип иҫәплә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Хоҙай ерҙе һәм ундағы тереклекте, йән эйәләрен яралтҡандан һуң, барыһын да матурлыҡ менән бүләкләй. Ә бына аҡылды Ул кеменәлер аҙыраҡ, кеменәлер күберәк итеп, самалап өләшә. Ер үҙ ҡанундары менән йәшәй башлай. Үҫемлектәр, ағастар үҫә, сәскә ата, уларҙың матурлығы Хоҙайҙы сикһеҙ шатландыра. Тик Уны тере йән эйәләренең ҡайһы берҙәренең матурлыҡ менән мөрхәтһенмәйенсә, ерҙә алла булырға ынтылыуы ғына борсой. Арыҫлан - бөтә кейектәрҙең, кеше бөтә тәбиғәттең батшаһына әйләнә бара.**

**Ә йылан иһә аҡыл батшаһы булырға ынтылып, барыһына ла аҡыл һата. Бәләкәйерәк һәм күҙгә бик үк салынып бармаған сағында әле ул буйһоноусан була, матур ғына итеп аҡыл-кәңәштәр бирә. Ләкин уны берәү ҙә тыңламай һәм аҡыл батшаһы итеп танымай. Был хәл йыланды үтә ныҡ асыуландыра. Асыуы эсенә йыйылып, ағыуға әйләнә. Ағыуға эйә булғандан һуң, йылан кәңәш биреүҙән туҡтай һәм үҙен тыңламаусыларҙы саға башлай. Ләкин ерҙәге бар йән эйәләрен дә үҙенән ҡурҡырға мәжбүр итә алмай, киреһенсә, йән эйәләренең ҡайһыһылыр үҙен иҙеп ташлай, хатта йотоп ебәрә. Шунан йылан үҙенең ағыуын үлемеслегә әйләндерә. Унының ағыуына тарығандар яҡты донъя менән хушлаша. Йыланға күренмәй генә үләндә шыуышып йөрөүҙә оҡшамай башлай. Ул бер-бер артлы үҙенең тиреһен үҙгәртә, ялтырауыҡтарға төрөнә, уға бағыусыларҙың күҙҙәрен һуҡырайтырға теләй. Ләкин берәүҙең дә күҙе һуҡыраймай. Шунан йылан ҙур булып үҫеп, тәбиғәттәге бар йәнлектәрҙе ҡурҡытырға була. Ләкин үҫеп-үҫеп тә, тәбиғәттәге иң ҙур йәнлектәр кимәленә етә алмай, сөнки Хоҙай уға был мөмкинлекте бирмәгән була бит. Шулай итеп, йылан был юлы ла башҡаларҙан өҫкә сыға алмай. Ул шул тиклем асыулана, асыуынан муйыны яға кеүек ҡабара. "Ярай, был яға миңә батша төҫө бирер", тип ҡыуана ул. Ләкин был да уны батша итә алмай. Шунан йылан барыһын да гипнозы менән арбарға тотона. Әммә унының был һәләте лә ҡурҡыта алмай тере йән эйәләрен. Шунан ул: "Ярай, ерҙә батшалар күп, ә мин Алла булам!" - тип һығымта яһай. Унының һүҙҙәрен Хоҙай ишетә. Йыланға аҡылды бик аҙ биргән икәнен, ләкин башы бәләкәй булғас, уға тағы аҡыл өҫтәп булмаауын аңлай. Шулай Хоҙай йыланды аҡылһыҙ көйө ҡалдыра. Ерҙәге тереклеккә һәм йән эйәләренә зыян килтермәһен өсөн уны ер аҫтына йәшерә.**

**Шулай итеп, ҡоштар күктә оса, йәнлектәр ерҙә йөрөй. Ә йыландар ер аҫтында көн күрә. Улар, әлбиттә, матур. Уларҙың ағыуына тиң ағыу юҡ. Уларҙың гипнозы ла хәтәр. Ләкин Хоҙайҙың йыланда эше юҡ. Йыландар Хоҙай һәм башҡа йән эйәләре тарафынан инҡар ителеп, ерҙә шыуышып йөрөй бирә. Күпте көҫәгәндәр шундай яҙмышҡа дусар була ла инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26008

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 26.02.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 26.02.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 27.02.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 354